ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3-9 ноябрь (ҡырпағай) 2018

№44 (826)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға яҙылыуҙың ҡыҙыу миҙгеле дауам итә. Шулай итеп, 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 609 һум 96 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 641 һум 16 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 550 һум 38 тингә яҙыла ала. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер, ғәҙәттәгесә, матур китапҡа өмөт итә ала. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Энер шәфәғендә...**

базрай ҡәнәфер



3

**Етәксебеҙ яңырҙы**



5

**Иң яҡшы ҡошсолар - башҡорттар!**



8-9

**Икмәктән оло булма!**

Унын тарихы - кешелек тарихы



12-13

**ТВ-программа** 14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ир-егеттәр бөгөн үҙ ғаиләһенә ниндәй дәрәжәлә таяныс?

***Рәйлә ИШКИЛДИНА, мәғариф ветераны, Өфө районы Шамонин ауылы:*** Бөгөн генә түгел, ниндәй заманда ла ир-егеттең ғаиләләге роле икенсе планға күсергә тейеш түгел, тип иҫәпләйем. Башҡорт ғаиләһендә быуаттар буйы ир, атай, уландар төп таяныс та, хужа ла, аҫраусы ла, яҡлаусы ла булған. Ә шулай ҙа заманалар үҙгәрә килә төрлө ваҡыттар булып алды, быныһы үҙегеҙгә лә мәғлүм: колхоз-совхоздар бөтөрөлөп, предприятиелар ябылған осорҙарҙа эшһеҙ тороп ҡалған ир-егеттәрҙең баҙап ҡалған мәлдәре лә булды, ләкин хәҙер ул ваҡыттар артта ҡалды, ир-егеттәр яңы ҡоролош шарттарына ярaҡлашып, ғаилә "дилбегәһен" ҡайтанан үҙ ҡулдарына алды, тип әйтергә лә булалыр. Һәр хәлдә беҙҙең Шамонин ауылы миҫалында шулай тип ҡыйыу әйтә алам: хәстәрлекле, уңған, эшсән ир-егеттәр йәшәй беҙҙә. Быны мин урамдан үтеп барғанда һәр береһенең ҡурсаҡ кеүек йорттарына ҡарап та әйтәм: нисек итеп сәмләнеп, бер-береһенән ҡалышмаҫҡа тырышып донъя көтә, йорттарын, ишек алдарын, урамдарын зауыҡлы дизайн буйынса бына тигән итеп төҙөкләндерә улар! Мунса һалалар, гараж ултырталар, баҡса кәртәләйҙәр, ер эшкәртәләр, һәр йорт янында - машина, башҡа төр техника...Балалар өсөн эшләп ҡуйылған уйын майҙансыҡтары иһә уларҙың хәстәрлекле атай булыуҙары тураһында һөйләй. Быларҙы бит улар төп эштәренән ҡайтҡас эшләй. Әйткәндәй, күбеһе бер нисә эшкә өлгөрә әле уларҙың, бер ҙә иренмәйҙәр: кредитты түләргә, ғаиләне аҫрарға кәрәк бит! Әгәр ялҡаулаһып, бот күтәреп ятһалар, бөгөнгө көнгә ауылыбыҙ шулай танымаҫлыҡ булып үҙгәрер ине микән? Эйе, тәүҙә бөтөн йорттар ҙа бер иш - дүрт стена ла ҡыйыҡ ине. Ә хәҙер бер йорт икенсеһен ҡабатламай, сөнки һәр береһенең уңған хужаһы барлығы әллә ҡайҙан "ҡысҡырып" тора. Бынан тыш, беҙҙәге һәр йорттоң үҙенең автоном йылытыу, һыу үткәргес, газ яғыу селтәре бар. Донъя бит, тегенеһенбыныһын ҡорорға, ремонтларға кәрәк булып киткән хәлдә Өфөнән мастер саҡыртып тормайбыҙ: оҫта ҡулдар үҙебеҙҙә бар: слесарь булһынмы, евротәҙрә, ишек ҡуйыу тиһеңме, шиномонтаж... Шулай итеп, өҫтәмә табыш та эшләй ҡулы оҫталар. Бына шундай тырыш ир-егеттәр йәшәй беҙҙә, улар беҙҙең таяныс, тип ышаныс менән әйтә алалыр, тим ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ, иншалла!

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҠОТЛАШАЙЫҠ!

# ЙЫЛЫ ҺҮҘ - ЙӘН АҘЫҒЫ,

## бер-берегеҙҙән уны йәлләмәгеҙ

**Ниңә беҙ үҙебеҙҙе һәм яҡындарыбыҙҙы шифалы, һауыҡтырғыс, терелткес, тылсымлы ҡотлау, рәхмәт һәм һөйөү һүҙҙәренән, йән аҙығынан мәхрүм итәбеҙ? Тыуған көндәрҙә, юбилейҙар йә туйҙар уңайынан ғына бер-беребеҙҙе ҡотлайбыҙ ҙа - шуның менән вәссәләм.**

Беҙҙең һеҙгә тәҡдимебеҙ бар: әйҙәгеҙ, яҡындарыбыҙҙы яңы көн, яңы уңыштар менән ҡотлайыҡ. Уларҙың донъяла булғаны өсөн рәхмәт әйтәйек. Дуҫтарыңдың һәм яҡындарыңдың тормошта өлгәшкән бәхете - абруйлы хеҙмәткәр, яҡшы атай йә әсәй, өләсәй йә олатай, яҡшы дуҫ, иптәш, хеҙмәттәш булыуын иҫкә төшөрәйек тә, ошо өлгәшкәндәре менән дә ҡотлайыҡ. Хатта күңеле һәм тормошо ҡыуанысҡа тулған мәлдә - яңы йорт һалғанмы, фатир алғанмы, яңы машинаға эйә булғанмы - ябай ғына һүҙҙәр аша шатлыҡ уртаҡлашырға була. Шулай уҡ үҙ ваҡытында рәхмәт һәм һөйөү һүҙҙәре еткереү ҙә ҡалай кәрәк. Әлбиттә, беҙҙең "Киске Өфө" гәзите аша, тип әйтмәксебеҙ. Ҡотлау, рәхмәт һәм һөйөү һүҙе еткереү хаҡы - 400 һум. Тексттарҙы төҙөргә лә ярҙам итә алабыҙ. Хаттар һәм шылтыратыуҙар көтәбеҙ һеҙҙән.

**Бер ҡотлау беҙҙән:**

**"Хөрмәтле "Киске Өфө" гәзитен уҡыусылар! Беҙҙең араларғы һынау үткән, төңөлөү тигәнде белмәгән, ихласлыҡҡа, хөрмәткә, ышанысҡа нигеҙләнгән Дуҫлыҡ менән ҡотлайбыҙ һеҙҙе. Артабан да бер-беребеҙҙе яҡтылыҡ, изгелектәр һәм яҡшылыҡтар менән генә ҡыуандырып йәшәргә яҙһын. Изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр".**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**




12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТАРИХЫҢДЫ БЕЛ!

***Азат ИБРАҺИМОВ, БР Халыҡтар дуҫлығы йорто директоры:*** Тәү сиратта, милләттәштәргә республикаһың уртаҡ тарихын ғына түгел, үҙ халҡыңдың, ырыуыңдың һәм ғаиләңдең тарихын яҡшы белергә кәрәк, тип әйтер инем. Сөнки һәр кемдең быуынында оло әһәмиәткә эйә тарихи ваҡиғаларға мөнәсәбәтле туғаны бар. Шәжәрәне белеүҙең әһәмиәтен барыһы ла аңлап тора, хатта Үҙәк телеканалдарҙың береһендә "Родословное" тигән тапшырыу беҙҙең "Шәжәрә" байрамы үрнәгендә башланып китте бит. Шулай уҡ милләттәштәремден үҙ-ара туған башҡорт телебеҙҙә күберәк аралашыуын теләр инем. Әлбиттә, бының өсөн ата-әсәнең аңлы булыуы ла, мәктәптә дәрестәрҙең ҡыҙыҡлы үтеүе лә талап ителә. "Берҙәм өйҙә бәрәкәт бар, ғауғалы өйҙә һәләкәт бар", тигәндәр - был һүҙҙәргә ҡолаҡ һалайыҡ. Башҡортостанда үҙебеҙ татыу торайыҡ, республиканан ситтә йәшәгән милләттәштәрҙе лә онотмайыҡ. Берҙәм булыу өсөн бер-беребеҙҙең эштәрен күреп, баһалап, хуплап тороу кәрәк. Ҡыҙғаныска күрә, граждандар һуғышы халыҡты бүлгеләне, сит яҡтарға сығып китергә мәжбүр булған ғалимдарҙың, алдынғы ҡарашлы шәхестәрҙең күп хеҙмәттәре әлегә тиклем киң йәмәғәтселеккә билдәһеҙ булып ҡала. Тыуған төйәкте өйрәнеүселәргә Латвияның Тарту университетында Пугачев ихтилалына ҡағылышлы материалдарҙы, Санкт-Петербургтағы Көнсығыш университетының архивында һаҡланған мәғлүмәттәр өҫтөндә эшләргә тәҡдим итәм. Беҙ ҙә был юҫыҡта ниндәйҙер кимәлдә эш алып барабыҙ, әммә йәмәғәтселек тарафынан да инициатива булырға тейеш.

Башҡортостан халҡы күп милләтле, тип йыш ҡына ҡабатлап торабыҙ. Халыҡ-ара мөнәсәбәттәргә ҡағылышлы фекерем шундай: заманалар үҙгәреү менән милләттәрҙең менталитеты ла үҙгәрҙе. Рәсәй Федерацияһының яңы тарихы формалашҡан йылдар эсендә элекке союздаш республикаларҙа йәшәгән ҡәрҙәштәрҙең дә йәшәйеше, идеологияһы үҙгәрештәр кисерҙе. Совет заманында беҙҙе бер бөтөн иткән уртаҡ илебеҙ, тарихыбыҙ, хәтер булһа, бөгөн улар юҡ. Үткәндәргә лә ҡараштар үҙгәреп тора, шуға, бигерәк тә йәш быуындың милләт-ара мөнәсәбәттәргә ҡағылышлы мәсьәләләрҙә бер аҙ ҡиҫкенлек күрһәтеүе ихтимал. Шундай осраҡта үҙенде нисек тоторға? Тәү сиратта, тәрлө ҡотҡоларға бирелмәй, законлы алымдар менән уйлап, һаҡ ҡына эш итергә кәрәк. Быны ошоно милләттәштәр һәр ваҡыт хәтерендә тотһон һәм белем, аҡыл, тәрбиә тигән сифаттар кешенең төп асылын сағылдырыуын иҫәпкә алып, тиндәр араһында тиң булып йәшәһендәр.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ир-егеттәр бөгөн үҙ ғаиләһенә ниндәй дәрәжәлә таяныс?

**(Башы 1-се биттә).**

***Азамат ЮЛДАШБАЕВ, яҙыусы, журналист, блогер:*** Ғаиләһенә таяныс булырҙай ирҙең холоҡ-сифаттары ниндәй һуң? Яныраҡ шулай үҙемдән күпкә йәшерәк бер дуҫым һорай ҡуйҙы: "Һеҙ һәр ваҡыт шулай иртә тораһығыҙмы?" Уның был һорауы минең элекке, ижтимағи әүҙем йылдарымда яһаған сығыштарымды иҫкә төшөрҙө. Мәктәптәрҙә, юғары уҡыу йорттарында булған осрашыуҙарҙа йыш сығыш яһарға тура килә ине. Күберәк ҡыҙҙарға ҡарап өндәшә инем - улар бит булаҫаҡ ир ҡатындары, әсәйҙәр... "Киләсәктә ирегеҙ, бөгөн ял, байрам йә булмаһа отгул, тигән һылтау менән иртәнге 8-ҙән һуң ҙа тормайынса түшәктә һуйлайып ята икән, артына типкеләп сығарып ебәрегеҙ уны... Бөтөнләйгә ҡыуып ебәрһәгеҙ ҙә була. Ирҙәр өсөн ял да, байрамдар ҙа юҡ. Ул - һунарсы, малтабар, аҫраусы. Шуға ла ул һәр ваҡыт хәрәкәттә булырға тейеш. Сығып китһен, табыш менән ҡайтып инһен, уны ҡатынының аяҡ аҫтына ырғытһын да, балаларын иркәләһен, ҡатынын яратһын - һәм тағы сығып китһен: аҡса эшләргә, мал табырға, осоштарға..." Ысынлап та, ғаиләһенә таяныс булыр ир-егет тик тора алмай, улар өсөн ял юҡ. Һәм бер ваҡытта ла уларҙы йәлләргә кәрәкмәй. Ир-егет, бөркөт һымаҡ, осҡанында ял итергә тейеш. Был, әлбиттә, минең элегерәк әйткән һүҙҙәрем. Хәҙер икенсерәк төрлө уйлайым: ир-егеттең иртәнге 7-нән һуң иркәләнеп ятырға хоҡуғы юҡ...

***Алма ЙӘҺҮҘИНА, ғаилә психологы:*** Ир-егет ғаиләгә таяныс булһын өсөн уның үҙенә лә таяныс кәрәк. Ә ир-егет өсөн бындай таяныс - ҡатыны, уның эскерһеҙ һөйөүе, хәстәрлеге, аңлай белеүе, йомшаҡлығы. Шуға ла аҡыллы ҡатын-ҡыҙ үҙенә ниндәй ир кәрәклеген ғаилә ҡорорҙан күпкә алдараҡ уйлап, планлаштыра башлай. Кемдер, был бит иҫәп-хисапҡа ҡоролған союз булаҫаҡ, тип ҡаршы төшөүе бар. Ғәҙәттә, бай, аҡсалы кеше менән мөхәббәтһеҙ никахҡа барыуҙы иҫәп-хисап менән кейәүгә сығыу тип әйтәләр. Ләкин был ул тиклем киң таралған күренеш түгел. Ғәҙәттә, бер-береһенең етешһеҙлектәрен белә-күрә өйләнешеп тә, бер-береһенең холҡон, ынтылыштарын йайлап ҡына тейешле йүнәлештә үҫтергән, камиллаштырған парҙар йышыраҡ осрай беҙҙә. Ҡатынының һөйөүе хаҡына ир-егет тау аҡтарыр ҡеүәткә эйә, тик ҡатын кеше ана шул һөйөүҙе һаҡлай белергә, сабыр, итәғәтле, хәстәрлекле хужабикә була белергә тейеш. Тураһын ғына әйткәндә, ярлынан да хатта бай ир яһап алырға була, тик был көслө ҡатындарҙың ғына ҡулынан килә. Тик шуны ла онотторға ярамай: көслө ҡатын булыуҙың икенсе йөҙө лә бар - уны ир абруйын юҡҡа сығарыр кимәлдә ҡулланырға түгел, киреһенсә, ғаиләне һаҡлайым, тигән осраҡта, ирҙе камиллаштырыуға, уны яңынан-яңы ҡаҙаныштарға әйҙәп, рухландырып тороуға сарыф итеү хәйерле. Ә инде әҙерҙе көтөп, юҡҡа-барға көйһеҙләнеп, үҙенә генә иғтибар талап итеп өйрәнгән ҡатын-ҡыҙ, киреһенсә, яҡшы иренән дә ҡолаҡ ҡағыуы ихтимал. Шуға күрә, тағы бер тапҡыр, ғаилә таянысы - ир икән, ирҙең таянысы - ҡатын-ҡыҙ, тип ҡабатлағы килә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# АТАЙ-ӘСӘЙ СӘЛӘМЕЛӘЙ ГӘЗИТ

**Мәктәптә уҡып йөрөгән саҡта каникулдарға өләсәй менән олатайға ауылға ҡайта инек. Уларҙың почтальондың яңы гәзит алып килеүен көтөп йөрөүе матур бер хәтирә булып күңелгә уйылып ҡалған. Иң ҡыҙығы, уларға эйәреп, беҙ ҙә көтә инек был апайҙы. Гәзит ҡыҫтырып китеүен күрергә тырыша инек. Йүгереп сығып, беренсе булып ошо ниндәйҙер тәмле еҫ сығып торған гәзитте ҡулға алыу шатлыҡ ине.**

Матур мөнәсәбәттәргә, үҙ-ара аңлашыуға нигеҙләнгән ғаилә шулай булырға тейеш, тип уйлай инем. Был ғаиләнең йорто, сәскәләргә күмелгән баҡсаһы, үлән тибеп йөрөгән тауыҡтары бар һәм, әлбиттә, баҡса текмәһенә гәзиттәр ҡыҫтырылып тора. Һүрәттәрҙә лә ошондай йортто төшөрә инем. Бөгөн үҙемдең ғаиләм, өйөм, балаларым бар. Һәм минең йортома аҙнаһына бер тапҡыр почтальон гәзит-журналдар алып килә. Нимә эшләп йөрөүемә ҡарамаҫтан, барыһын да ситкә ҡуйып тороп, иркенләп ултырып уҡып алам.

Ә һеҙ, дуҫтар, гәзит алдыраһығыҙмы? Технологиялар заманында, смартфондан, планшеттан йәки компьютерҙан күңелгә яҡҡан мәғлүмәтте табып була, әлбиттә. Йәшермәйем, был уңайлы ла. Әммә ҡағыҙға баҫылған гәзиттәр һәм журналдар ҙа кәрәк. Бер яҡтан, барыһы ла смартфондан матбуғат баҫмаһын уҡый ҙа алмай, өлкән быуындың тормошонда ҡағыҙ баҫмалар ҙур әһәмиәткә эйә. Икенсенән, ҡағыҙға баҫылған хәбәр ҡағыҙға баҫылған инде ул, уға ышанаһың. Күптәр ҡулына тотоп уҡыуҙан ләззәт ала. Баҫма матбуғаттың ыңғай яҡтарының бер нисәһен генә атаныҡ. Тағы ла икенсе яғы бар уның. Тап ҡағыҙға баҫылған гәзиттәр, журналдарҙы беҙ бала саҡтан беләбеҙ: атай төшкө ашҡа ҡайтҡан арала "Башҡортостан" гәзитен ҡараштыра, өләсәйҙең урындығы тулып "Осҡон" гәзиттәре ята, фильмда бер малай "Нью-Йорк таймс"тың яңы һаны!" тип ҡысҡыра, беҙ ҡустым менән гәзиттән нимәнелер ҡырҡып алып ултырабыҙ, студент саҡта каникулға ауылға ҡайтҡан арала йыл буйына йыйылған журналдарҙы уҡыйбыҙ.... Ошолар ҙа беҙҙең күңелдә йылытып тороусы иҫтәлектәр бит бөгөн, бәхетле, атайлы-әсәйле бала саҡтың бер сәләме кеүек ул гәзит хәҙер. Ә уларҙың мәҙәни, социаль, тәрбиәүи әһәмиәте тураһында яҙып торорға ла кәрәкмәйҙер, тием. Бигерәк тә бөгөн, туған телде һәм милли ҡиммәттәрҙе кире ҡайтарыу өсөн күп нәмәләр эшләнгән заманда. Тимәк, гәзиттә нимә яҙыуҙары ғына түгел, ниндәй телдә яҙыуҙары ла мөһим.

Кешенең рухи кимәле үҫеше мәғлүмәт менән бәйле. Тәүге йылдарында бала мәғлүмәтте ата-әсәһенән, уны уратып алған донъянан ала. Өлкәнәйә бара йәмғиәт уның шәхесен формалаштыра. Китаптар, телевидение, матбуғат - мәғлүмәт алыу юлдары төрлө. Әммә ул мәғлүмәттең эстәлеге лә мөһим. Гәзиттәр араһында өлгө итеп "Киске Өфө"нө килтерер инем. Унда яҡшы хәбәрҙәр генә була. Кире мәғлүмәт бит ул кешенең аңын яҡшы яҡҡа үҙгәртмәй. "Киске Өфө"нән мин баш ҡалабыҙҙа, республикабыҙҙа барған матур ваҡиғалар тураһында уҡыйым, геройҙар араһында танышҡтарымды ла күрәм. Был да яҡынайта минә гәзитте. "Киске Өфө" гәзите ауыр ваҡыттарҙа ла туған телебеҙҙе ҡурсалауҙан туҡтамай, мәҙәниәтебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы иҫкә төшөрөп тора, быны менән милли үҙаңыбыҙҙы күтәрә. Унда баҫылған һәр мәҡәлә - үҙ эшенең оҫталарының ҙур хеҙмәте. Уларға рәхмәтлебеҙ, әлбиттә, тик рәхмәтебеҙҙе гәзиткә яҙылып белдерһәк ине. Ошонан да ҙурыраҡ рәхмәт булмаҫ ине!

**Гөлсинә ХӘМИТОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров алдағы өс йылға бюджет документтары пакетын республика Дәүләт Йыйылышына ҡарауға индерҙе. Быға тиклем закон проекты республика Хөкүмәте ултырышында ҡаралды һәм хупланды. 2019 йылда Башҡортостан бюджетының килеме - 172,2 миллиард һум, сығымы 192,2 миллиард һум суммаһында ҡаралған. 20 миллиард һум күләмендәге дефицит үткән йылдарҙа тупланған резервтар менән тулы күләмдә тәьмин ителгән.

✓Башҡортостандың элекке президенты Мортаза Рәхимов белдереүенсә, "Урал" хәйриә фонды ноябрҙән Өфөлә "Әр-Рәхим" мәсете төҙөлөшөн ҡабаттан финанслай башлай. Объектты тамамлау өсөн, "Урал" фонды етәксеһе баһалауынса, 5-6 миллиард һум кәрәк. Был хаҡта фонд советы ултырышы йомғаҡтары буйынса ойошманың сайтында хәбәр ителә. Шуның менән бергә фонд эшмәкәрлегенең башҡа йүнәлештәре ярайһы уҡ ҡыҫҡартыла.

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Мәскәүҙә Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары Виталий Мутко үҙгәрткән Рәсәй Федерацияһында төбәктәрҙе үҫтереү буйынса Хөкүмәт комиссияһы ултырышында ҡатнашты. "Унда республикабыҙға ҡарата бөгөн милли проекттар сиктәрендә бүленмәгән аҡсалар буйынса бер нисә проектҡа ҡатнашыу мөмкинлеге бар әле, тип әйттеләр", - тине республика етәксеһе журналистар менән әңгәмәлә.

✓Үткән шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрендә Радий Хәбиров эш сәфәре менән Урал аръяғына барҙы. Сәфәр барышында ул халыҡ менән аралашты, Әбйәлил, Баймаҡ, Хәйбулла һәм Ейәнсура районлары предприятиеларында булды.

✓Әбйәлил районының Ҡырҙас ауылы халҡы Радий Хәбиров менән осрашыуҙа уларҙы күптән борсоған проблемалар тураһында һөйләне. Ул проблемаларҙың береһе йорт төҙөү менән бәйле. Урындағы халыҡҡа йорт һалыу өсөн ылыҫлы ағас алыу бик ауырға тура килә. Радий Хәбиров осрашыуҙа яңғыраған мәсьәләләрҙе ентекләп өйрәнәсәген һәм шунан һуң улар буйынса аҙаҡҡы ҡарар ҡабул итәсәген әйтте.

***✓ Комсомол идеологик ойошма ғына түгел, ә әхлак тәрбиәһе мәктәбе лә, тормошҡа путевка биреүсе лә һәм яҙмышыбыҙҙа хәл иткес әһәмиәткә эйә йүнәлеш тә булды.***



БЫЛ АЙҘА...

# ЭҢЕР ШӘФӘҒЕНДӘ...

**баҙрай ҡәнәфер**

**Һау кешегә ҡырпағай ҙа килеп ишек ҡаҡты. Һуңғы осор ваҡыттың айырыуса йүгереклеге шунандыр ҙа, күрәһең: көндәр күҙгә күренеп ҡыҫҡара, төн оҙая. Ҡайһы бер халыҡтарҙа ноябрҙе йыл эҫере, ҡыш ҡапҡаһы тип, ә беҙҙә иһә ҡырпағайҙың төп билдәһен "ни арба, ни сана" тип йөрөтәләр. Фенологтар, баҡсасылар күҙәтеүенсә, сейә япраҡтары ҡойолоп бөтмәйенсә, ҡар ятмай, имеш. Бәлки, шулайҙыр ҙа, ләкин ай урталары, һәр хәлдә, ай ахырына ҡыш ныҡлап үҙ хоҡуҡтарына инә.**

Ноябрь календары биттәрен барлағанда, өлкән быуын хәтеренә иң тәүҙә **Октябрь социалистик революцияһы** (7) көнө иҫкә төшә. Совет иленең дошмандары ул көндө халыҡ хәтеренән юйырға маташып, урынына яңы байрам уйлап сығарһа ла, күптәр уның ниндәй дата икәнен дә аңлата алмай (хәйер, Октябрь революцияһы көнө лә йәш быуын өсөн әллә ни ыңғай мәғлүмәт бирмәй торғандыр бөгөн - уны онотторорға тырышалар), ә бына тағы бер ял көнө күптәр өсөн "лафа". Шул һүрәттә лә революция датаһын ҡәҙимге көнгә әйләндереп, уны кәмләгән кеүек, **Халыҡтар берҙәмлеге** (4) көнөн һанға һуҡмау ҙа дөрөҫ булмаҫ ине. Тарихты дәреслектәр битенән юйып булмай. Ил тарихының һәр бите беҙҙең хәтерҙә йәшәүгә хаҡлы. Күп милләтле Рәсәй һәм уның барлығын тәьмин итеүсе төп халыҡ - урыҫ милләте мәнфәғәттәре хаҡында РФ Президенты В.Путин да йыш ҡына йәмәғәтселек хәтеренә төшөрөп тора. Әле яңыраҡ ҡына 18 октябрҙә Халыҡ-ара "Валдай" дискуссия клубының юбилей ултырышында әйткән һүҙҙәре тағы бер тапҡыр шуны раҫланы: "Әгәр ҙә беҙ мәмерйә милләтселеген алға һөрөп, башҡа этнос вәкилдәре өҫтөнә бысраҡ ҡоябыҙ икән, беҙ илде юҡҡа сығарасаҡбыҙ - рус халҡы быны теләмәй, - тине ул. - Ә мин Рәсәйҙең һаҡланып ҡалыуын, шул иҫәптән рус халҡы өсөн, теләйем". Тап бына ошо йәһәттән ул үҙен милләтсе һәм дөрөҫ милләтсе тип атаны.




Сөнки күп милләтле илде - Рәсәйҙе һаҡлап ҡалыуҙа ул рус милләте мәнфәғәттәрен өҫтөн күрә. Ил етәксеһе милләтсе булған кеүек үк, беҙ ҙә милләтсе һәм дөрөҫ милләтселәр булайыҡ. Ул үҙе үк был турала шулай тип әйтте бит: минең кеүектәр 146 млн! Төрлө милләт халыҡтары вәкилдәре лә, үҙ милләте йәшәһен өсөн, Рәсәй составындағы башҡа этностар менән һыйышып йәшәү юлын һайланы. Тап шуның өсөн дә милләттәр мәсьәләһен, айырыуса милләтте милләт иткән туған тел, бөгөн көн үҙәгендә торған туған тел уҡытыу проблемаларын юғарынан күрһәтмә биреп түгел, ә уйлап, аҡыл менән, кәңәшләшеп хәл итә белергә лә кәрәк, сөнки теленән айырылған милләт - ул инде бер кем дә түгел, ә был күпкә хәүефлерәк. "Ысын илһөйәрҙәр ватандаштары теленә ҡаршы көрәш алып бармай", - тигән бер аҡыл эйәһе.

Октябрь революцияһы көнө хәҙер ил буйынса байрам ителмәһә лә өлкән быуын вәкилдәре, ветерандар, шулай уҡ Рәсәй Коммунистар партияһы ағзалары түштәренә ҡыҙыл банттар тағып, баҙлап торған ҡәнәферҙәр тотоп, ҡала урамдарына, майҙандарға сыға, бынан 101 йыл элек социаль ғәҙеллек, ирекле хеҙмәт һәм прогресс өсөн түңкәрелеш яһаған революция ҡаһармандарын иҫкә ала. Ә бына тамырҙарын, тарихын белергә, танырға теләмәгән йәштәр менән ни эшләргә? **Бөтөн донъя йәштәр** (10) һәм **Халыҡ-ара студенттар** (17) көндәрендә был һорауҙы ил яҙмышына битараф булмаған һәр кем үҙенә лә төбәһен ине. "Советтар Союзын тарҡатыуға 27 йыл үтеп китеүгә ҡарамаҫтан, йәштәр мәсьәләләре буйынса дәүләт сәйәсәте эшләнмәне, - тине КПРФ Үҙәк комитеты рәйесе Г. Зюганов партияның октябрь пленумында һөйләгән сығышында. - Йәштәр тураһында федераль закон юҡ, бары тик айырым төбәктәр үҙ башланғыстарында бындай программалар ҡабул итте". Г.Зюгановтың доклады тулыһынса ил киләсәге - йәштәр темаһына арналды. Унда ул йәш быуынға белем һәм тәрбиә биреү буйынса социалистик ҡоролош йәмғиәтенең һыналған тәжрибәләрен тергеҙеү кәрәклеген билдәләне. Ил коммунистары етәксеһенең был сығышы быйыл 29 октябрҙә комсомолдың 100 йыллығын билдәләгән көндәрҙә бик тә урынлы булды. Әйткәндәй, беҙҙең гәзит уҡыусыларыбыҙҙың да күпселеге комсомол сафында сынығып, үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫҡан быуын вәкилдәре. Шуның өсөн дә яҡын беҙгә ялҡынлы комсомол йәшлегебеҙ, сөнки комсомол идеологик ойошма ғына түгел, ә әхлак тәрбиәһе мәктәбе лә, тормошҡа путевка биреүсе лә һәм яҙмышыбыҙҙа хәл иткес әһәмиәткә эйә йүнәлеш тә булды. Беҙҙең дә бөгөнгө йәш быуынды осҡон сәсрәтерҙәй энтузиастар, илһөйәрҙәр һәм дә телһөйәрҙәр итеп бик тә күрге килә. Ситкә китеү яғын ғына ҡарап тормаһын ине улар: ситтә солтан булғансы, үҙ илебеҙҙә олтан булһындар.

Ноябрь ғаилә айына ла оҡшабыраҡ киткән икән ни аралалыр. Бер түгел, ике көн ир-егеттәргә арнала: **Бөтөн донъя ир-егеттәр** (3) һәм **Халыҡ-ара ир-егеттәр** (19) көндәре билдәләнә икән дә, ә байрамдарын нишләптер бер ҙә күргән юҡ. Байрамы - байрам, ә бына ир-егеттәребеҙ ҡайҙа булып бөттө һуң? Себерҙә, Колымала аҡса һуғалармы рәхмәт яуғырҙары? Ҡайтһындар ине улар илебеҙгә, тыуған-торған ерҙәренә кәрәкле булып, үҙ шөғөлдәрен ошонда асып ебәрһен ине улар. Бының өсөн, моғайын, капитал да туплап өлгөргәндәрҙер. Юғиһә, **Халыҡ-ара балалар көнөндә** (20) яңы тыуып ҡалған бәләкәстәрен танымай ҙа торорҙар. Юғиһә бит, уларҙы бында **Улдар көнө** (22) - буй еткергән улдары, **Әсә көнө** (25) йорт-хужалыҡ хәстәрлектәренән миктәгән ҡатындары һағынғандыр...

**Ҡырпағайҙа иҫтәлекле көндәр һәм һөнәри байрамдар бик күп, был яҡшылыр ҙа, бәлки, тик шунһы: ҡайһыһына туҡталһаң да, берәй проблемаға килеп төртөләһең.** Шуға уларҙы һанап ҡына үтеү хәйерлерәк булыр. Бөтөн донъя сифат (8), Фән (10), Халыҡ-ара энергияны һаҡлау (11), Бөтөн донъя мәрхәмәтлек (13), Диабетҡа ҡаршы көрәш (14), Халыҡ-ара тәмәкенән баш тартыу (15), Бөтөн донъя сәләмләү (21), Халыҡ-ара мәғлүмәтте яҡлау, Бөтөн донъя йорт хайуандары (30) көндәре. Бынан тыш, һөнәри байрамдар хаҡында ла әйтеп үтеү кәрәктер: Суд приставтары, Менеджерҙар (1), Бухгалтер, Милиция (полиция) (10), Һаҡлыҡ банкы хеҙмәткәрҙәре (12), Социолог, Логопед (14), Проектлаусы (16), Һалым хеҙмәткәрҙәре, Телевидение (21), Психолог (22) көндәре билдәләнә. Шул да мәғлүм булһын: 29 ноябрь - Рәсәй дәүләтенең федератив өлөшө булараҡ, Башҡортостан милли-территориаль автономия ойошторолған көн (1917).

**Ҡырпағай юбилярҙары:**

**9** - балет артисы, педагог, Рәсәй һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Леонора ҠЫУАТОВАға - 70 йәш** (1948).

**12** - скульптор, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Хәниф ХӘБИБРАХМАНОВҡа - 70 йәш** (1948).

**19** - М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры, Башҡортостандың халыҡ артисы **Рәүис ЗАҺИТОВҡа - 70 йәш** (1948).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Баймаҡта Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров урындағы район дауаханаһында булды. "Баймаҡ, балалар поликлиникаһы. 6 мең балаға ни бары ике педиатр... Системалы, ҡаралмаған проблема, - тип яҙған Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. - Яңы поликлиника төҙөйбөҙ, балалар һаулығында экономияларға ярамай. Әммә табиптарҙы әле үк табырға кәрәк. Тейешле хеҙмәттәргә бурыстар ҡуйҙым, йөкләмәләр үтәлешен контролдә тотам".

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусының Урал аръяғы буйлап эш сәфәре Ейәнсура районында тамамланды. "Маяҡ" ауыл хужалығы етештереү кооперативында төбәк етәксеһенә республикалағы берҙән-бер һарыҡсылыҡ кластерының нисек үҫешеүен күрһәттеләр. Ейәнсура районы хакимиәте башлығы Дәмин Юланов 2012 йылдан инвестициялар күләме 155,3 миллион һум тәшкил итеүе хаҡында һөйләне. Хужалыҡта 9,5 мең Волгоград тоҡомло һарыҡ аҫрала.

✓Радий Фәрит улы Иҫәнғолда яңы паркта булды. Уны асыу 4 ноябргә билдәләнгән. Хәҙер эштәр аҙағына яҡынлаша. Паркта райондан алты Советтар Союзы Геройына бюст ҡуйыла, обелискты Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында һәләк булғандарға асалар. Республика етәксеһе урындағы хакимиәткә паркта балалар майҙансыҡтары ла ҡуйырға, шулай уҡ эргәлә футбол майҙансығы төҙөргә йөкләмә бирҙе.

✓Радий Хәбиров Михаил Киреевты торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Киреев Михаил Юрьевич Стәрлетамаҡта тыуған. 2015-2017 йылдарҙа - Стәрлетамаҡ ҡала округы хакимиәте башлығының үҫеш һәм төҙөлөш буйынса беренсе урынбаҫары, һуңғы йылда Красногорск хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары вазифаһында эшләгән.

✓Радий Хәбировтың Указы менән Роман Ребров Башҡортостан Башлығының эштәр идарасыһы итеп тәғәйенләнде. Р. Ребров 2005-2012 йылдарҙа - Башҡортостан Республикаһының Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиллегенең төп һәм баш белгесе, бүлек етәксеһе, эштәр идарасыһы, 2017-2018 йылдарҙа - Мәскәү өлкәһе Красногорск ҡала округы хакимиәтенең эштәр идаралығы етәксеһе булып эшләгән.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# ТУҒАН ТЕЛГӘ ЯРҘАМҒА

**Президент Владимир Путин Рәсәй Федерацияһында Туған телдәрҙе һаҡлау һәм өйрәнеү фонды булдырыу тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Указ ҡул ҡуйылған көндән үҙ көсөнә инә.**

Фондтың ойоштороусылары - Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы менән Милләттәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ. Ойоштороусылар 3 ай эсендә уның уставын ҡабул итергә тейеш. Ошо уҡ ваҡыт эсендә РФ Хөкүмәте Фондтың идараһы һәм попечителлек советы составын раҫларға тейеш буласаҡ. Шулай уҡ Фондты Мәскәүҙә урынлаштырырға һәм 2019 йылда уны федераль бюджеттан финансларға тигән күрһәтмәләр булған. Фондтың бурысы - "Рәсәй дәүләтенең милли милке һәм тарихи-мәҙәни мираҫы булған Рәсәй халыҡтарының туған телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү өсөн шарттар тыуҙырыу". Фонд федераль бюджет сараларынан, ирекле иғәнәләрҙән, башҡа сығанаҡтарҙан финансланасаҡ.

"Президент был ҡарары менән Рәсәйҙең этник һәм мәҙәни күп төрлөлөгөн һаҡлау эшенә ҙур өлөш индерә. Һуңғы осорҙа федераль кимәлдә был йүнәлеш иғтибар үҙәгенә алынды. Мәҫәлән, августа Владимир Путин балаларға мәктәптә туған телен өйрәнеү хоҡуғын гарантиялаған законға ҡул ҡуйғайны. Төбәктәр был яңылыҡты хуплап ҡаршы алды", - тине Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев был документ буйынса үҙ ҡарашын билдәләп. Республика парламенты спикеры фекеренсә, Фонд саралары ҡайҙа тотонолғанлығы киң йәмәғәтселек өсөн асыҡ булыуы ла мөһим. Шулай уҡ Фондтың попечителлек советы һәм идараһына төрлө милләт халыҡтарынан абруйлы вәкилдәр инергә тейеш, тип иҫәпләй К. Толкачев. Фонд төрлө йүнәлештә эшмәкәрлек алып барасаҡ, шул иҫәптән федераль исемлеккә ингән сифатлы һәм лицензиялы туған тел дәреслектәре менән тәьмин итеүҙе финанслаясаҡ.

# ТӘБИҒӘТ ТАЛАНА

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә төбәктә тәбиғи ташты эшкәртеүҙе туҡтатырға һәм төҙөлөш материалдарын сығарыу менән шөғөлләнгән барлыҡ предприятиеларҙы тикшерергә ҡушты.**



Унан алда республика етәксеһе Баймаҡ районы Темәс ауылы янындағы карьерҙы ҡараны һәм Урал аръяғындағы барлыҡ райондарҙа тиерлек ошо ташты законһыҙ эшкәртеүҙең бик күп фактарын ысын һәләкәт тип атаны. Баймаҡ районында ғына ташты ошолай вәхшиҙәрсә сығарыу урындары - 40-тан ашыу. "Мин карьерҙарҙы эшкәртеүгә ҡаршы түгел, ләкин улар цивилизациялы алып барылырға һәм килемдең төп өлөшө районның проблемаларын хәл итеүгә йүнәлтелергә тейеш, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Сығарылған таш Мәскәүгә, Мәскәү өлкәһенә, Грозныйға оҙатыла. Әгәр беҙ бынан бер нидәй ҙә килем алмайбыҙ икән, ни өсөн һатабыҙ һуң? Бәлки, эшмәкәрлектән баш тартырға кәрәктер?" Радий Фәрит улы лицензиялар биреүҙе туҡтатырға һәм ғәмәлдәге лицензиялар сиктәрендә эштәрҙе алып барыуҙың дөрөҫлөгөн тикшерергә ҡушты. Ошо өлкәлә тәртип урынлаштырыу буйынса эшсе төркөмдө Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Ринат Бәширов етәкләй. Билдәләнеүенсә, тикшереү эштәренә хоҡуҡ һаҡлау органдары ла йәлеп ителәсәк, сөнки бында "енәйәт билдәләре һәм коррупция эшмәкәрлеге күренештәре күренә". "Тиҙҙән урмандар һәм ҡырағай йәнлектәргә законһыҙ һунар итеү мәсьәләләренә иғтибарымды йүнәлтергә теләйем. Һунарсылар тотош Рәсәйҙән килә, йәнлектәрҙе пулемёттар менән генә ҡырмайҙар. Ләкин хайуандарҙы ашатыу һәм үрсетеү буйынса бер ниндәй эшмәкәрлек тә алып барылмай. Һунар цивилизациялы һәм һаҡсыл булырға тейеш", - тине республика етәксеһе.

# ҺӨҘӨМТӘ КӨТТӨРМӘҪ, АХЫРЫ

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса, республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Рәиф Әбдрәхимов етәкселегендәге комиссия Урал аръяғында юлдарҙы һәм социаль объекттарҙы тикшерҙе.**

"Беҙҙең комиссия ЮХХДИ, ауырлыҡ контроле хеҙмәте һәм башҡа ҡыҙыҡһынған ойошмалар һәм ведомстволар менән берлектә юлдарыбыҙҙы һаҡлау механизмын эҙерләргә тейеш, - тип хәбәр итте вице-премьер вазифаһын башҡарыусы. - Бөгөн тау-байыҡтырыу комбинаттарының ҙур йөк самосвалдары юлдарҙы боҙа. Файҙаланыу осоронда юлдарҙы тәртиптә тотоуҙы һәм ҙур йөк ташыу тамамланғандан һуң норматив хәлгә килтереүҙе предприятиелар тулыһынса үҙ өҫтөнә алырға тейеш".

Әбйәлил районында төпкөл ауылдарға газ үткәреү буйынса мәсьәләләр тикшерелде. Әле күмер ягып йылытылған Рәхмәт ауылы мәктәбе ҡаҙанлығы 2019 йылда газ менән йылытылыуға күсәсәк, тип билдәләнде. Район үҙәге Асҡарҙа, шулай уҡ Баймаҡ районында төҙөләсәк яңы мәктәптәр һәм башҡа социаль объекттар проекттары ла тикшерелде. Вице-премьер вазифаһын башҡарыусы шулай уҡ тәбиғи таш сығарыу һәм уны эшкәртеү менән шөғөлләнгән "Златолит+" йәмғиәтенең эше менән дә танышты. "Сеймалды вәхшиҙәрсә сығарыуға түгел, ә уны цивилизациялы эшкәртеүгә иғтибарҙы йүнәлтергә кәрәк, - тип билдәләне Рәиф Әбдрәхимов. - Был - өҫтәмә табыш та, яңы эш урыны ла, урындағы ҡаҙнаға һалым да". Хәйбулла районында комиссия һыу үткәреү коммуникациялары торошон һәм Урал аръяғында коммуникациялар төҙөү, уларҙы реконструкциялау буйынса юл картаһын эшләүҙе тикшерҙе. Бынан тыш, Аҡъярҙа Мәҙәниәт йорто төҙөлөшөн тамамлау буйынса техник эште әҙерләү башланды.

# АУЫЛДАР БИРЕШМӘЙ

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре көнөнә арналған тантаналы кисәлә ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Ул илдең алдынғы аграр төбәктәре иҫәбенә ингән Башҡортостандың артабанғы үҫеш өсөн ҙур потенциалы барлығын, быны эш һөҙөмтәләре менән раҫлап булыуын билдәләне. Мәҫәлән, яңыраҡ уҙған "Алтын көҙ" Бөтә Рәсәй күргәҙмәһендә республиканың ауыл хужалығы продукциялары 166 миҙал яуланы, уларҙың яртыһынан күберәге - алтын.**

- Беҙҙең сит илдәргә балдан, ит деликатестарынан торған бренд продукцияһы, хәләл ризыҡтар һатыу мөмкинлегебеҙ бар. Башҡортостанды тәбиғи һәм экологик яҡтан таҙа продукция биләмәһе итеп танытырға кәрәк, - тине Радий Хәбиров.

Республика етәксеһе ихтыяж булған белгестәрҙе әҙерләүҙе камиллаштырырға, уңышлы хужалыҡтарҙың тәжрибәһен киңерәк таратырға, агробизнестың заманса формаларын индерергә кәрәк, тип иҫәпләй. Ә иң мөһиме - ауылда яңы эш урындары булдырыу, ауыл эшсәндәренең килемен арттырыу, уларҙың тормош һәм хеҙмәт шарттарын яҡшыртыу. Радий Хәбиров яңыраҡ Урал аръяғы райондары буйлап йөрөгән саҡта был йүнәлештә ниндәй ҙур эш көтөлгәнен үҙ күҙҙәре менән күреүен һөйләне. "Бөгөн йәштәр икенсе төбәктәргә эшкә китә, һыу тәьминәте ауылдарҙың 60 процентында ғына бар, яҡынса шунсама ауылда газ үткән. Меңләгән ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж. Ошо бөтә проблемаларҙы республика хәл итәсәк". Ауылдарҙа яңы юлдар, йорттар, йәштәребеҙҙе йәлеп итерлек социаль инфраструктура объекттары төҙөләсәк. Проблемалар барлығына ҡарамаҫтан, ауылда инициативалы кешеләр күп йәшәй, улар үҙ бизнесын үҫтерә, тип билдәләне Радий Хәбиров. "Мин тағы бер тапҡыр ауылдарыбыҙҙа һәм ҡалаларыбыҙҙа эшсән, асыҡ, яуаплы һәм эскерһеҙ кешеләр йәшәүенә инандым", - тине Радий Хәбиров республика аграрийҙарын һөнәри байрамдары менән ҡотлап.

# ЯБЫЛМАНЫ!

**"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы кредиторҙары 23 октябрҙәге йыйылышта бөлгөнлөк процедураһын туҡтатыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Төп кредитор - "Төбәк фонды" - кредиторҙар алдындағы бурысты ҡаплауы тураһында белдерҙе.**

Ағымдағы йылдың июлендә "Башҡортостан" нәшриәте банкрот тип иғлан ителгәйне. Кредиторҙар 380 миллион һумдан ашыу бурыс йыйылған предприятиены һаҡлап ҡалыу мөмкинлеге табылмағас, нәшриәттең хужалыҡ эшмәкәрлеген туҡтатыу хаҡында ҡарар ҡабул итергә тейештәр ине. Сентябрҙә дәүләт унитар предприятиеһы менән эшләгән барлыҡ баҫмалар ошо турала белдереү ҡағыҙҙары алды. Ләкин республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров, төбәктә берҙән-бер дәүләт нәшриәте ябылырға тейеш түгел, тип белдереп, предприятиены бөлгөнлөккә төшөрөүгә юл ҡуймаҫҡа ҡушты.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓"Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһы республиканың иң алыҫ райондарының береһенә - Аҡъярға тиклем автобус бәйләнешен 2016 йылда туҡтатҡайны. Ошо көндәрҙә Хәйбулла районына эш сәфәре барышында урындағы халыҡты борсоған проблемалар менән танышҡандан һуң Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса 30 октябрҙән Өфө менән Аҡъяр араһында бәйләнеш тергеҙелде.

✓Республика аграр секторының 10 иң яҡшы комбайнеры, водителе, механизаторы "Шевроле Нива" автомобилдәре менән бүләкләнде. Улар 2018 йылғы урып йыйыу эшендә иң юғары һөҙөмтәләргә өлгәште. Автомобиль асҡыстарын Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте хеҙмәткәрҙәре көнөнә арналған тантаналы кисәлә тапшырҙы.

✓Өфөләге вертолеттар менән тәьмин итеүгә һәм уларҙы киренән йыйһазландырыуға махсуслашҡан "Техпромсервис" компанияһы Ҡытайҙың Хайнань провинцияһында "Башҡорт ауылы" туристик-һауыҡтырыу этнокомплексын төҙөү тәҡдиме менән сығыш яһаны. Иҡтисади үҫеш министрлығында хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостан Республикаһының Үҫеш корпорацияһында яҡтарҙың осрашыуы уҙҙы. Ҡытай делегацияһы ҡыҙыҡһыныу белдерҙе: проминция властары бушлай 60 гектар ер бирергә һәм башҡа ярҙам сараларын ҡарарға әҙер.

✓Рәсәй Хөкүмәтендә нефтселәр менән осрашыу уҙҙы, унда бензин хаҡын төшөрөү тураһында һөйләшеп килешелде. Энергетика министры Александр Новак һүҙҙәренсә, автозаправкалау станциялары эшенең һөҙөмтәләлеген арттырыу өсөн бензиндың күмәртә хаҡы 2018 йылдың июнь айындағы кимәлгә ҡайтырға тейеш.

✓1 ноябрҙән Өфөлә Сипайлово бистәһенән йөрөүсе 20-се троллейбус маршруты хәрәкәте тергеҙелә, тип хәбәр иттеләр "Башинформ" агентлығына Өфөнөң Муниципаль электр транспорты идаралығында. Ошо маршрут буйынса троллейбус хәрәкәте 2013 йылда туҡтатылғайны. Әлеге мәлдә республиканың баш ҡалаһында 12 троллейбус маршруты иҫәпләнә. Хәҙер уларға тағы ла береү өҫтәлә.

*✓ Өфө - ул Башҡортостан. Бында республика халҡының дүрттән бер өлөшө йәшәй. Башҡортостан Хөкүмәте ҡала хакимиәтенең тоғро ярҙамсыһы булырға тейеш.*



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЕТӘКСЕБЕҘ ЯҢЫРҘЫ

**29 октябрҙә конкурс комиссияһы Өфө хакимиәте башлығы вазифаһына кандидаттар араһынан өс дәғүәсене - Өфө районының Социаль үҫеш программаларына булышлыҡ итеү фонды генераль директоры Руслан Зәйнуллинды, Киров районы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Олег Котовты һәм Өфөнөң "Газпром газ бүлеү" йәмғиәте генераль директорының капиталь төҙөлөш буйынса урынбаҫары Өлфәт Мостафинды һайлап алды.**



Шул көндө үк Өфө ҡала Советы ултырышында был дәғүәселәрҙең һәр ҡайһыһы Башҡортостандың баш ҡалаһын үҫтереү концепцияһы менән таныштырҙы. Сығыштарҙан һуң депутаттар кандидаттарҙың береһен - Өлфәт Мостафинды Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы итеп һайланы һәм уның менән килешеү төҙөнө. Өфө ҡала Советы депутаттары алдында Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров сығыш яһаны. Ул депутаттар корпусының ҡарары төплө уйланылған тип билдәләне.

- Өлфәт Мансур улын күптән белеүемде йәшермәйем. Беҙҙе эшлекле һәм шәхси мөнәсәбәттәр бәйләй. Яңы хакимиәт башлығы һәм уның командаһы ҡала үҫешһен, Өфө халҡына бөтә яҡтан уңайлыҡтар тыуҙырылһын өсөн барыһын да эшләр тип өмөтләнәм. Был бик ҙур яуаплылыҡ һәм Һеҙ, Өлфәт Мансур улы, намыҫлы кеше булараҡ, алдығыҙға ҡуйылған бурыстарҙы атҡара алырһығыҙ тип ышанам. Өфө - ул Башҡортостан. Бында республика халҡының дүрттән бер өлөшө йәшәй. Башҡортостан Хөкүмәте ҡала хакимиәтенең тоғро ярҙамсыһы булырға тейеш. Өфөлә ағымдағы хәлдәр торошона булышлыҡ итеү, тығыҙ бәйләнештә эшләү өсөн бер төркөм аныҡ ҡарарҙар ҡабул иттек тә инде, - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Әйткәндәй, Мостафин Өлфәт Мансур улы 1959 йылдың 4 майында Саҡмағош районының Иҫке Ихсан ауылында тыуған. Өфө еңел сәнәғәт техникумын, Өфө авиация институтын тамамлай, армияла хеҙмәт итә. Техник фәндәр кандидаты. Хеҙмәт эшмәкәрлеген Өфө торлаҡ-файҙаланыу идаралығында башлай. 90-сы йылдарҙан "Газпром" системаһында эшләй. 2003 йылда Өлфәт Мостафин Башҡортостан Президенты Хакимиәтенә финанс-хужалыҡ идаралығы начальнигы вазифаһына күсә. 2010 - 2013 йылдарҙа Иҡтисади, технологик һәм атом күҙәтеүе буйынса федераль хеҙмәттең Урал буйы идаралығында эшләй, һуңынан "Газпром"ға ҡайта.

**"Ҡала алдында торған көнүҙәк мәсьәләләрҙе, шулай уҡ стратегик характерҙағы һорауҙарҙы һөҙөмтәле хәл итеү өсөн бер фекерҙә булып, берҙәм эшләргә саҡырам", - тине Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин был аҙналағы оператив кәңәшмәне асып.**

# ЭШТӘРЕБЕҘ ГӨРЛӘР...

## берҙәм эшләһәк

Баш ҡалала йәмәғәт транспорты тирәһендә барған һуңғы ярты ай эсендәге үҙгәрештәр барыһының да телендә хәҙер. Әммә бөгөн хәл контролгә алынған һәм ҡала буйлап өҫтәмә автобустар йөрөй башланы. Йәмәғәт транспортына ҡағылышлы үҙгәрештәр бының менән генә тамамланмаясаҡ. Өлфәт Мансур улы пассажирҙар йөрөтөү өлкәһенең киләһе биш йыллыҡтағы үҫеше тураһында документ эшләргә һәм раҫларға кәрәклеге тураһында әйтте. "Был документта ҡалалағы бөтөн транспорт йүнәлештәре, шулай уҡ ниндәй өҫтәмә маршруттар кәрәклеге тураһында мәғлүмәт тупланырға тейеш", - тине ул һәм уны тиҙ арала әҙерләүҙе һораны.

Бөгөн һаулыҡ һаҡлау, белем биреү учреждениелары өлкәһен үҫтереү ҙә көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе. Хакимиәт ултырышында Өлфәт Мостафин ҡала халҡын социаль объекттар - мәктәптәр, балалар баҡсалары, поликлиникалар менән тейешле кимәлдә тәьмин итеү кәрәклеген тағы бер тапҡыр телгә алды. Бигерәк тә төҙөлөш әүҙем барған райондарға иғтибар кәрәклеге әйтелде. "Унар, йөҙәр мең квадрат метр торлаҡ төҙөлә, ә социаль өлкә был процестан артта ҡала", - тине Өлфәт Мансур улы һәм урынбаҫарҙарына был йәһәттән етди анализ яһарға, мәғлүмәт тупларға ҡушты һәм ошо эште атҡарғандан һуң Башҡортостан Хөкүмәтенә тәҡдимдәр менән сығырға ла мөмкин буласаҡ икәнен билдәләне.

Ҡала ерҙәрен һәм муниципаль милекте дөрөҫ файҙаланыу буйынса мәсьәлә лә күтәрелде. Әлеге мәлдә республика буйынса ер участкаларына ревизия үткәреү, уларҙың сиктәрен билдәләү бара. "Өфөнөң ер һәм милек фонды, ерҙәрҙең күпме өлөшө муниципаль, республика, федераль кимәлгә ҡарай, улар нисек ҡулланыла, шулай уҡ ерҙе ҡулланған өсөн ҡала бюджетына күпме һалым һәм аренда түләүе инә - ошолар тураһында тулы яуап көтәм", - тине Өлфәт Мансур улы һәм был эште урынбаҫары Руслан Төхвәтшинға йөкмәтте.

Әйткәндәй, хакимиәт ултырышында Өфөләге аныҡ объект тураһында ла һорау яңғыраны. Күптәр беләләр, бына тиҫтә йылға яҡын Пархоменко менән Чернышевский урамдары киҫелешендә бер ташландыҡ бина - Вахмяниндар мунсаһы ултыра. "Ҡаланың үҙәк урынында урынлашҡан был бинаның заказсыһы йәки подрядсыһы кем булыуы ҡала халҡына ҡыҙыҡ түгел. Көн һайын емерек бина эргәһенән үтеп йөрөргә мәжбүр булыусыларҙың ҡаты ҡуллы етәксе юҡлығына зарланыуына аптырарға түгел. Үҙәктә бындай объект ултыртып ҡуйыу дөрөҫ түгел", - тине Өлфәт Мансур улы һәм был мәсьәләне хәл итеү юлдарын эҙләргә ҡушты.

Көн тәртибендә йылдың 9 айы эсендә Өфөнөң бюджетты нисек үтәүе лә ҡаралды. Был турала хакимиәт башлығы урынбаҫары, Финанс идаралығы етәксеһе Гөлнара Вәлиева һөйләне.

Республиканың 100 йыллығына төҙөлөп бөтәсәк объекттар төҙөлөшө лә кәңәшмә һайын тикшерелә. Хакимиәт башлығы урынбаҫары Илгиз Насыртдинов билдәләүенсә, Өфөлә был юбилейға арнап, социаль йүнәлештәге 23 объект төҙөлә. Уларҙың 5-әүһе төҙөлөп бөткән: "Рәсәй - минең тарихым" тарихи паркы, "Дим-8" һәм "Колгуевский" микрорайондарында яңы мәктәптәр,Ноғай ҡасабаһындағы мәктәп, Ленин районының реконструкция үткән 1-се лицейы. Шулай уҡ Ағиҙел йылғаһы ярын нығытыуҙың икенсе сираты тамамланған. Был объект төҙөлөшө 2019 йылда ла дауам итәсәк. Әле 17 объектта эш бара. 4 белем биреү һәм 1 физик культура һәм спорт объектының заказсыһы - Өфө ҡала хакимиәте. Совет районында ике корпуслы 44-се мәптәп реконструкция үтә. Уның ике корпусы әҙер, тағы ла өс яңы корпус төҙөләсәк, һөҙөмтәлә мәктәптең ҡеүәте 2 тапҡырға артасаҡ. Калинин районының Максимовка ҡасабаһында балалар баҡсаһы төҙөлә, әле ул яртылаш әҙер. Инорс-4 микрорайонында дөйөм белем биреү үҙәге төҙөләсәк, тәүге сиратында - балалар баҡсаһы төҙөү ҡаралған. Балалар баҡсаһынан тыш, мәктәп һәм спорт блогы буласаҡ. Орджоникидзе районында ябыҡ каток төҙөлөшө планлаштырылған ваҡыт менән бара.

Ҡалған төҙөлөштәрҙең заказсыһы - республика башҡарма власть органдары. Быйыл Дим районының "Сағыу" микрорайонында мәктәп төҙөлә башланы. Республика психотерапевтика клиник үҙәге стационары өсөн реконструкцияланған бинала эштәр тамамлана. Республиканың онкология клиник диспансерының хирургия корпусына тоҡәтмә төҙөлә. М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында капиталь ремонт үткәреү өсөн проект-смета эштәре тамамланған. Әле подряд ойошмаһын һайлау өсөн аукцион үткәреүгә әҙерлек бара. Ленин районында Ә. Исҡужин исемендәге 9-сы балалар музыка мәктәбенә яңы бина төҙөлә башлаған. Калинин районындағы Т. Йәнәби бульвары буйынса бассейн төҙөү ҙә графикка ярашлы бара. Ленин районында Спорт әҙерлек үҙәге төҙөлөшөнөң төп функциональ комплексында: бассейн, спорт комплексы һәм вестибюлдә эштәр быйыл тамамланасаҡ. 100 йыллыҡҡа төҙөләсәк бөтөн объекттар ҙа үҙ ваҡытында сафҡа инер, тип көтөлә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баш ҡалала эштәр тәүлек әйләнәһенә ҡайнай. Бигерәк тә ҡыштың үҙ хоҡуҡтарына ингән осоро ҡала өсөн тынғыһыҙ мәл. Был ваҡытта ҡала райондарының коммуналь хеҙмәттәре көсәйтелгән режимда эшләй, водителдәр һәм йәйәүлеләрҙең хәүефһеҙлеген тәьмин итә. Һауа температураһының яйлап түбәнәйеүе көтөлә, шуға ла ҡала хакимиәте башлығы автомобиль хужаларына ҡышҡы тәгәрмәстәргә күсергә кәрәклеге тураһында ла иҫкәртте.**

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Иҫәнәү

❖ Ауыҙҙы ҙур асып иҫәнәү файҙалы ул, шул мәлдә мейе тамырҙары кислородҡа туйына.

❖ Иҫәнәү оҙаҡ маҙаһыҙлаһа, бер аҙ йөрөп алығыҙ, күнегеүҙәр яһағыҙ.

## Һөйәктәр өсөн

❖ Һөйәктәрҙе нығытыу өсөн: арпа ярмаһын йыуып, бешерер алдынан 3 сәғәт ебетеп, 1,5 сәғәт ҡайнатып бутҡа бешерәһең. Арпала фосфор күп, ул организмда матдәләр алышыныуын көйләй, мейенең эшмәкәрлеген яйлай, һөйәктәрҙе нығыта.

## Быуындар шешһә

❖ Гөлйемештең таж япраҡтарына 0,5 л аш һеркәһе ҡойоп, 1 тәүлек төнәтергә, шунан һуң һүрән утта 5 минут ҡайнатырға. Шеш бөткәнсе быуындарға һөртергә.

## Арҡа ауыртһа

❖ 1 ҡалаҡ әрем сәскәһенә 300 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт термоста төнәтергә, һөҙөргә һәм шуның менән арҡаны ышҡырға.

## Бронхиаль астма

❖ 2 ай дауамында көнөнә 3 тапҡыр прополистың 20 процентлы төнәтмәһен 10-ар тамсы эсергә.

## Теш һыҙлаһа

❖ Ваҡланған керәнде марля йәки таҫтамалға төрөп, һыҙлаған тешкә ҡапма-ҡаршы булған ҡулдың пульсына ҡыҫып бәйләргә. Теш һыҙлауы баҫылғас, ҡыҙарған урынға үҫемлек майы һөртөргә.

## Тире өсөн

❖ Тәнгә ниндәйҙер таптар, ҡысытҡылар, бетсәләр сыҡҡанда, тән бешкәндә сей ҡабаҡты ҡырғыстан үткәреп ябыу бик килешә.

## Ауыҙҙан насар еҫ килгәндә

❖ 1 стакан йылы һыуға 1 ҡалаҡ бал ҡушып, төнгөлөккә ауыҙҙы сайҡатырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Бәхетебеҙгә күрә, барыбыҙ өсөн дә уртаҡ булған, тәрбиә эшендә һәр саҡ ярҙам итерлек таянысыбыҙ бар: уны беҙ халыҡ рухы тип атайбыҙ. Һәр кешенең үҙ-үҙен яратыу тойғоһо булған һымаҡ, һәр кемгә лә халыҡ рухы һалына.*



ПЕДАГОГ ҺҮҘЕ



*Константин УШИНСКИЙ*

# ХАЛЫҠ РУХЫ...

## алыштырғыһыҙ хазина

**Бөйөк рус педагогы Константин Дмитриевич Ушинскийҙың тәрбиә тураһындағы мәҡәләләрен биреүҙе дауам итәбеҙ. Улар күп йәһәттән бөгөнгө көндөң тәрбиәүи мәсьәләләре менән ауаздаш.**

Кешенең характер көсө, ниндәй генә булмаһын, алыштырғыһыҙ хазина ул. Холоҡ-характер кешенең тәбиғи күңеленән бар була һәм тәрбиә эше ошо көстә, кеше бәсенең нигеҙе булараҡ, һаҡларға тейеш.

Тәрбиәнең, кеше алдында изгелек һукмағы һуҙырлыҡ итеп, зиһенен яҡтыртып ебәреүе мотлаҡ. Беҙҙең һәр беребеҙ тура юлды күрә, әммә кемебеҙ, мин бер ваҡытта ла ошо юлдан тайпылғаным юҡ, тип маҡтана ала? Әгәр эргәндә ышанысты ярҙамсың булып, беҙҙең тайпылыштарыбыҙҙы иҫкәртеп, кисәтеп тормаһа, тәбиғи мауығыуҙарҙы минут һайын тиерлек тыя барыу мөмкин түгел тиерлек. Әммә ундай дуҫты ҡайҙан табаһың? Бәхетебеҙгә күрә, барыбыҙ өсөн дә уртаҡ булған, тәрбиә эшендә һәр саҡ ярҙам итерлек таянысыбыҙ бар: уны беҙ халыҡ рухы тип атайбыҙ. Һәр кешенең үҙ-үҙен яратыу тойғоһо булған һымаҡ, һәр кемгә лә халыҡ рухы һалына. Ошо тойғо кеше күңеленә үтеп инерлек ышанысты асҡыс була ла инде. Уның менән беҙ кешенең тәбиғи кире сифаттары, шәхси һәм ғаилә, нәсел етешһеҙлектәре менән көрәшә алабыҙ. Халыҡ рухы тойғоһона таянып, кешенең иң көслө инаныуҙарына йоғонто яһай алабыҙ.

Кешелә башҡа бөтөн гүзәл сифаттар юҡҡа сыҡҡан осраҡта ла халыҡ рухы һаҡлана. Иң яуыз уйлы кешелә лә һалына был тойғо: ул үҙ иленең уңыштары өсөн ҡыуана, уның ҡайғыһына хәсрәтләнә. Илен күрә алмаған осраҡтар ҙа бар, әммә ошо күрәалмаусанлыҡта ла халыҡ рухы һаҡлана!

Сит илдәрҙә йәшәгән кешеләргә күҙ һалығыҙ: кешелә халыҡ рухы ни тиклем көслө булыуын күрерһегеҙ. Рухтың фәҡәт унынсы быуындарҙа ғына үҙен һиҙҙермәүе ихтимал, әммә был осраҡта ла әле ул ҡайҙалыр төпкөлдә һаҡланып ҡала. Иленән ситтә йәшәгән кешеләрҙең әллә нисәнсе быуыны ул илден исемен дә хәтерләмәүе ихтимал, әммә башҡа ҡандар ҡатнашып, тулыһынса юйылғанға тиклем тәүге рух һаҡланыр. Кешелек донъяһын бар итеүсе был тойғо ни тиклем тәрән һәм көслө итеп һалына.

Шулай итеп, халыҡ рухына нигеҙләнгән халыҡ тәрбиәһе шул тиклем көслө, ул көс абстракт идеяларҙан, йәки башҡа халыҡтарҙан алынған тәрбиә ҡанундарынан алынған иң яҡшы системаларҙан өҫтөнөрәк. Тимәк, фәҡәт халыҡ рухы нигеҙендә алып барылған тәрбиә генә халыҡ үсешенең тарихи процесында тере ағза булып иҫәпләнә.

**(Дауамы бар).**

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# ҮҘЕНДӘГЕ ХӘЛДЕ...

## күршеңдән һора

**Халыҡтар берҙәмлеге көнө айҡанлы М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультетында белем алыусы Рәсәй Федерацияһы Президенты стипендиаты, Ҡаҙағстан егете Ильяс Сағынбек менән осрашып, Башҡортостан, Өфө тураһында һәм башҡа темаларға һөйләштек.**

**➔ Ниңә юғары белемде тап Башҡортостанда алырға хәл иттең?**

- Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарына уҡырға килеү мөмкинлеге тураһында 11-се класта уҡығанда ишеттем. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты Ҡаҙағстандың юғары уҡыу йорттары менән генә түгел, Төркиә, Польша, Ҡытай, Ҡырғыҙстан, Төркмәнстан, Таджикстан университеттары менән дә хеҙмәттәшлек булдырған. Беҙҙең БДПУ-ла хатта Конго һәм АҠШ-тан да студенттар уҡый. Башҡорт филологияһы факультеты тәү күреүҙән күңелемә ятты, сөнки бында үҙ телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, халыҡ ижадын, илен яратҡан алсаҡ кешеләр эшләй, сит ил студенттарына бөтә шарттар тыуҙырылған, дөйөм ятаҡтарҙа ремонт эшләнгән, бөтә йыһаздар әрәяңы. Факультетыбыҙҙа һәр студент үҙе теләгән шөғөл менән мауыға ала, шиғыр яҙһаң - "Тулҡын" әҙәби берекмәһендә, бейергә теләгән бар икән - "Ете ырыу" ансамблендә шөғөлләнергә була, йырлаһаң "Дарман" сәхнәһе һинеке, гөмүмән, студент тормошо бик әүҙем бара беҙҙә. Мин йырлау-бейеү менән бер рәттән, профессор Луиза Сәмситова етәкләгән фәнни төркөмдә лә ағза булып торам һәм яныраҡ ҡына Ҡазан ҡалаһына конференцияға барып килдек. Алла бойорһа, декабрь айында Астанаға барырға йыйынабыҙ. Башҡорт телен өйрәнеү минең өсөн бик ҡыйын булманы, сөнки эргәмдәге кешеләр гел ярҙам итеп торҙо һәм мин уларға сикһеҙ рәхмәтлемен, айырыуса рәхмәт һүҙҙәрен факультет уҡытыусыларына һәм ғилми етәксемә, деканыбыҙ профессор Луиза Сәмситоваға әйткем килә. Тел өйрәнеүҙә иң мөһиме: шул телдә һөйләшкән мөхиткә инеү. Хәҙер 5-се курста белем алам һәм Ф.Х. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһында практикала башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән дәрес биреп йөрөйөм.

**➔ Башҡортостан буйлап сәйәхәт иткәнең бармы?**

- Әлбиттә, республиканың егермеләп районында булдым. Барыһын да атап әйтеп бөтә алмаҫмын һымаҡ, әммә Бөрйән, Учалы, Нуриман, Ғафури, Салауат, Ейәнсура райондары иҫ киткес гүзәл тәбиғәте, ҡунаҡсыл халҡы менән иҫтә ҡалған. Тик Шүлгәнташ һәм Салауат мәмерйәләренә барғаным юҡ, үҙ ғүмеремдә бер тапҡыр булһа ла барып күрергә ине уларҙы. Күбеһенсә үҙебеҙ белем алған уҡыу йорто менән таныштырып, профориентацион эш менән йөрөйбөҙ, йыл да фольклор, диалектологик экспедицияларға сығабыҙ. Мин Ҡаҙағстандың көньяғынан, шуға Башҡортостанға килгәнсе ағас өйҙәрҙе күргәнем булманы. Беҙҙә ҡалыпҡа балсыҡ, бесән һалып киптерелгән ҙур кирбестәрҙән өй һалалар. Бында ағастан төҙөлгән өйҙәр бәләкәй күренә. Әммә халыҡ киң күнелле, фольклор йыйғанда ла һәр өйҙә сәй эсереп, булған һый-хөрмәтен күрһәтмәйенсә сығармайҙар. Гөмүмән, башҡорт һәм ҡаҙаҡ халҡы холоҡтары, донъяға ҡараштары менән дә оҡшаш: бөтә нәмәнең яҡшы яғын ғына күрергә тырышабыҙ, ниндәй генә осраҡта ла кешелекле булып ҡалырға кәрәк тип ышанабыҙ. Телебеҙ ҙә, ауыҙ-тел ижадыбыҙ ҙа оҡшаш.

**➔ Ғәҙәттә, иң иҫтәлекле мәлдәр, ҡыҙыҡлы хәл-ваҡиғалар студент йылдары менән бәйле. Һинең хәтереңдә һаҡланған шундай мәҙәктәр ҙә барҙыр?**

- Өфөлә саҡта телмәрем башҡортсаға өйрәнгәс, Ҡаҙағстанға ҡайтҡас, үҙемдең ҡаҙаҡ телмәремә күсә алмай аптыранам. Бер саҡ шулай йәйге каникулға ҡайтҡанмын. Йәйгеһен беҙ, ғәҙәттә, ауылдағы өлкән йортта йәшәйбеҙ. Әсәгә сыҙамай, ҡустыларым менән тыштағы урындыҡта йоҡлап ятһаҡ, бер мәл ямғыр яуа башланы. Мин уянып киттем дә, башҡортса: "Ямғыр яуа, әйҙә, өйгә инәйек", - тип тегеләрҙе төрткөләйем икән. Ҡустыларымдың аптырағаи йөҙҙәре һаман да күҙ алдымда, хатта әсәләрен уятып, мине әллә ниндәй телдә һөйләшә башланы, эргәһенә бүтән өйҙәрҙә ятмайбыҙ, тип һөйләп йөрөнөләр. Әйткәндәй, шул малайҙарҙың береһе Дулат ҡустым хәҙер Башҡорт дәүләт университетының физика-техник факультетында белем ала.

Гел башҡортса аралашҡас, бер ваҡыт "Һин башҡортмо, татармы?" тип һорағайнылар, "Башҡортмон", тип яуап бирҙем, ҡаҙаҡ икәнлегем аҙаҡ ҡына иҫкә килеп төштө.

**➔ Башҡорт теле уҡытыусыһы булараҡ, балаларға уны өйрәтеү, һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү тураһында фекерең ниндәй?**

- Әйтеүемсә, әлеге көндә Ф.Х. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһында 7-се һәм 9-сы кластарҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен уҡытам. Уҡыусыларым араһында күбеһе башҡорт телен һәйбәт белә, фекерҙәрен ошо телдә иркен белдерә ала. Ә ҡалған бер нисә проценты туған телен камил белмәүен ғаиләлә һөйләшмәүҙәре менән аңлата. Ә бына Японияла нисек: ете йәшкә тиклем бала менән тик япон телендә генә һөйләшәләр, сит телдәрҙе улар һуңынан өйрәнә башлай. Туған телен белгән бала башҡа телдәрҙе лә яҡшы үҙләштерә ала тип һанала. Шуға, башҡорт балаларына ла урыҫ теленән яҡшы кимәлдә өлгәшә алмаҫбыҙ, тип тә борсолоуҙар урынһыҙ, балалар үҙ мөхитенән ҡалышмай - әле генә башҡортса яуап биреп ултырған уҡыусы тәнәфестә дуҫы менән урыҫса тәтелдәп тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙеңдәге хәлде күршеңдән һора, ти боронғолар. Ҡайһы саҡта ситтән килеп, ошондағы тормошҡа күнегергә тырышып ятҡан ҡәрҙәш милләт вәкилдәренең һүҙенә лә ҡолаҡ һалыу кәрәк шул. Ильяс Сағынбек менән аралашҡандан һуң, ғәҙәти һәм беҙ иғтибар ҙа итмәгән ябай ғына нәмәләр башҡалар күҙендә ниндәйҙер ҙур әһәмиәткә эйә булырға мөмкин икәнлеге асыҡланды.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

КИНӘЙӘ

# БУЛҒАНЫН ЕМЕРМӘЙ ҘӘ...

## яңыһын төҙөргә булмаймы икән?

**Гәзитебеҙҙә "Бурыс ике яҡлы була" тигән мәҡәләне уҡып, һөйләшеүҙең ғаиләлә ир менән ҡатын бурысы хаҡында ғына түгел, ә йәш ғаилә һәм дәүләт бурысы хаҡында икәнен аңланым. Шунан БСТ каналында күрһәтелгән бер телевизион тапшырыуҙағы һөйләшеүҙе иҫкә төшөрҙөм.**

Сәнғәт академияһында уҡыусы бер башҡорт егете 19 йәшендә үк ғаилә ҡороп, өсөнсө курсҡа еткәндә, шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәп, тағы ла бер улы тыуа. Шул саҡта был студентты ректорға саҡырталар. Ректорға йәки директорға саҡырыуҙы "на ковер" тип атайҙар бит. Был студент шомланып, Заһир Ғарипович Исмәғилевка барып инә лә: "Һаумыһығыҙ, саҡырҙығыҙмы?" - ти ҡурҡып ҡына. Ректор уға: "Әйт әле, һин уҡырға килденме, әллә ҡатыныңды балаға күмергәме?" - тип бик етди генә һорау бирә. Студент, бөтә баш, уҡыуҙан ҡыуырҙар инде, тип уйлап, нык ҡаушап, башын күтәрмәй, ишетелер-ишетелмәҫ кенә: "Башҡорттарҙы ишәйтәм", - тип ысҡындыра. Тағы ла нығыраҡ ҡаушап, ниңә әйттем икән был һүҙҙәрҙе, тип үкенеп, оҙаҡҡа һуҙылған тынлыҡҡа аптырап, башын күтәреп ҡараһа, Заһир Исмәғилев ихлас йылмайып ултыра икән. Шунан ректор йомшаҡ ҡына тауыш менән: "Ярай, улай булғас, бар, уҡыуыңды дауам ит", - тип оҙата. Бер ай самаһы үтеүгә, был ғаиләгә бер бүлмәле фатир бирәләр. Профсоюз ойошмаһынан матди ярҙам да күрһәтәләр, тип һөйләгәйне был артист тапшырыу ваҡытында.

Эйе, дөрөҫ, бурыс ике яҡлы була, һәм шулай булырға тейеш тә. Йәштәр, ғаилә ҡороп, милләтен ишәйтергә, ә дәүләт уларҙы лайыҡлы йәшәү шарттары менән тәьмин итергә тейеш. Күпме генә тәнҡитләнһә лә, совет осоронда ошо ҡағиҙә күҙәтелә ине. Ә хәҙер...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Бер "Постскриптум" тапшырыуында сит ил аналитигы: "Аңламаҫың был Рәсәйҙе. Бөтә донъя социаль яҡтан тигеҙ йәмғиәт төҙөргә ынтылғанда, Рәсәй, социализмды емереп, капитализм төҙөй", - тип сығыш яһағайны. Ҡытайҙар, социализмдың емермәй генә, иленә баҙар иктисады индерә...**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

✓ *Махсус фәнни баҫмалар аҙ - 100-500 дана тираж менән генә сыға һәм хатта белгестәрҙең үҙҙәренә лә етмәй ҡала. Ошо сәбәптәр арҡаһында башҡорттоң боронғо мәҙәниәте һәм тарихы тураһындағы дөрөҫлөк халыҡтан ситтә ҡала.*



*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ҒӘЙЙӘРЛЕГЕ СИКҺЕҘ -

## халҡым бахырлыҡтан ҡотоласаҡ!



**Бер саҡ "Өфө - Сибай" поезында тыуған яҡтарға ҡайтып барғанда бер башҡорт ҡатыны менән һөйләшеп барҙыҡ. Шул һөйләшеүҙән ҡалған ауыр тәьҫорат әле һаман баштан сыҡмай.**

Был ҡатын Белорет ҡалаһында йәшәй. Үҙе тыумышы менән Учалы районынан. Милләте - башҡорт. Ире лә башҡорт, Әбйәлил районынан икән. Баяғы ҡатын миңә хәбәрен урыҫса һөйләне, ә мин - үҙ телебеҙҙә, башҡортса. Был ҡатын юғары белемле: Омск ҡалаһында ниндәйҙер институт бөткән. Ҡобағош ауылынан икәнен белгәс: "Ни өсөн үҙ телеңдә һөйләшмәйһең?" - тип һораным. "Эшләгән еремдә гел урыҫса һөйләшкәс, шулай өйрәнгәнмен. Өйҙә лә гел урыҫса һөйләшәбеҙ", - тигән яуап ишеттем. Бер ул, бер ҡыҙ үҫтерәләр ире менән. Улы әле XI синыфта уҡып йөрөй. Балалары урыҫса уҡый, урыҫса ғына һөйләшә, туған телдәрен белмәй. Бындай башҡорттарҙы күп күргәнем булғас, тәүҙә әллә ни аптырамаһым да. Ләкин баяғы ҡатын: "Улым башҡорт булыуынан ояла, урыҫ булғыһы килә", - тигәс, ныҡ ғәжәпләндем. Һәм баяғы мин күрмәгән-белмәгән меҫкен малай ошо һөйләшеүҙән һуң башымдан сыҡмай, йыш ҡына иҫкә килеп төшә.

Әсәһенең һөйләүе буйынса, малай буйға оҙон, физик яҡтан көслө генә, мәктәбе өсөн ярыштарҙа ҡатнаша икән. Тимәк, бирешеп, туҡмалып йөрөй торғандарҙан түгел. Был малайҙың меҫкенләнеүенең сәбәбен әсәһе менән һөйләшеп бара, төпсөнә торғас, аңлағандай иттем. Ата-әсәһе лә, баяғы малай ҙа үҙ халҡы, уның үткәне, хәҙерге тормошо тураһында бер нәмә лә белмәй. Ошо наҙанлыҡ уларҙы меҫкен, бахыр хәленә төшөргән. Үҙебеҙҙең халыҡтың ифрат бай мәҙәниәте, ҡаһарманлыҡ менән һуғарылған үткәне тураһында үҙем белгән тиклемен баяғы ҡатынға аңлатырға тырыштым. Һәм телгәнемә ирештем кеүек. Был ҡатын күҙгә күренеп үҙгәрҙе, тип әйтә алам. Ул: "Һеҙ һөйләгәндәрҙе ҡайтҡас улыма, ҡыҙыма һөйләрмен. Беҙ бит үҙебеҙ тураһында бер нәмә лә белмәйбеҙ. Үҙебеҙҙең халыҡты наҙан, аңра булған тип уйлай, шуға ояла инем", - тип, үҙҙәренең туған телендә һөйләшмәүенең сәбәбен аңлатырға теләне.

Ысынлап та, беҙҙең халыҡ әле булһа үҙ тарихын тулыһынса белмәй. Тарихсыларыбыҙ ҙа байтаҡ кеүек. Башҡорттар тураһында улар яҙған мәҡәләләр ҙә байтаҡ. Тик улар халҡыбыҙға барып етмәй. Махсус фәнни баҫмалар аҙ - 100-500 дана тираж менән генә сыға һәм хатта белгестәрҙең үҙҙәренә лә етмәй ҡала. Ошо сәбәптәр арҡаһында башҡорттоң боронғо мәҙәниәте һәм тарихы тураһындағы дөрөҫлөк халыҡтан ситтә ҡала. Ә үҙ тарихын белмәгән халыҡ бахырлыҡҡа дусар ителә, меҫкенләнә. Юҡҡамы ни, борон-борондан илбаҫарҙар иң тәүҙә тарихи ҡомартҡыларҙы, тарихи китаптарҙы, халыҡтың үткәнен хәтеренән юя торған бөтә нәмәләрҙе юҡ итер булған. Мәҫәлән, Америка ҡитғаһын яулап алған европалылар иң тәүҙә алдынғы мәҙәниәтле ацтектарҙың ҡомартҡыларын юҡ итә. Ул халыҡтарҙың үткәне менән бөгөнгөһөн бәйләп тороусы тамырҙарын өҙәләр. Хәҙер баяғы ацтектарҙың вариҫтары үҙҙәренең боронғоһо тураһында бер нәмә лә белмәй, меҫкен хәлендә йәшәй. Беҙҙең башҡорттоң тарихында ла быға миҫалдар күп. Һәр башҡорт ихтилалы ваҡытында батша карателдәре иң тәүҙә беҙҙең халыҡтың китаптарын, төрлө яҙмаларҙы юҡ иткән. Сөнки был яҙмаларҙа беҙҙең шәжәрәләр урын алған, халҡыбыҙҙың ошо ерҙәргә хоҡуғы нығытылған булған. Батша властары халыҡты үҙ тарихынан яҙҙырыуҙың башҡортто еңеү менән тиң икәнен яҡшы аңлаған. Һәм халыҡтың тамырын ҡоротоу өсөн көсөнән килгәндең бөтәһен дә эшләгән.

Беҙҙең халыҡ тарихты белеүҙең ни тиклем кәрәкле һәм был ихтыяждың ҡәтғи талап икәнен белгән. Башҡорт элек-электән йондоҙҙарҙы, ете быуынын һәм ата-бабаларының тарихын белергә тейеш булған. Беҙҙең тарихыбыҙ ныҡ боҙолған, меҫкенләтелгән хәлдә күрһәтелә килде совет власы йылдарында. Башҡа милләт тарихсыларының, сәйәхәтселәренең башҡорттар тураһындағы хәҡиҡәти хеҙмәттәре әле яңы ғына еткерелә башланы беҙгә. Улар менән танышыу кәрәк. Һис юғы, халҡыбыҙ тураһында әйтелгән бәләкәй генә әйтем-мәҡәлдәр тел особоҙҙа булһын. Мәҫәлән, ҡаҙаҡтарҙа: "Ат мыҡтысы мастактыр, ир мыҡтысы истәктер", - тигән маҡтау таралған. Элек Салауат тураһында хатта дошмандары ла "Славный Салават!" тип һоҡланған. Беҙҙе күтәрмәләгән бындай хәҡиҡәти һүҙҙәр-әйтемдәр бик күп, уларҙы хәтергә яҙып ҡуйыу кәрәк.

Аңыбыҙ ныҡ ҡына таушалған, имгәнгән булһа ла, төҙәлергә, аяҡҡа баҫырына өмөт бар. Беҙҙең халыҡтың йәшәү үҙәге ныҡ көслө. Үҙ халҡымды күптән тикшереүсе, өйрәнеүсе булараҡ, мин бының шулай икәнен беләм һәм үҙ халҡымдың ғәййәрлегенә ышанам. Әммә... "Булыр илдең балаһы бер-береһен батыр, тиер, бөлөр илдең балаһы бер-береһен бахыр, тиер", - тигән әйтем телгә килеп, хәүефләнеп тә ҡуйыла.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**тарихсы-этнограф.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔**1774 йылдың 25 ноябре** - Салауат һәм уның дүрт дуҫы Ҡаратаулы ауылы янында тотола.

➔**1775 йылдың 10 ғинуары** - Е.И.Пугачев һәм уның көрәштәштәре Мәскәүҙә язалана.

➔**1775 йылдың 15 ғинуары** - Яйыҡты - Урал, яйыҡ казактарын - урал казактары, Яйыҡ ҡалаһын Уральск тип үҙгәртеү тураһында исемле указ донъя күрә.

➔**1777-1778 йылдар** - Ф.И.Грамматчиков менән А.Губер берг-коллегия ҡушыуы буйынса Урал тау заводтарының Ҙур атласын төҙөй.

➔**1777-1829 йылдар** - Л.Лугининдың Миәс заводы эшләгән йылдар.

➔**1780 йыл** - Пермь һәм Вятка наместничестволары ойоштороaccess.

➔**1781 йыл** - Өфө наместничествоһы булдырыла.

➔**1781-1782 йылдар** - Сембер һәм Өфө губерналарында Иван Варфоломеевич Якоби идара иткән.

➔**1781 йыл** - Алапаевск, Ҡамышлы, Шадринск нығытмаларына ҡала статусы бирелә.

➔**1781 йыл** - Бәләбәй өйәҙ ҡалаһы тип иғлан ителә. Борондон бында башҡорттар ғына йәшәһә, аҙаҡ сыуаштар күсеп килгән.

➔**1781 - 1868 йылдар** - Йыраусы һәм сәсән Буранбай Йәркәй йәшәгән.

➔**1782-1784 йылдар** - Сембер һәм Өфө генерал-губернаторы Аким Иванович Апухтин идара иткән. Губерна сиктәрендә күсмә тормош алып барыу өсөн урҙасыларға биләмә бүлеү мәсьәләһен тикшереүҙә ҡатнаша.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Филипп НЕФЕДОВ*

# ХАЛЫҠ БАТЫРЫ САЛАУАТ

Шул мәл Яйыҡ ҡалаһы янында, әйтерһең дә, ер аҫтынан пәйҙә булғандай, Пугачев ҡалҡып сыға, ә Башҡортостанда Салауат үҫеп етә...

Себер даруғаһы буйындағы Өфө провинцияһының Шайтан улысы таулы Юлай ауылында һәләте һәм үҙенең хәле буйынса бөйөк шәхес - Юлай Аҙналин тигән башҡорт йәшәгән. Аҫаба башҡорт, аҡыллы, хәлле, абруйлы кеше булараҡ, ул бер нисә йыл рәттән улыс старшинаһы итеп һайлана килгән. Урындағы властар ҙа башҡорт старшинаһына ышаныс белдергән; ҡалмыҡтарҙы ҡыуа төшкәндә Юлайҙы ла юҡҡа ғына алмаған инде улар. Конфедераттар болаһын баҫтырырға Польшаға ла барып ҡайта Юлай. Урыҫ хөкүмәтенә уның тоғролоғона ҡарата һис бер шик тыуырлыҡ булмай. Бына ни өсөн бынан алдағы болалар һәм эҙәрлекләүҙәр ҡойоно уны урап үтә һәм ул урынында имен ҡала килә. Улай ғына ла түгел, 1768 йылда Ырымбур губернаторы кенәз Путятин үҙе Юлайҙы Башҡорт командаһы старшинаһы итеп тәғәйенләй. Ләкин башҡорт старшинаһы асылда тыштан күреп өйрәнелгәнсә, бер ҡатлы ғына кеше булып сыҡмай. Юлайҙың күҙ алдында башҡорт ауылдары яна, тыуған иле бөлә; күптән түгел коллеж асессоры чинына эйә булған сауҙагәр Твердышев тарафынан Сим заводы өсөн старашинаның үҙенең ерҙәре һәм ауылдары тартып алына... Күкрәгендә иленә ҡайнар һөйөү хисе йөрөткән ысын башҡорт, Юлай тирә-яғындағы күренештәрҙең битараф тамашасыһы булып ҡала алмай, әлбиттә; әлегә тиклем үҙ хистәрен тыйып, күрһәтмәй килһә лә, эстән үс тойғоһо менән яна.

## Салауат бына шундай атанан донъяға килә...

Бәхетле ата- әсәһенең йылмайыуҙары менән бергә яндырылған ауылдарҙың офоҡ яҡтыһындағы ҡанлы сағылышы ҡаршылай яңы ғына тыуған Салауатты. Ғаилә, тәбиғәт һәм мәктәп уның тәрбиәселәре була, зирәк бала улар йоғонтоһонда буй еткерә, көс һәм белем туплай һәм ошо шарттарҙа буласаҡ батырҙың характеры сыныға. Өйөндә ул әсәһенең моңло йырҙарын тыңлап үҫһә, атаһы иһә халыҡ хәсрәттәре хаҡында бәйән итә уға; йәйҙәрен йәйләп яткан йәйләүҙәрҙә лә ул башҡорттарҙың бәхетле заманалар хаҡында хәтирәләрен, йырҙарын, риүәйәттәрен, батырҙар һәм бөйөк шәхестәр хаҡында хикәйәттәрен тыңлай. Хисле, ярһыу һәм шиғри күңелле Салауат бөтәһен дә аңына һеңдерә, тыуған ере гүзәллектәренән тәьҫирләнә. Тик бөтөн күргән һәм ишеткәндәре, асылда, ҡайғылы күҙ йәштәренә мансылған, ә ата-бабаларының үткән тарихы именлек һәм ирекле тормош булып күҙ алдына баҫа. Бала аңын әлегә бигүк асыҡланып етмәһә лә үҙенән-үҙе килеп тыуған бер һорау биләй. Тиҙҙән, әлбиттә, был һорау аныҡ йөкмәткегә тулыланып, яуабы ла табыласаҡ. Тик әлегә ул сабый ғына: туптай малайҙың әлегә уйнағыһы, йүгергеһе, ҡаяларға үрмәләгеһе, тауҙарға артылып, бейектән алыҫҡа-алыҫҡа бағып торғоһо килә...

Бына тиҙҙән Салауатҡа 16 йәш тә тула. Кәүҙәгә әллә ни бейек булмаһа ла, ул дәү физик көскә эйә егет булып үҫә. Мыҡты кәүҙәһенән, киң яурындарынан шундай көс һәм дә һөйкөмлөлөк ташып тора; ә уйсан ҡара күҙҙәре аҡыл һәм ҡөҙрәт нурҙары сәсә. Көс, таһыллыҡ һәм ҡорал менән оҫта эш итеүҙә Салауатҡа тиңдәр табылмай.Ул беренсе егет; көрәштәрҙә лә уға тиңләшеүсе юҡ; ул айыуға ла бер үҙе барып, үлтерелгән йыртҡысты яурынына һалып алып ҡайта. Ә һабантуйҙа һуң кем бәйгеләрҙә беренсе сабып килеп, иң беренсе сибәр ҡулынан бүләккә ебәк ҡулъяулыҡ ала? Салауат! Баһадирлыҡ ҡорона шулай бик иртә инә ул. Әле үҫмер генә сағында уҡ халыҡ уға арнап йырҙар сығарған... Ләкин Салауат тупаҫ физик көскә генә эйә түгел, ул - ғалим һәм шағир. Ул Ҡөрьән һәм шәриғәтте камил үҙләштергән - үҫмер алдында хатта аҡһаҡалдар ҙа сал баштарын эйә: Салауаттың уҡымышлылығы муллаларҙы ғына түгел, ахундарҙы ла таң ҡалдыра икән, тиҙәр. "Ундағы аҡыл һәм ғилем - Хоҙайҙан", тигән фекергә килә ҡарттар. "Салауат бөйөк кеше булыр!" тип күрәҙәләй башҡорттар.

Шиғри тойғолар ҙа иртә уяна Салауатта. Тәбиғәт, тыуған ил, батырҙар хаҡында хикәйәттәр уның тәрән тойғоло күңеленә үтеп инә һәм шиғри юлдарға һуҡмаҡ һалына...

**(Аҙағы).**

✓ *Эдуард Эвресмандың бер материалында батша һарайына һунар өсөн ҡоштарҙы Ағиҙелдең аҡ ҡаяларынан алыуҙары тураһында мәғлүмәт бар. Иҙел буйлап ҡаялар бар, әммә аҡ ҡаялар Бөрйәндә, Монасип эргәһендә генә.*





**Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тигән әйтем, моғайын да, юҡтан барлыҡҡа килмәгәндер. Боронғо тарихҡа байҡау яһағанда, ата-бабаларыбыҙ элек-электән ат үрсеткән, ағас эшкәрткән, солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгән, ер эшкәрткән, балыҡ тотоп, унығ тәңкәләренән елем эшләгән, ҡул эшенә оҫта булған, хатта йыртҡыс ҡоштарҙы ла ҡулға эйәләштергән. Был хаҡта башҡорт этнографияһы аҡһаҡалдарының берәһе, 40 йыл ғүмерен башҡорттарҙың тормош-көнкүреш мәҙәниәтен өйрәнеүгә бағышлаған тарих фәндәре кандидаты Мирза МУЛЛАҒОЛОВтан да яҡшыраҡ белгән кеше юҡтыр, моғайын. Сөнки 2013 йылда унығ "Башҡорттарҙың ыласын һунары" тип аталған китабы донъя күрә. Бөгөн Мирза ағай менән һунар ҡоштары хаҡында әңгәмәләшәбеҙ.**

# ИҢ ЯҠШЫ ҠОШСОЛАР - БАШҠОРТТАР!

**Күптән түгел Ҡырғыҙстанда үткән Бөтә донъя күсмәндәр уйындарында ҡырғыҙҙар, ҡаҙаҡтар: "Башҡорттар, һеҙҙә бит элек ҡош өйрәтеү, ҡош менән һунар итеү, хатта батша ғәскәрҙәрен һунар ҡоштары менән тәьмин итеү киң таралған булған, ни өсөн ошо шөғөлдө оноттоғоҙ?" тип аптырағандар. Һеҙ ошо хаҡта китап та яҙғанһығыҙ, тимәк, ошо һүҙҙәрҙе дәлилләрлек сығанаҡтарҙы ла беләһегеҙ. Башҡорттар тураһында ниндәй ғалимдар шулай тип яҙып ҡалдырған?**

- XVIII быуаттың бик күренекле кешеһе ғалим-зоолог, бөтөн донъя ҡоштарын өйрәнеүсе немец сәйәхәтсеһе Альфред Брем ҡош менән һунар итеү буйынса башҡорттарҙы бик өҫтөн урынға ҡуя. Икенсе немец ғалимы, географ һәм этнолог Фридрих Рацель XIX быуаттың башында, һунар ҡоштарын әҙерләүҙә башҡорттар оҫталыҡ буйынса иң юғары урында тора, тип ҡыҫҡа ғына һөйләм яҙа. Әммә тарих өсөн был һөйләм дә бик ҡиммәтле. Шунан Санье тигән итальян ғалимы башҡортто маҡтап яҙып ҡалдыра. Ул да шул уҡ фекерҙе ҡабатлай. Рус сәйәхәтселәренән Иван Иванович Лепехин башҡорттарға ҙур иғтибар бүлә.

Өфө дини семинария уҡытыусыһы, яҙыусы Василий Зефиров, башҡорттарҙың ҡош һунары тураһында түбәндәгеләрҙе яҙып ҡалдыра: "Мы ехали впереди всей длинной, скрипучей кавалькады; табуны гнали по сторонам. Проехав небольшое ущелье гор, старшина крикнул что-то сыновьям своим и помчался со мною вперед. Огромное озеро, среди зеленой степи, открылось перед нами и, кажется, задыхалось от миллиона уток и гусей. Крик их, крик страха и негодования, давал нам знать, что они нас видят; но этого-то и хотелось старшине. Нам привезли ружья.

- Стреляй, - кричал мне старшина.

- Да разве можно что-нибудь убить? Ружья не хватит.

- Стреляй, - закричал он почти с сердцем. И мы враз из шести ружей пустили оглушительный звук, без всякой цели. Птица вся поднялась с озера и густой тучей понеслась в поле; мы поскакали вслед за ней. Вдруг четыре сокола и беркут, спущенные с привязок, врезались, как смертоносные пули, в эту перепуганную стаю. Но надобно видеть, чтобы понять эту картину. Ловкость и сила соколов одушевляли и веселили меня; но беркут, этот крылатый волк, был ужасен в своих действиях; я даже думал было выстрелить в него, когда он на лету, почти над моей головой, растерзал гуся и пустился за другим, за третьим, за четвертым и так далее. Увидев, что соколы уже не могут управиться с разлетающейся птицей, он молнией облетел все пространство побоища, сбил ее в одну стаю и снова упивался кровожадным удовольствием: бить крылом и терзать когтями.

В час все было кончено. С последней птицей соколы пали на землю, но беркут все еще носился в воздухе и тогда уже спустился, когда ему показали гуся, облитого кровью.

- Что, хазрет, видел ли ты когда такую охоту? - спросил меня старшина.

- Нет, друг, даже и не предполагал, что можно передушить сотни птиц так скоро и так весело".

Башҡа халыҡтарҙа ҡош менән һунар итеүҙе шулай ентекле итеп яҙыусы юҡ. Бында шуға ла иғтибар итергә кәрәк, бөркөт менән ыласын - бер-береһенә дошман ҡоштар, әммә һунар ваҡытында улар бер команда булып эш итә: ыласындар ҡош тубын тарҡата башлабәрелеп, һәләк була. Ҡош тиһәң дә, уларҙа ла йөрәк бар. Ҡайһы берҙәренең йөрәге төшөп еткәнсе үк ярылыуы мөмкин. Ояла ла бер бала ла ҡалмай.

Башҡорттарҙа иһә ҡош балаларын алыусы ҡаясылар була, йөрөп, үрмәләп ала, унан башҡа икенсе бер миһырбанлы ысул бар. Уның асылы шунда: ҡая башында ике бағана ҡағып, шуға сикһеҙлек рәүешендә арҡанды урап, ҡаясыны яйлап төшөрә баралар. Был ысулдың ыңғай яғы нимәлә: ҡош балаһын алырға төшөүсе ояла мотлаҡ бер баланы үрсем өсөн ҡалдыра. Сөнки был ҡоштар бик яй үрсей. Сағыштырып ҡараһаҡ, башҡорттарҙың ысулы менән ҡаҙаҡтарҙыҡын бер рәткә ҡуйып булмай. Башҡорттарҙың ысулы күпкә өҫтөн һәм ҡош ярҙамында һунар итеү халҡыбыҙҙың борон-борондан килгәнлеге, ул ғына ла түгел, ниндәй генә кәсептә булмаһын, беренсе урынға тәбиғәтте һаҡлауҙы ҡуйыуы хаҡында һөйләй.

**Шулай ҙа башҡорттарҙа был һөнәрҙең башы нисәнсе быуаттарға барып тоташҡаны билдәлеме?**

- Татар-монголдар ул ваҡыттағы башҡорт дәүләте территорияһына 13-сө быуатта килә. Шул ваҡытта уҡ улар башҡорттарҙың ҡош һунары буйынса оҫта икәнлеген белгән һәм шуға күрә



ғас, бөркөт уларҙы тағы бер урынға туплап, ҡыра башлай. Бына ошонда ла башҡорттарҙың оҫталығы күренә - бер-береһенә дошман ҡоштарҙы дуҫ, бер-береһенә ярҙам итерлек итеп тәрбиәләүгә өлгәшкәндәр. Был, әлбиттә, еңел эш түгел.

Шунан тағы бер нәмәгә иғтибар итергә кәрәк: ҡош һунары менән элек батшалар ҙа ҡыҙыҡһынған. Рәсәй натуралисы, ботанигы, табип һәм сәйәхәтсеһе, сығышы буйынса немец Эдуард Эвресмандың бер материалында батша һарайына һунар өсөн ҡоштарҙы Ағиҙелдең аҡ ҡаяларынан алыуҙары тураһында мәғлүмәт бар. Иҙел буйлап ҡаялар бар, әммә аҡ ҡаялар Бөрйәндә, Монасип эргәһендә генә. Уларҙан ыласындарҙы, дөрөҫөрәге ыласындар класынан иң ҙур әһәмиәткә эйә ҡошто - шоңҡарҙы алғандар. Элек был хаҡта бабайҙар ҙа һөйләй торғайны, әммә тикшеренеү темам ул булмағас, ул саҡта иғтибар итмәнем.

**Шуға ҡарамаҫтан, бөгөн был йәһәттән ҡырғыҙҙар, ҡаҙаҡтар күпкә алда бара...**

- Заманында Ленинградҡа командировка ваҡытында архивта, "Ҡош ярҙамында һунар итеү буйынса беренсе урында ҡаҙаҡтар тора", тигәс, бер ҡаҙаҡ ғалимы менән бәхәсләшеп киттем. "Улай булғас, кемдәр, ниндәй сит ил ғалимдары һеҙҙең турала яҙып ҡалдырған?" тип һораным. Бер генә кешене лә белмәй. Ә мин беләм. Шунан, ҡоштоң балаһын нисек алаһығыҙ, тип һорайым. Ыласын, мәҫәлән, ҡаяла оя ҡороп, балаһын ҡаяла сығара.

Ҡаҙаҡтар ҡош балаһын алыу өсөн биҙрәгә таш тултыралар ҙа, уны арҡанға бәйләп, ҡош ояһы турыһына тиклем төшөрәләр һәм ян-яҡҡа һелкетәләр. Таштар шалтырай башлай, ҡош балалары ҡурҡышып, ояларынан сыға һәм аҫҡа ҡолай. Ҡая аҫтында бер нисә ҡаҙаҡ көтөп тора. Ҡолаған ҡоштарҙың тота алғанын тота, тота алмағандары ергә

ҡош балаларын үрсетеп, өйрәтеп тапшырыу һалымын һалалар. Башҡорттар һалымды ҡошлата түләйҙәр.

**Элек һунар өсөн ҡарсыға, ыласын, бөркөттө өйрәткәндәр. Хәҙер ни өсөн бөркөткә өҫтөнлөк бирәләр? Тап Зефиров яҙған ажарлыгы өсөнмө, әллә башҡа ҡоштар юҡмы?**

- Ҡоштарҙың барыһы ла бар, әммә бөркөттөң атамаһы уҡ өйрәтеүсегә абруй өҫтәй. Икенсенән, ул йола ҡошо, борондан башҡорттоң ғөрөф-ғәҙәтенә бәйле традицияларҙы үтәгәндә, бөркөттө файҙаланғандар, уны ололағандар. Уҡтың ҡанаттарын да бөркөт ҡауырыйынан эшләгәндәр. Өйрәтеүгә килгәндә, бер ҡошто ла өйрәтеү еңел түгел. Заманында Ғафури районында бер һунарсыла булдым. Ул ваҡытта башҡорттарҙың транспорт ҡоралдары буйынса материалдар йыя инем, бер шундай миҫалға осраным. Бабай менән һөйләшеп ултырабыҙ, "Бына, бөркөт бар ине, - ти - ҡая аҫтына алып барып күмдем". Шунда ла иғтибар итмәнем. Ә бит нишләп ул бөркөттө ҡая аҫтына алып барып күмгәнлеге тураһында төпсөшергә, һорашырға тейеш инем. Бөркөттө ҡая аҫтына күмеү ҙә күп нәмә тураһында һөйләй, үҙенә күрә ниндәйҙер сере бар.

Башҡорт халҡы үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылғас, мендәрҙең: "Беҙ ҡушылдыҡ, хәҙер еребеҙ ҙә булды, бөркөттәребеҙ ҙә булды", - тип яҙып ҡалдырыуы ла бөркөттөң хужалыкта ер кеүек үк мөһим әһәмиәте тураһында һөйләй. Минеңсә, был һунар менән бәйле булырға тейеш.

Ырымбур ҡалаһына нигеҙ һалған губернатор Кириллов: "Малдарығыҙ иркен йөрөй, бүре һуҡмаймы һуң?" - тип һорағас, башҡорттар: "Бүреләрҙе ҡырып бөтөрҙөк инде", - ти, әммә нисек икәнен әйтмәй. Минеңсә, улар был йыртҡыстарҙы бөркөттәр ярҙамында ҡырған булырға тейеш.

**Ә һунар ҡоштарын нисек әҙерләйҙәр, нисек һунарға өйрәтәләр?**

- Командировкаларым ваҡытында миңә бер бабай менән ҡош һунары тураһында әңгәмәләшергә тура килгәне. Һунар алдынан үҙең дә төн буйы йоҡламайһың, ҡошҡа ла йоҡларға ирек бирмәйһең һәм ашатмайһың. Ас һәм йоҡламаған ҡош һунарға әүәҫ була. Кем тырыш, ныҡыш - шул ғына һөҙөмтәгә эйә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**"Минеңсә, хатта шундай ғәҙәт тә булғандыр, моғайын: егеттәр кәләш алғанға тиклем ҡош өйрәтергә тейеш була. Беренсенән, егеттә ниндәйҙер кимәлдә талапсанлыҡ, егет ҡомары тәрбиәләнә. Икенсенән, ул ҡошто өйрәтә - был үҙе бер оҫталыҡ, дан. Ҡыҙҙар тап шундай ҡошсо егеттәргә тормошҡа сығырға тырышҡан да инде. Аталары ла уларҙы шундай егеттәргә биргән. Ысынлап та, был ғәҙәт башҡортто тәртипле итеп тәрбиәләгән. Ваҡыттарын теләһә нисек уҙғарғанға ҡарағанда, улар файҙалы эш менән шөғөлләнә. Егеттәр бер-береһе менән оҫталыҡ буйынса ярыша", - ти Мирза Ғиләжетдин улы. Бәлки, был һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ барҙыр, сөнки бер генә хайуан, ҡош-ҡорт, шул иҫәптән бал ҡорто ла кире ғәҙәттәрҙе, насар еҫтәрҙе яратмай. Ә башҡорттар борон-борондан тәбиғәт балаһы булған һәм тәбиғәттәге тереклекте ҡулға эйәләштереп, үҙенә өйрәтеп донъя көткән. Бәлки, бөгөн онотолған шөғөлдәрҙең береһе булған һунар ҡоштарын өйрәтеүҙе ҡабаттан тергеҙергә кәрәктер?**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

# АЛДАНА-АЛДАНА...

## үҙ эшен асырға ниәтләгән йәш эшҡыуарға кәңәштәр

**Гәзитебеҙҙең 33-сө һанында "Алыпһатар булып ҡараным..." тигән мәҡәләм донъя күргәйне. Унда яңы эш башлаған эшҡыуарға, йәғни һатыу нөктәһе асыусыға ниндәй ҡыйынлыҡтар менән осрашырға тура килеүе, хатта башланғыс капитал өсөн бурысҡа ла батмайынса, яҡшы ғына эш башлаған кешеләр булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, һәр төрлө яһаҡтарға түҙә алмай, өс йыл эсендә, башлаған эшебеҙҙе ҡабаттан ябырға мәжбүр булыуыбыҙ хаҡында бәйән иткәйнем. Ә был мәҡәләмдә ана шул дәүерҙә үҙебеҙҙә һатыусы булып эшләп киткән гүзәл заттарыбыҙ хаҡында һүҙ алып бармаҡсымын.**

Туҡталыштағы павильонды һатып алыу менән, уның эсендәге кәштәләргә тауарҙарыбыҙҙы - аҙыҡ-түлектәрҙе урынлаштырып йөрөүебеҙ. Магазиныбыҙҙың тышына ҙур ғына итеп "Требуется продавец", тип иғлан да яҙып ҡуйғанбыҙ. "Беҙгә һатыусы булырға кем килер тиһең, тәү осорҙары үҙебеҙ һатып торорбоҙ инде", тип һөйләшә-һөйләшә тауарҙарыбыҙҙы рәткә теҙгеләйбеҙ. Шул саҡ бер ханым беҙгә өндәште. Аҙ ғына эш хаҡына ла беҙгә һатыусы булып эшкә урынлашырға риза икәнен белдерҙе. Беҙҙең шатлыҡтың иге-сиге булманы. Валяны (исеме үҙгәртелде) эшкә алдыҡ та, сауҙаны башлап та ебәрҙек. Валяның беҙ алып килгән тауарға бик оҫта ғына итеп хаҡ проценттары ҡуйыуына, ошо өлкәлә хатта беҙҙең ҡулыбыҙға эш тә тейҙермәүенә шатланып бөтә алманыҡ. Ул базанан килтергән һәр тауарҙың һатып алынған хаҡына тейешенсә, йәғни, унар-егермешәр процент өҫтәп, "приход" дәфтәренә матур ғына итеп яҙып, ҡабул ителгән аҙыҡ-түлектең дөйөм суммаһын сығарып уҡ ҡуя. Ул ғына ла түгел, шундуҡ витриналарға теҙелгән тауарҙарға маркер менән яҙып, хаҡтар йәбештереп сыға. Хәҙер беҙҙең эш фәҡәт базанан тауар ташыуҙан ғына ғибәрәт булып ҡалды. Бер көн эшләгәс, эш аҙағында Валя ҡулыбыҙға "выручка" тотторҙо. Үҙебеҙҙең ҡарамаҡҡа һәүетемсә генә тойолған был тәүге аҡсабыҙға ла ҡыуандыҡ. Уға магазиндың аҫҡысын һәм мисәт тә биреп ҡуйҙыҡ. Көн дә эштән һуң ул үҙе ишекте йоҙаҡлап, мисәтләп ҡайтып китә.

Валя ун көн эшләгәс, тағы бер һатыусы таптыҡ. Беҙҙең ниәт хәҙер инде магазиндағы һатылған һәм ҡалған тауарҙарҙы барлап, Валябыҙға ун көн ял биреү. Валя ревизия үткәреп, ваҡ-төйәк менән артыҡ мәшәҡәтләнеп тормаҫҡа, яңы һатыусы Рәсимә менән (исеме үҙгәртелде) тауарҙы үҙ-ара ғына тапшырышырға тәҡдим итте. Шундайын да ярҙамсыл Валяның һүҙен йығырға беҙ, әлбиттә, баҙнат итмәнек. Улар үҙ-ара тауар тапшырышҡан мәлдә Валя апайҙың өс йөҙ һум тирәһе бурысы булыуы асыҡланды. "Мин фәлән-фәлән продукт алып ҡайтҡайным, эш хаҡымдан алыгыҙ ҙа ҡалығыҙ..." - тине апайыбыҙ бер ҙә иҫе китмәйенсә. Валяның унһыҙ ҙа эҙ генә эш хаҡынан өс йөҙ тәңкәне тотоп ҡалырға ҡыймаьыҡ. Уға ун көн эшләгәне өсөн һөйләшелгән сумманы тулыһынса бирҙек.

Киләһе ун көндә Рәсимә һатты. Яңы һатыусыбыҙҙың эш тәжрибәһе булмауына ла ҡарамаҫтан, көндәлек төшөм зарланырлыҡ түгел. Яныһан-яңы тауарҙар килтереп, дәртләнеп, эшебеҙҙе артабан дауам итәбеҙ. Сираттағы ревизияны яһап, магазинды Валя ҡабаттан ҡабул итте. Тик Рәсимәбеҙҙең... дүрт мендән ашыу (ун көн эсендә!) аҡсаһы етмәй булып сыҡты. "Төшөмдөң бер тиненә лә, бер тауарға ла теймәнем, ағайҙар, ышанығыҙ миңә", - тип, Рәсимәбеҙ күҙ йәштәрен түгә. Ә шул ун көн эшләгәне өсөн һатыусы өмөт иткән эш хаҡы был етешмәгән сумманың тик яртыһын ғына тәшкил итә! "Ярай, Рәсимә һылыу, киләһе ун көнөңдә иғтибарлыраҡ эшлә", - тип, эш хаҡын уға ла тулыһынса түләйбеҙ...

Киләһе ревизия. Валяның бурысы тағы ла ике-өс йөҙ һумдан артмай. Эш хаҡына ҡушып, уға хатта бер аҙ премия ла биреп ташланыҡ. Тик артабан да эшен дауам иткән меҫкен Рәсимәнең етешмәгән тауары был юлы биш мең һумдан ашыу сумма тәшкил итә! Тағы күҙ йәштәре... "Ярар, һылыу, башҡаса беҙ һинең менән бергә эшләй алмаҫбыҙ. Мә, эш хаҡыңды ал да, эштән кит. Башҡа һатыусы эҙләргә тура килер..." Шулай итеп, был ҡыҙҙы эштән сығарып ебәрергә тура килде.

Киләһе һатыусы Йәмилә менән дә шул уҡ Рәсимәнеке кеүек хәл ҡабатланды...

Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә, тиҙәр. Ҡырҡ йылдан күпкә иртәрәк, йәғни, бер нисә айҙан, башыбыҙға ла килтерә алмаған бәгзе нәмәләр беленә башланы. Валя апайҙың ни өсөн шундай егәрлелек менән тауарға хаҡ ҡуйып, ярлыҡтарын витринаға йәбештереп, приход дәфтәрен беҙҙең ҡулға ла эләктермәй тиерлек алып барғанлығының серенә төшөндөк. Осраҡлы ғына иғтибар иттем: ярлыҡтарҙағы һәр бер хаҡ дәфтәрҙәгенән бер-ике һумға күберәк. Йәғни, һәр тауар берәмеге халыҡҡа һатылырға тейеш хаҡтан ана шунсаға ҡыйбатыраҡҡа һатылған. Айырмаһы, әлбиттә, беҙҙең кеҫәгә түгел, туранан-тура зирәк һатыусыға инә барған. Көн дә ҡүмәртәләп алып килгән тауарҙы ҡабул итеп алып, кәрәк яҙмаларҙы атҡарғас та үҙенә тейешенсә айырмаһын шундуҡ янсығына һалып ала был мут апай, тип аңланыҡ. Хисаплап сығарһаҡ, был "тырыш" һатыусының килеме һәүетемсә генә килеп сыға. Хатта беҙҙекенән дә юғарыраҡ! Беҙҙе "аҡылға ултыртҡанына" рәхмәт әйтеп, был апайҙы эштән бушатырға тура килде.

Башҡа смена һатыусыларының күпләп бурыслы булыу сәбәбенә лә һуңынан төшөндөк. Ревизия ваҡытында, тәжрибәһеҙ ҡыҙҙар күрмәгән мәлдә файҙаланып, һаналған яҡтан бер-нисә ҡумта, йә иһә ҡапсыҡ тауарҙы һаналмаған яҡҡа шылдырмалау асуы менән ревизия нәтижәһен үҙгәртеүгә өлгәшкән икән был мөләйем апайыбыҙ. Тәүҙә эшләп киткән Рәсимә, Йәмиләләр, ихтимал, намыҫлы ла эшләгәндәрҙер...

Кадрҙар алышынғас, башҡа йәш һатыусылар менән эшебеҙҙе дауам итәбеҙ. Ҡыҙҙарҙың күнелен төшөрмәҫ өсөн ревизияларҙағы табылған әллә ни ҙур булмаған етешһеҙлектәргә күҙ йоморға тырышабыҙ. Әммә шатлығыбыҙ оҙаҡҡа бармай. Күпмелер ваҡыттан элегәрәк ифрат та үтемле булған теге йәки был тауарҙың бөтөнләйгә тиерлек үтмәй башлағанын тоябыҙ. Пачкаларҙа һатыла торған көнбағыш, чипсы, шырпы һымаҡ тауарҙарҙы, һыра, тәмәкеләрҙе тәүҙәрәк күмәртә складтарынан магазиныбыҙға ташып өлгөртмәй инек, тиерлек... Ә хәҙер "Ҡыҙҙар, симешкәләр бөтмәнеме әле, базанан шырпы әпкиләйекме?" тигән һорауға, "Юҡ, ағай, әлегә барыһы ла бар", тип кенә яуап бирә һатыусыларыбыҙ. Һылыуҡайҙарыбыҙҙың береһен һунғы осорҙа йыш ҡына үҙенең хәләл ефете менән күмәртә складтары тирәһендә күреп ҡалғылай башланыҡ. Магазиныбыҙҙа инеп (унайһыҙ булһа ла), эстәге тәртипте тикшерергә булдыҡ. Ә унда, прилавка аҫтында, ысынлап та, әлеге әйтелгән тауарҙар байтаҡ ҡына йыйылып киткән. Теге базала күренгәләгән һатыусыбыҙ, йәш булыуына ҡарамаҫтан, беҙгә ҡарағанда зирәгерәк булып сыҡты. Беҙҙең бизнес өҫтөнән тағы бер "бизнес" асырға өлгәшкән был ҡыҙ, бәлки, ошо көндә берәй уңышлы ғына эшҡыуар ҙа булып та киткәндер...

Әлбиттә, ҡыҙҙарҙың барыһы ла алдашыусы һәм урлашыусы тип әйтергә ярамай. Араларында намыҫлы ҡыҙҙар ҙа булманы түгел, әммә бөгөн һүҙ улар хаҡында бармай. Яңы эш башларға йыйынуысы йәш яҡташтарыма бер нисә кәңәшем бар. Беренсенән, мөләйем йылмайған Валя апайҙарға ҡапылда ышанып бөтмәүегеҙ хәйерле. Уларға һинең бизнесың түгел, ә үҙҙәренең кеҫәһе ҡәҙерлерәк. Тәүге бер нисә йыл, әлбиттә, эшкә бухгалтер яллаға хәлдән килмәй. Шуға күрә лә, тауарға хаҡ ҡуйыу, ревизиялау кеүек нәмәләрҙе үҙегеҙ баштан уҡ үҙләштереп алыуығыҙ яҡшыраҡ булыр (һуңғараҡ, үҙегеҙҙең буласаҡ бухгалтерығыҙҙы контролдә тотоу өсөн дә быны кәрәге тейәсәк). Икенсенән, ҡыҙҙарҙың күҙ йәштәренә лә һәр саҡ ышаныу дөрөҫ түгелдер. Был мәсьәләлә принципиаллек күрһәтә белеү кәрәк. Ситтән үҙ тауарын алып килеп бизнес асып йөрөгән әлеге әрһеҙ ҡыҙ ҙа беҙҙән илай-илай эштән сығып киткәйне бит. Йәл, әммә ундай кешеләрҙе эштән бушатыуҙан башҡа сара юҡ. Өсөнсөнән, эшкә алырҙан тәүҙә һатыусының ҡайҙа эшләгәне хаҡында белешеп, йыбанмай ғына шул магазин хужаларынан һораштырыу һәм уларҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалыу мотлаҡ. Дүртенсенән, минеңсә, иң яҡшы, иң намыҫлы һатыусы - үҙең, ҡатының (ирең), бер туған апайың, йә һеңлең, йә иһә киленең.

Әйткәндәй. Һыра, тәмәке менән һатыу итеү - харам эш икәне беребеҙ өсөн дә сер түгел. Бәлки, үрҙә бәйән ителгән беҙҙең эште Раббыбыҙ тап ана шуның өсөн дә алға ебәрмәгәндер... Павильондарҙа ундай тауарҙарҙы һатыуҙы хөкүмәт тыйғандан һуң да, ошоғаса ифрат та уңышлы эшләп торған бернисә туҡталыш павильонын беләм.

Тағы: магазин тотоуыбыҙҙың ыңғай һөҙөмтәһен дә күрҙек (хатта быныһы - иң мөһимелер). Йәш һатыусыларыбыҙҙың иң егәрлеһе һәм намыҫлыһы - хәҙерге көндә беҙҙең киленебеҙ. Улым менән татыу ғаилә ҡороп, сәскәләй ике ҡыҙ үҫтерәләр. Әлхәмдүлиллаһ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**



Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА

# Беҙ алһыуҙары ғына...

(Хикәйә)

Әсәйемдең һығылып илаған тауышы ишетелә. Йөрәгем йәнә өҙөлдө... Тып-тып ҡаны тама башланы, ахыры! Инеп, елтерәтеп сығараһы инде әллә ҡәртәсәмде! Йөрөмәһен ҡайғы арттырып!

- Киленкәйем! Үҙ ҡыҙымдан яҡын, яратҡан киленкәйем! Ҡалайтайым һуң! - Минең ишеккә үрелгән ҡулым кире төшә. - Аптырағандан әйтеп ҡарайым инде! - Ҡәртәсәм дә мыш-мыш килә. - Һинән дә яҡшы киленде эҙләһәң дә табып булмай ҙа бит! Эх, улым, Йәнтимер улым! Шәм яндырһаң да тапмаҫһың, Йәнтимер! Әйттем мин һиңә: "Алма гурыттан, үҙебеҙҙә лә ҡыҙлар бөтмәгән", тинем. Юҡ, осоп-төшөп торҙо бит һин тип! Булһын, тине, йәшәрмен мин дә гурытта, тине. Йәшәне ана! Ауыл бисәһенә сығып китте барыбер! Тиң түгел инегеҙ шул, килен, тиң түгел! Шофер кешегә һауынсы йә бик булмаһа һатыусы тап-таман! Ә Йәнтимер һиңә, бер ҡурсаҡҡа, әүрәне... Уйнатып туйғайны, быны...

Башымды күтәрмәгә терәп, йәнә осоп киткәнмен. Ошо халәтемә һаман да булһа аптырайым - йоҡлап китәмме мин, әллә хыял донъяһына сумаммы? Әллә ҡурҡыныс ғазаптарҙан ҡасаммы? Бәлә, ҡайғы килһә, онотолоп, осоп китәм дә барамсы, әллә юҡҡа сығып тораммы?..

... Атай киткәнгә өс айҙан ашыу ваҡыт үтте. Хәҙер инде йәй етте. Күңелдең әрнеүе лә баҫылғандай, көнө-төнө һыу буйынан ҡайтып инмәгән беҙгә күңелһеҙләнеп ултырырға ваҡыт та юҡ кеүек. Шулай ҙа мине апайым, әсәйемдең бер туған һеңлеһе, үҙҙәренә ҡунаҡҡа алып ҡайтырға күндерҙе.

- Бер аҙна ғына тороп килһен инде. Бәлки, яңы ергә әүрәп, бер аҙ онотолор. Теге "кәпәс"ен һағына бит, - ти әсәйем.

- Торһон, торһон, бер аҙна ғына түгел, бер ай торһон, тарлыҡ юҡ, - апайым һөйләнергә әүәҫ, әсәйем кеүек йомоҡай түгел. - "Кәпәс"ен дә, һине лә онотор хатта.

Быға инде мин түҙеп тора алмайым: мин булған ерҙә, мине юҡ кеүек күреп һөйләшһәләр, енем ҡуҙа ла китә.

- Кәпәс түгел минең атайым! Һин үҙең кәпәс! - тип ҡаты итеп өндәшәм дә, ҡаты баҫып сығып китәм.

- Бәтәс! Бына һиңә кәрәкһә! - апайымдың бот сабып аптырарын беләм. - Үҫкәс, кем генә сығыр икән был әтийыштан?..

- Тегенең шауҡымы инде!

("Тегенең шауҡымы"н - кем йә нимә икәнен әсәйем миңә ҙурайғас һөйләне... Һуңғы класҡа еттем, кем булырымды уйламағанмын. Ниндәй һөнәрҙе иҫкә алһам, шул булғым килә лә китә. Уҡытыусы ла, артист та, юрист та, һатыусы ла, осоусы ла, тәҙөүсе лә ҡалманы. Минең аптырағанды күреп, әсәйем:

- Доктор бул! - тине ныҡ итеп. - Һин кешене үтәнән-үтә күрәһең, шул һәләтеңде ҡулланһаң, һинән дә һәйбәт доктор булмаҫ...

Һәм минең донъяға килеү тарихын һөйләне.

Баҡтиһән, атай менән әсәй өйләнешеп, байтаҡ йылдар йәшәгән, ә бәпәйҙәре булмаған. Алты йыл тулып, етенсегә киткәс, ҡәртәсәм килеп әрләгән быларҙы:

- Икәү генә ултырып ҡартаймаҡсыһығыҙмы? Әйттем алма гурыттан, алма әртистән тинем! Был бер услам кәүҙә эсендә ниндәй бала яралһын! Киттек дауаханаға! - тигән. Ә атай менән әсәй икәүләп тороп дауахана юлын күптән тапалап бөткәндәр икән. Икеһе лә һауһаҡ, ти. Ә бала юҡ.

- Килен, йә минең менән имсегә бараһың, йә улымды айырып алып ҡайтып китәм, - тигән ҡәртәсәм. Ирен ебәргеһе килмәгәнгә генә әсәй, ҡарсыҡ-ҡорсоҡтарға ышанмаһа ла, киткән эйәреп ҡәйнәһенә. Әллә ҡайҙа, ер сигендә ятҡан бер районлағы танылған имсегә барғандар. Тегеһе мунса ягып, аш һалып көтөп тора икән быларҙы. Үҙе бәлтерәп бөткән ҡарсыҡ ти.

- Мунса төшөп сығығыҙ, һәйбәт итеп сыбыныгыҙ, шунан имләрмен, - тигән. Шулай иткәндәр ҙә. Тәмле аш ашатып, сәйҙәр эсереп, һылап-һыйпап, был әсәйемде йоҡларға һалған. Ҡулы тейгәндән тән иҙерәп тора ине, ток һуҡҡан шикелле, ти әсәйем. Бала шикелле бер уянмай, рәхәтләнеп йоҡлаған. "Иншаллаһ, бәпәйҙәрең булыр, берәү генә лә түгел. Тик бала табыр көнөң еткәс, үҙемә кил, балнисҡа барма", - тигән. Әсәйем ҡаршылашһа ла, атайым менән ҡәртәсәм көсләп быны бала табырға әбейгә апарған. Шунда мин донъяға килгәнмен. Кендегемде үҙе ҡырҡҡан, йыуындырып, тәрбиәләгән. "Ныҡ һаҡлағыҙ был баланы, ябай ҡыҙ түгел, шауҡымлы булыр. Кешене үтә күрер, көсө, һәләттәре ашып-ташып торор", - тигән.

Бер аҙҙан сәләм, рәхмәт әйтеп, күстәнәс ебәрһәләр, әбейҙең вафат булыуын ишеттергәндәр. Шул әбей үҙенең һәләтен һиңә биреп ҡалдырған, ти әсәйем. Әллә, бер ниндәй ҙә һәләт күрмәнемсе! Бары баяғы эсем көтөрләп кенә, ни булырын алдан иҫкәртеп тороуҙы һанамағанда! Шулай ҙа докторлыҡҡа уҡырға инеп, аҡ халат кейәсәкмен мин...

...Әй, нимә һөйләй инем әле? Ә-ә, теге апайым алып ҡайтырға өгөтләгәйне. Бер аҙна булырға ризалаштым. "Кәпәс"те онотторға түгел инде, әсәйемдең һүҙен йыҡҡым килмәгәнгә генә. Йомала, йәгни бөгөн, уның менән бергә китәм дә, икенсе йомала ҡайтарырға килештеләр. Быныһы оҡшаны - яңғыҙымды ғына ҡайтаралар. Тегендә апайым автобусҡа ултырта, бында әсәйем вокзалда ҡаршы ала. Ҙур бит инде мин! Ун йәш! Ә автобуста яңғыҙым түгел генә йөрөйәсәкмен! Исмаһам, апайымдың аһ-зарынан, беҙҙе йәлләүенән, атайымды һүгеп, туҡтауһыҙ мыжыуынан ҡотолормон...

Бер аҙна йылдай тойолдо. Район үҙәге булһа ла, торған ерҙәре ауыл һымаҡ ҡына, ҡатлы йорттары ла юҡ, бер-икәү бөтәһе. Уныһы ла мәктәптәре икән. Көнө-төнө апайымдың ҡыҙы, йәгни минең менән йәштәш Рәзилә менән булдыҡ. Уныһы ла, әсәһе кеүек, мыжыҡ түлке. Белгәне зарланыу: күрше ҡыҙҙары алама, атайҙары холоҡһоҙ, әсәһенең эшендә гел проблемалар, атаһына аҡсаны аҙ түләйҙәр... Былар миңә ят та, ҡыҙыҡ та түгелсе. Ә улар көнө буйы шуны ғына һөйләйҙәр, боҙоҡ патефон шикелле көн дә бер үк нәмә, ялҡытып та бөттө. Беҙҙең өйҙә әсәйем күпме аҡса ала, атайым эштән ваҡытында ҡайтамы-юҡмы, күрше ҡыҙҙарының холҡо нисек - бер кем дә ауыҙ асып һүҙ әйтмәҫ. Хәтәр шәп ул беҙҙең урам ҡыҙҙары! Әй-әй, тороп тор әле! Ҡапыл йөрәгем "өлп" итте... Нимәгә икән? Гел шулайта ул. Берәй нәмәне һиҙһә... Туҡта ниндәй уйымда өлпөлдәне әле? Уйҙарымды кире тағата башлайым. Урам ҡыҙҙарын маҡтағанда түгел, әсәйемдең аҡсаһында ла түгел. Атайым эштән ваҡытында ҡайтамы-юҡмы... Эйе лә баһа, бына йәнә өлп-өлп... Эй-й-й, һиҙә инем бит мин. Әсәйем һиҙмәгәндә лә һиҙә инем атайымдың борғолланғанын. Һуңлаңҡырап ҡайта башланы шул эштән. Хатта ҡай ваҡыт ҡайтмай ҙа ҡалды. "Машина боҙолдо. Машинала йоҡланыҡ. Рейс тоҡтарланды..." - тип һөйләнгәндәре миңә аҡланыу төҫлө тойола ине шул. Тик әсәйем бер нәмә лә һиҙмәй. Әллә һиҙһә лә белгертмәйме?! Юҡ, ул ышанмаһа, нәҙек кенә итеп йолҡҡан ҡаштары дуғаланып өҫкә күтәрелә. Ә атайым барлы-юҡлы хәбәрҙәре менән һуңлап ҡайтыуын төшөндәрә башлаһа, ләммим. Ҡаш дуғаланмай.

- Ҡуйсы! Мин һинең нимәгә оҙаҡлауыңды һорамайым бит. Имен-аман йөрөгәс, булған. Йәһәтерәк йыуын да ашарға ултыр! Аш һыуына, - тип кухняла өлтөрәп ала ла китә. Ялғанды эсемдең кетерләүе менән һиҙеп өйрәнгән миңә ҡыйын. Атайымдың күҙенә ҡарай алмайым. Ныҡ ҡыйын. Яңылыш ҡына ҡарап ебәрһәм дә, ул ҡарашын йәшерә.

- Ну ошо Тамсығөлдөң ҡарашы! Үтә ҡарай! - тип әйткәне лә бар. Шуға атайымдың ялғанлағанын тойған һайын уға ҡарамаҫҡа тырышам. Юҡ шул! Күҙҙәрем мине тыңлашмай, шул ҡара күҙҙәргә төбәлгеһе килеп тик тора. Вапшы ятрамайым алдашыуҙы!

Уй, мең йылға торошло бер аҙна эсендә әсәйемде лә, Марат туғанымды ла үлеп һағындым! Атайымды әйтеп тораһы ла түгел. Уны инде һағынмайым да шикелле. Ул һағыныу түгел. Ул икенсе төрлө тойғоға әйләнде: бер туҡтауһыҙ һулҡылдап тора. Бөтәшмәгән яра кеүек. Онотолмай ҙа, бәләкәсәймәй ҙә. Эсем туп-тулы атайымды юҡһыныу шикелле. Теге юлы әсәй менән ҡосаҡлашып, аҡырышып илағас, кесерәйеп ҡалғандай булғайны. Көндәр үткән һайын йәнә ҙурайҙы, ахыры... Өйҙө һағындым! Башҡаса улайтып оҙаҡҡа бер ергә лә китмәйем! Хут әллә нимә тип алдаштырһалар ҙа бармайым! Ҡайтып ҡына алайым әле!

Ошолай уйлап автобус тәҙрәһенән теклəп киләм. Шоферға апайым мине ҡараштырып ҡайтырға, тегендә әсәйемдең ҡаршы алырға тейешлеген әйтте. Юлға ҡуҙғалғас та көҙгөһөнән бер-ике күҙ ташланы ла, ярай әле уныһы минең барлыҡты онотто. Яратмайым кешеләрҙең миңә ҡарағанын: йәнем көйһә, йә ауыҙ бәлшәйтәм, йә күҙ ҡыҫам. Шунан ҡуялар. Был юлы шофер ағай ярай теңкәгә теймәне, әтеү уға ла ошо фокустарымдан өләш сығыр ине.

Бер ауыл артта ҡалды, икенсеһе, бына өсөнсөһө лә күренде. Әсәйем, ҡустым бергәләп ошонан үткәндә әсәйемдең үлә яҙып ауылды байҡағаны иҫемә төштө. Йәнә йөрәк өлпөлдәне. Нимәгә? Мин дә ауылға төбәлдем. Ҙур ауыл, автобус уны урап үтмәне, ауыл эсенә инеп китеп, автовокзал янына туҡтаны. Төрлө ҡоймалы, йәшелле-күкле ҡыйыҡлы ауыл өйҙәре. Әсәйемдең нимәгә иҫе китеп төбәлде икән?.. Аңламайым... Урамда байтаҡ ҡына кеше күренә. Ике апай эскәмйәлә симешкә сиртә. Бер ағай, атайым кеүек оҙон ғына буйлы, башына кепка кейгән, ат менән китеп бара. Атҡа оҙон арба тағылған. Ағай кеше аяҡтарын арбанан ситкә һалындырып ултырған. Хас та атайым кеүек тәҙ кәүҙәле, киң яурынлы. Йөрәк йәнә өлп: һәй-һәй, атайым да баһа! Мин тәҙрәнән тышҡа сыға яҙып төбәлдем дә, шоферға күҙ ташланым. Шофер юҡ, вокзалға инеп киткән, күрәһең. Мин ваҡ-төйәк кейем, күстәнәс һалынған пакетты тоттом да, тоҡайҙым! Шофер күреп ҡалмаҫ элек, атайым күҙҙән юғалмаҫ элек артынан барырға!

Тәүҙә артыма ҡарамай йүгерҙем. Атҡа байтаҡ ҡына яҡынлағас, нисектер баҙнатһыҙландым да ҡуйҙым. Ысынлап та атайыммы ул? Ни өсөн ул атта? Ғүмерҙә мал тотмаған, ат көтмәгән, шофер атайым шулайтып атта китеп бармаҫ та инде?!.

- На, малҡай! Әйҙә! - Йәйләгән атын ҡыуалаған кешенең ауыҙынан шул һүҙ сыҡҡас, ышандым. Атайым, атайым тауышы!

..."Ярай, һиненсә булһын, тип ауыл өйөнә күстек. Бына тигән фатирҙы ҡалдырҙыҡ!"- тигән һүҙҙәр хәтеремә килә. -Имеш берәүҙең ергә яҡын булғыһы килә". "Әлбиттә! Үҙ өйөңә етәме ни?! - Атайым ҡыуанысын йәшерә алмай.- Рәхәтләнеп ҡысҡыр, әрләш, йырла, һис кем һүҙ әйтмәҫ. Тегендә ҡысҡырып сәскәрһәң дә батареяға һуға башлайҙар!"

Тимәк, атайым ат егеп, ысын ауылда йәшәп ята! Мин шым ғына һаман эйәреп киләм. Уйланып килеп, арбаға төртөләп терт итеп ҡалдым. Ат туҡтаған икән.

Атайым арбанан төштө лә ҡапҡаны барып асты. Шул ыңғайы мине күреп, бер аҙ албырғап торҙо. Унан йәһәт атлап килеп, мине күтәреп алды.

- Ҡыҙым! Тамсығөләм!

- Атай! Атаҡайым!

- Ҡайҙан килеп сыҡтың, ҡыҙым? Кем менән? - Ул сәстәремдән, биттәремдән үпте. - Атайымдың таныҡ еҫе! Бензин ҡатыш тир еҫе! Мин уны йотлоғоп һуланым, әйтерһең, донъяла унан да тәмле еҫ юҡ!

- Бер үҙем!

- Нисек яңғыҙың? - Атайым мине ситкә этәрә биреп, күҙемә тура ҡарай.

Мин өҙә-йолҡа аңлатып бирәм. Атайым беләгендәге сәғәтенә күҙ ташлай.

- Автобусың китте инде хәҙер. - Берауыҡ аптырана. Ни эшләргә белмәй атты ихатаға индереп, башын арҡыры таҡтаға бәйләй. - Һин нит... Бына ошонда, арбала ултырып тор. Мин хәҙер күршеләргә инеп, әсәйеңә шылтыратып сығам. Автобуста һинең булмағанды күреп, аҡылдан шашыр.

Атайым ашығып күршеләрендәге ҙур йортҡа инеп китә. Мин йәшел бесән түшәлгән арбала ултырып ҡалам. Ҡалай ҡыҙыҡ ҡына икән! Йәшел үлән еҫе! Йомшаҡ ҡына үҙе. Ихатаны күҙ алдынан үткәрәм. Бәләкәй генә. Беҙҙеке кеүек яландай түгел. Атайым үҙенең машинаһы менән ишек алдында урап сыға торғайны, бында ул йөк машинаһы һыймайҙыр ҙа әле. Таҙа ғына былай. Бер ҡыйфәлән юҡ, йәшел үлән ҡаплаған. Өй үҙе бәләкәй генә. Уның ҡырына тәпәшәк кенә рәшәткә уратылған, эсендә төрлө төҫтәге сәскәләр. Беҙҙең өйҙә булһа, үәт матур, тиер инем. Бында уларҙы маҡтағы килмәй. Үҫә инде сәскәсең.

(Дауамы бар).

✓ ***Бактиһәң, ошо баланы белем усағына алып барып тапшырам тиһәң, әллә күпме документ йыйыр кәрәк икән. Кәрәк документте алыуы - бер бәлә булһа, уны тапшырыуы икенсе бер бәлә икән.***



КӨЛГӘНГӘ - КӨЛКӨ

# НИМӘ ЕТМӘНЕ ИКӘН БЫЛ АҒАЙҒА!

**Хәлил ағай Һөйөндөковтың бала-сағалар менән булған мәрәкә хәлдәр тураһында яҙған мәҡәләһенән һуң мин дә бала-саға шуҡлыҡтары һәм уларҙың тапҡыр яуаптары тураһында яҙып ебәрергә булдым әле. Әлбиттә, улар күп, күбеһе тормош ығы-зығыһы араһында юғалып ҡала бара. Ә шулай ҙа ҡайһы берәүҙәре һаман да иҫтә. Ошондай ҡыҙыҡ хәлдәрҙең береһе тураһында һөйләп китәйем әле.**

Баланы мәктәпкә алып барам тип арманһыҙ булынды, әй. Улым быйыл 1-се синыфҡа бара. Кейем-сумкаһын әллә ҡасан уҡ алып ҡуйғанбыҙ. Әммә бер әтнәкәһе бар икән был мәктәп эшенең. Бактиһәң, ошо баланы белем усағына алып барып тапшырам тиһәң, әллә күпме документ йыйыр кәрәк икән. Кәрәк документте алыуы - бер бәлә булһа, уны тапшырыуы икенсе бер бәлә икән. Етмәһә, ошо документтәрҙе ҡабул итеүсе апай үҙ эшенә бик етди ҡарай. Минә ҡалһа, хатта ғына ла үтә етди ҡарай. Бына әле мин шул апай алдында ҡыҙарабүртенеп, үҙемде гәйепле кешеләй һиҙеп, башты эйенкерәберәк ултырам. Сөнки тикшереүсе апай бик уҫал. Исмаһам, күңел өсөн бер йылмайһасы. Әле бына ул минә тиширҙәй булып текәлеп ҡарап ултыра. Уның эш ҡаты, баштанаяҡ ҡарап, оҙаҡ ҡына өйрәнә ул мине. Шунан танауын соҡоп ултырған балаға бер килке текәлеп ултыра. Бер аҙ көрһөнә лә, кире минә текәлә был. Аңлауымса, тикшереүсе апай ошондай ысул менән был бала әллә минеке, әллә түгелме икәнен билдәләй. Шунан ауыр тын алып ҡуя. Бәйләнерлек артыҡ сәбәп таба алмағас, ҡыйын булып китәлер инде уға. Бары шунан һуң ғына мин алып килгән ҡағыҙҙарға күҙ һала. Һүҙ ҙә юҡ, тикшереүсе апайға бында тулы хөрриәт, тулы иркенлек һәм тулы ирекләк. Быны ул ин өҫтә яткан ҡағыҙҙы ала һәм уға бары тик күҙ генә йөрөтә. Хатта күҙ ҙә йөрөтмәй, бары тик күҙ генә һала. Һәм... шунда уҡ хата таба бит, әй, рәхмәт төшөкөрө. Бактиһәң, был документтә ҡултамға асыҡ күренмәй икән. Уныһы ҡағыҙҙың бөкләнгән ерөнә тап килгән, кәһәрең. Икенсе документ менән дә шул хәл ҡабатлана. Уға күҙ һалғас, хатта үҙемә "ҡыйын" булып китә. Унда түңәрәк мисәттең бәләкәй генә өлөшө сыкмаған икән дөбаһа. Ә ул мотлаҡ май ҡояшы һымаҡ түп-түңәрәк булырға тейеш икән. Ҡарышҡанға ел ҡаршы, тигәндәй, өсөнсө документ тә яраҡһыҙ булып сыға. Был документкә, кирәһенсә, бер ниндәй ҙә мисәт кәрәкмәй икән. Бары тик шаҡмаҡ штамп булһа, шул етә, тей оҙаҡ йөшәгере тикшереүсе апай. Ә мин, шыр алйот, яртаҡыл, шапылдатып мисәт "һуғып" тик ултырғанмын. Һәм башҡаһы, һәм башҡаһы инде. Быны, ниһайәт, мин алып килгән барлыҡ ҡағыҙҙарҙы ҡарап бөтә ауырымай үлгере апайым. Шунан тағы минә текәлә. Ярай, тей ул, был етешһеҙлектәргә күҙ йомам, малайыңды мәктәпкә алып килерһен. Ҡыуаныстың сиге юҡ, әй. Ауыҙыңа бал да май, мәйтәм, апай. Был донъяла һәйбәт кешеләр күп шул, был донъя ошондай кешеләр менән матур, тип ҡыуанам. Әммә тикшереүсе апай мине күктәргә күтәреп ебәргәндән һуң, ҡапыл ғына кире ергә төшөрә. Дөрөҫөрәге, һендерә һуға.

- Психологтан справка юҡ! Шуны алып кил!

Бер нимә эшләп булмай, башты эйеп кенә сығып китәм. Икенсе көндө үк таң менән малай менән сығып киттек психолог эҙләп. Апаруҡ эҙләп йөрөп, саҡ барып таптыҡ уны. Дөрөҫөрәге, уны тапманыҡ, ә уның бүлмәһен таптыҡ. Оҙон коридорҙың иң осонда икән. Шуныһы ҡыҙыҡ. Кешеләрҙән, психологтың бүлмәһе ҡайҙа икән, тип һораһаң, улары һинә бер психка ҡараған кеүек ҡарай ҙа ҡуя, әй. Бына әле беҙ малай менән психолог бүлмәһе эргәһендә уралабыҙ. Бында кешеләр күп. Кисә таныша башлаған "класташтарҙың" һәр кеме үҙ "бәпкәһе" менән мәж килә. Кеше ыңғайына беҙ ҙә сират алдыҡ. Балаларын етәкләгән атаәсәләр килеп кенә тора. Бары ярты сәғәт самаһы торҙоҡ, ә шул арала апаруҡ кеше йыйылып китте. Сираттағыларҙың үҙара шыбырлашып һөйләшкәндәренән ошо хәл аңлашыла. Бактиһәң, теге тикшереүсе апай психологтан документ алыу хаҡында беҙгә әйтергә бөтөнләйе менән оноткан икән. Ул был турала күршеһенә әллә көләп, әллә көлә яҙып һөйләп торған. Ә күршеһенең һеңлеһе беҙҙең "класташ" икән. Бына шулай.Йүкә телефон шәп эшләй шул. Бөгөн шуға сират күп икән. Кеше ыңғайына мин дә һүҙ ҡыҫтырам. Мәйтәм, алай онотҡас, ул үҙе лә психологҡа күренеп сыҡһа, шәп булыр ине. Тыйнаҡ ҡына көләшеп алған булабыҙ.

Бына бер мәл психолог беҙҙе икешәрләп ҡабул итә башланы. Сиратты тиҙерәк бөтөрөү маҡсатында инде. Икәү икәү инде, сират һиҙелерлек кәмене. Ниһайәт, психолог кабинетына инеү бәхете минә лә тәтене. Мин малайҙы, ә "класташ" ҡатын үҙенең ҡыҙын етәкләп индек. Психолог беҙҙең һаулыҡты баш ҡағып ҡына ҡабул итте лә һүҙҙе ҡыҫҡа тотто.

- Ултырығыҙ. Икегеҙ ҙә анау яткан өҫтәлдән ҡағыҙ алығыҙ ҙа минә ағайҙы (ҡыҙ балаға күрһәтә) һәм апайҙы (минең малайға күрһәтә) тиҙ генә эшләп бирегеҙ.

Эшһеҙ йонсоған балалар эшкә ихлас тотондо. Ҡыҙ бала ағайҙы тулыһынса эшләй башланы, ә минең малай, нишләптер, апайҙың башын ғына эшләргә ҡарар итте. Күҙ һалып торам, ҡыҙ бала апаруҡ оҡшатып эшләй. Тәүҙә ағайҙың башы, ике ҡулы, кәүҙәһе, ике аяғы барлыҡҡа килде. Шунан башына апаруҡ таушала төшкән кепка кейеп алған булды. Күлдәгенең бер яғы бер аҙ оҙонораҡ, икенсе яғы әҙ генә ҡыҫҡараҡ килеп сыҡты. Аяҡтар менән дә шул уҡ хәл. Улары апаруҡ салышыраҡ булды ла ҡуйҙы. Таҡмаҡта йырлағанса, "ике аяғы тигеҙ булһа, бейер ине оҫтараҡ". Ә былай, нисауа. Беренсе синыф балаһына буйтым бара. Ә минең малайҙың футбол тубына оҡшап торған апай башы хатта ғына ла "матур". Уның күҙҙәре ҙур ғына, ҡаштары ҡыйғас ҡына, танауҙары уймаҡтай ғына, сәс толомдары бөҙрә генә, ирендәре бүлтәйеп кенә тора. Ҡыҫҡаһы, ҡарар күҙгә нисауа ғына апай килеп сыҡты. Психолог нимә тип әйтер инде. Ә минең нишләптер көлкө килә.

Психолог һүрәттәргә бер генә күҙ һирпте лә ағай һүрәтенә төртөп ошолай тине.

- Ағайға нимә етмәй?

Күҙҙәрен селт-селт йомоп алды ла ҡыҙ бала һүрәткә текәлде. Уҙ балаһы өсөн борсолған әсәй ҙә текәлде был һүрәткә. Аллам һаҡлаһын, балама кәрәкле документ бирмәй ҡуймаһын был психолог тигәндәре, тип борсола ул. Ҡыҙыҡ күреп, ситтән генә мин дә күҙ һалып торам был һүрәткә. Минә ҡалһа, унда бөтәһе лә бар. Баш бар, сәс бар, танау бар, ҡолаҡтар бар, ике күҙ бар, кәүҙә бар, салыш аяҡтар бар, ҡул бар... Ҡыҫҡаһы, бөтәһе лә бар. Ҡыҙ-бала һәм уның әсәһе, аптырап, психологҡа ҡарай. Ә уға ҡыҙыҡ булып китте, буғай. Ул мәкерле йылмайып, һаман нимәләр таптыра.

- Йә-йә, нимә етмәй был ағайға!

Минең малай эшләгән апай бөтөнләйе менән онотолдо. Хәҙер ағай һүрәтен уртаға һалып, дүртәүләп ентекләп ҡарайбыҙ. Тамам аптыралды бит, әй. Баш-зиһен етмәй. Ағайҙы ентекләп ҡарайбыҙ, ә шулай ҙа уға нимәләр етмәгәнен һис кенә лә төшөнә алмайбыҙ. Ә психолог тауышына бер аҙ ҡатылыҡ өҫтәп, һаман үҙенекен тылҡый.

- Һуңғы тапҡыр һорайым: нимә етмәй был ағайға!

Тағы текәләбеҙ "етлекмәй тыуған" ағайға. Мин аптырап, өмөтлә күҙҙәр менән психологҡа ҡарап-ҡарап алам. Ярҙам итеп ебәр әле, йәнәһе. Һин дә ир кеше, мин дә ир кеше, минең баһаны төшөрмә, йәнәһе. Юҡ, эт талағыры нәмә, яҡын барырлыҡ кеше түгел икән. Ярҙам итергә уйында ла юҡ. Һүрәткә башы менән генә ымлай. Йәнәһе лә, үҙең уйла, башыңды эшләт. Әммә минең зиһен-зирәк сәй-шәкәрлек кенә, күрәһең. Баш етмәй бит барыбер. Көсһөҙлөктән хатта илағылар килеп китә.

Шул мәл минең малай ихлас көләп ебәрә. Бөтәбеҙ ҙә еңел тын алып ҡуйбыҙ. Маладис, улым, тип әйтәм эстән генә, ҡотҡарҙың барыбыҙҙы ла, исмаһам, һинең башың етте. Ғорурлыҡтан хатта кәүҙә тураяп төшә. Малайҙы әйтәм, минә оҡшап, аҡыллы ғына булмаҡсы ул. Бына бит, ағайға нимә етмәгәнен бары ул ғына төшөнгән. Ҙур өмөт менән барыбыҙ ҙа уға текәләбеҙ.

- Ағайҙың бит ... юҡ!

Бындай "тапҡыр" яуаптан асыҡ ауыҙҙарҙы ябырға онотоп, беҙ барыбыҙ ҙа бер мәлгә шаңҡып ҡалабыҙ. Ней көләп булмай, ней маҡтап булмай, ней әрләп булмай, ней берҙе еңелсә генә электереп булмай. Яуап балалар теле менән күпкә йомшаҡ итеп әйтелһә лә, ул бик көслө булды бит, әй. Шул арала... ҡыҙ баланың ҡулынан әсәһе ҡәләмде тартып алып өлгөрә. Уныһы ихласлап ағайға был "өҫтәмәне" индереү эшенә тотонған икән. Ә минең нишләптер көлкө килә. Юҡ нәмәне таптырып торған психологҡа шәп булды, үсем ҙә, тип уйлайым мин. Әммә психолог үҙен тиҙ ҡулға ала, минең справкаға үҙ ҡултамғаһын арыбире сыймаҡлай һәм бармағы менән ишек яғына күрһәтә.

- Йүнһеҙ малайыңды ал да тай минең кабинеттан!

Йүнһеҙ малай менән кемуҙарҙан йүгереп тигәндәй сығып киттек уның бүлмәһенән.

Аҙаҡ теге тикшереүсе апай әйтә. Ҡултамғанды нинә улай батырып ҡуйҙың, улай бит ярамай, был бит документ, тей. Аптырағас, ҡабат улайтмаҫмын, тинем инде.

Ә шулай ҙа был ябай һорауға бөгөн дә яуап юҡ әле. Ысынлап та, нимә етмәне икән был ағайға? Баш бар, ҡул бар, аяҡ бар, кәүҙә бар, ҡыҫҡаһы, бөтәһе лә бар. Ә психолог бит нимәләр таптырҙы. Быны шуны һаман белгән юҡ әле.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

---

*ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ*

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

## Уй һәм эш

Беҙҙең заманда аҙна һайын, дүшәмбе көн эштән һуң политуҡыу үтә торғайны. Теләйһеңме быны, әллә юҡмы, коммунист икәнһең, тимәк, барырға, дәрестә ҡатнашырға, ул ғына ла түгел, В.И. Лениндың 44 томдан торған китаптарын конспектларға бурыслыһың. Шул политуҡыуҙарҙы ауылда юғары ғына вазифа биләгән түрә үткәрә. Ул төп темаһы аңлатып бөтөрә лә, вәғәз тәфсирләгән мулла ише, әхлаҡ-тәртип тураһында һөйләргә, аҡыл өйрәтергә керешеп китә. Ялҡытҡыс дәрес ҡасан бөтөр инде, тип оҙон иҫнәп ултыраһың. Йыбаныусы бер мин генә түгел. Сөнки тәртип тураһында аҡыл һатҡан пропагандист үҙе үк әҙәпһеҙ, йөрөмтәл кеше ине. Ауыл бәләкәй бит, уның килешһеҙ холҡон һәммәһе лә белә, тик өндәшмәй генә, сөнки пропагандистың яҡын әшнәһе юғарыла, райкомда ултыра.

Хәҙер телевизор аша сәнғәт өлкәһенә ҡағылышлы булған бер миллионер сәғәттәр буйы илһөйәрлек хаҡында әңгәмә ҡороп маташа. Ҡиммәтле эфир ваҡытын биләй, әммә уны, исмаһам, бер кеше булһа ла ҡарай, тыңлаймы икән? Сөнки илде яратырға, ҡәҙерләргә саҡырған кешенең көндәлек килеме генә лә миллион ярым тирәһе. Унан ҡалһа, әллә күпме фатиры, өйө, ер участкалары, тиҫтәнән ашыу сит ил машиналары теҙелгән автопаркы бар. Теге оратор илде һөйөргә саҡырмай, бары үҙенең ошо йыйған байлығын һаҡлап ҡалып, ҡулайлы шарттарҙа йәшәргә генә ынтыла шикелле. Нинә, байманлыҡта ирәүәнләү, балда-майҙа йөҙөү рәхәт тә!

Уйлаған уйың, ҡылған эштәрең менән тап килгәндә, көндәлек ҡапҡан аҙығың тыңлаусыныҡынан тәмлерәк, татлыраҡ булмаған осраҡта ғына әйткән һүҙең үтемле булалыр ул!

## Күстәнәс

Күгәрсен ояһылай кескәй генә өкәлтәгендә янғыҙы көн иткән Вазифа ҡарсыҡ бик йыш ҡына хәл белергә тип беҙгә инеп сыға торғайны. Ғәҙәттә, йоманан һуң. Апайым һәм мин уның килә ятҡаны әллә ҡайҙан күреп ҡалып, ҡаршы йүгереп сығабыҙ ҙа, рәхсәт-маҙар һорауҙы ла кәрәк һанамай, ҡунаҡтың кеҙәкәй кеҫәләренә тығылабыҙ, ә унда беҙгә тип тәғәйенләнгән күстәнәс була - бер ике бөртөк кәнфит, өрөк, перәник, юҡ тиғәндә ҡуш ус самаһы ҡурмас. Ҡунағыбыҙ ике ҡулын ике яҡҡа йәйеп, шул килтергәндәрен алдыра ла эс яҡҡа ҡарай атлай. Ә беҙ өй нигеҙенә һағып, әҙләп кенә ҡабып тәмлекәстәрҙе тәмләп кинәнәбеҙ, рәхәтләнәбеҙ. Өләсәйем унайһыҙланғандай итеп әйтә:

- Китсе, ҡорлашбикә, балаларҙы ул тиклем дә яман өйрәтмәһәнсе, өйөндәге тәм-томдо тотошлайы менән беҙгә ташыйһың әллә?

- Юҡ, Ҡыҙбикә, кеше кешегә күстәнәсһеҙ инергә тейеш түгел. Ошо балаларҙың япраҡ дәүмәле устарына нимә лә булһа һалыуым йөрәгемде ҡыуаныс менән тултыра.

Вазифа инәй ҡайта-ҡайта хәл белеүҙе дауам итте. Үҫә барған һайын мөгжизәле, йомарт кеҫәгә тығылыу ғәҙәтен дә ҡуйҙыҡ, онотток. Мәгәр инәйебеҙ һаман да ҡоро ҡул килмәй. Инеү менән урындыҡ ситенә һағып, аят бағышларға керешеп китә лә иң аҙаҡтан йыйырсыҡтар сыбарлаған биттәрен һыпырып, былай ти:

- Быны һеҙгә бөгөн, аҙна байрамында изге сүрәнең бер аятын килтерҙем әле. Күстәнәс итеп...

Бала саҡта аңыма һеңгән йоланы бөгөн мин дә еренә еткереп үтәргә тырышам. Барған еремә ҡағылышлы һөйөнсө, яҡшы һүҙ, яҡты йөҙ алып килем үҙем менән. Ошонан да ҙурыраҡ күстәнәс юҡтыр...

✓ *Wi-Fi нисек тәьҫир итә - был әле өйрәнелмәгән, быныӊ өсөн ҙур һынауҙар үткәреү кәрәк. Шулай ҙа ғалимдар хәҙерҙән үк йоҡларға ятҡанда уны һүндерергә һәм кеҫә телефондарын карауаттан 1,5 метр йыраҡлыкта торорға кәӊәш итә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КӘЙЕФ ӨСӨН ТӘМЛЕ СӘЙ

■ Ғалимдар Wi-Fi сәләмәтлектеӊ ҡаҡшауына килтереүе ихтимал, тип белдерә. Дания ғалимдары балаларҙа һәм бүлмә гөлдәрендә һынауҙар үткәргән. Бер төркөм уҡыусылар Wi-Fi селтәренә тоташҡан телефондарын яҫтыҡ аҫтына һалып йоҡлаған. Беренсе төндән үк балалар баш ауыртыуына, игтибар туплауы ауыр булыуына зарланған. Тәжрибәнеӊ икенсе өлөшөндә уныӊ бүлмә гөлдәренә тәьҫире тикшерелгән. 6 гөлдө 12 көнгә Wi-Fi сығанаҡлы бүлмәгә бикләгәндәр, тағы 6 гөл ябай бүлмәгә урынлаштырылған. Эксперимент-ҡа тәғәйенләнгән ваҡыт үтеүгә беренсе бүлмәләге гөлдәр һулыған, икенсе бүлмәләге гөлдәр сәскә атыуын дауам иткән. Wi-Fi нисек тәьҫир итә - был әле өйрәнелмәгән, быныӊ өсөн ҙур һынауҙар үткәреү кәрәк буласаҡ. Шулай ҙа ғалимдар хәҙерҙән үк йоҡларға ятҡанда уны һүндерергә һәм кеҫә телефондарын карауаттан 1,5 метр йыраҡлыкта торорға кәӊәш итә.

■ Италия тикшеренеүсеһе Диего Меструпиньери үткәргән һынауҙар барышында асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙ тәү күреүҙә үк ир-егеттеӊ йөҙөнә ҡарап, уныӊ ниндәй атай булыуын тойомлай ала икән. Был һәләт уға тәбиғәттән һалынған. Бер төркөм ир-егеттәргә ололарҙың һәм балаларҙың фотоларын күрһәтеп, үҙҙәренә оҡшаған фотоларҙы билдәләргә ҡушҡандар. Ҡатын-ҡыҙҙар төркөмө иһә был экспериментта ҡатнашыусы ир-егеттәрҙеӊ фотоларын ҡарап, уларҙыӊ ҡайһылары менән ғаилә ҡора алырҙарын билдәләгән. Шуныһы ҡыҙыҡлы, ҡатын-ҡыҙҙар бәләкәй балаларҙыӊ фотоларын оҡшатҡан ир-егеттәрҙе һайлаған.

■ Иртән баш ауыртыуы менән уянаһығыҙ икән, организмға D витамины етешмәүе ихтимал. Был витамин ҡытлығы мәлендә сәстәр ҡойола, мускулдар көсһөҙләнә. Быға күҙ йомоп ҡарарға ярамай, йәйләп үҫешә барған дефицит рахитҡа һәм һөйәк аномалияларына килтереүе бар. Бигерәк тә көн яҡтыһы ҡыҫҡарған мәлдә был актуаль. Билдәле булыуынса, D витамины ҡояш нурҙары тәьҫирендә барлыҡҡа килә. Был хәлдән нисек ҡотолорға һуӊ? Сағ һауала йөйәү йөрөргә. Шулай уҡ тукланыу рационына бауыр, майлы балыҡ, йомортҡа һарыһы индерергә.

■ Татлы ризыҡ көсәп китһәгеҙ, нервыларығыҙҙы тынысландырыу яйын күрегеҙ. Сөнки нервы көсөргәнеше ваҡытында организм шәкәрҙе тотоноп бөтә һала ла, янынан яңы порциялар талап итеп тик тора. Тәмле генә итеп сәй эсеп алғандан һуӊ кәйеф күтәрелеп китеүе ошоноӊ менән бәйле инде. Ә бына аҙыҡ тоҙһоҙ тойола икән, организмда ниндәйҙер инфекция сығанағы бар. Иммунитет түбәнәйгәндә лә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандыӊ әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйырақ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һөҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйығайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимәк, организмдыӊ хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ

**Икмәк ғүмеребеҙҙеӊ айырып алғыһыҙ бер өлөшө ул. Ҡайһы саҡта уныӊ барлығын да шәйләмәйбеҙ. Был хаҡта танылған биолог К.А Тимирязев: "Шул тиклем дә ғәҙәти булғанға, ҡайһы бер һоҡланғыс фактарға игтибар итмәүебеҙ күптән билдәле. Бойҙай ононан тәмле итеп бешерелгән икмәктеӊ кеше аҡылы уйлап сығарған бөйөк әйберҙәрҙеӊ береһе булыуын ҡайһыбыҙ иҫенә төшөрә икән", тип яҙғайны. Иӊ мөһиме - икмәк Аллаһы Тәғәләнеӊ кешегә биргән бөйөк бүләге.**



# ИКМӘКТӘН ОЛО БУЛМА!

## Уныӊ тарихы - кешелек тарихы

### Беренсе икмәк

Икмәк - он менән һыу ярҙамында әҙерләнгән ҡамырҙан бешерелгән ризыҡ, йәғни ҡоймаҡты, табикмәкте, булкаларҙы һәм хатта бойҙай ярмаһынан бешерелгән бутҡаны ла беҙ икмәк тип атайбыҙ. Икмәкте кеше беҙҙеӊ эраға тиклем ете меӊ йыл элек уйлап тапҡан. Уға тиклем кешеләр уны башаҡлы культураларҙан, йәғни ярма, арпа, арыш һәм бойҙайҙан тыш, сәтләүек, өрөк һәм икмәк ағасы емештәренән дә бешерергә өйрәнгән. Ләкин улар араһынан фәҡәт бойҙай орлоғонан ғына он тартып, икмәк бешереү киӊ тарала.

Тут үҫемлектәре ғаиләһенә ҡараған Artocarpus тоҡомло ағастарҙа икмәк үҫә тип әйтергә мөмкин. Дөрөҫөрәге был ағас емештәренән икмәк бешерәләр. Ағастыӊ грейпфрут ҙурлығындағы оҙонса емеше - бик күп тропик илдәрҙә бер нимәгә алыштырғыһыҙ ризыҡ һанала. Крахмалға бай әлеге емеште ашар алдынан тәүҙә бешереп, йә ҡыҙҙырып алалар. Икмәк ағасының картуф тәменә оҡшаш емеше иӊ ҡиммәтле ризыҡ булып тора. Бер ағас ҡына ла миҙгел эсендә 800-ҙән ашыу емеш бирә ала.

Ата-бабаларыбыҙҙыӊ сей орлоҡ ашап йәшәгән саҡтары ла булған. Аҙаҡ бороңғо кешеләр дымлы тупраҡҡа һибелгән орлоҡтоӊ икеләтә уыш килтереүен һәм сәсеүҙән һуӊ ямғыр ҙа яуһа, иген һабаҡтарыныӊ тағы ла бейек булып үҫеүен абайлап ҡалған. Шулай итеп, иген башаҡтары күренә башлаған баҫыуҙы улар күҙ ҡараһы кеүек һаҡлай башлай. Игендеӊ яңы өлгөрөп килгән йомшаҡ орлоҡтарын ашарға мөмкин, ә тамам өлгөрөп, ҡатҡас уларҙы таш менән онтап, һыуға болғатып, бутҡа итеп ашай башлағандар, аҙағыраҡ инде был массаны сейләй түгел, ә бешереп ашарға өйрәнгәндәр. Икмәк урынына һыуҙа бешкән дөгө ярмаһын ашау йолаһы Ҡытай, Корея, Япон, Вьетнам, Һинд һәм Азияның башҡа халыҡтарында әле лә бар. Былау ҙа үҙенсәлекле "икмәк" ашы. Былауҙың йөҙҙән ашыу рецебы бар.

Тора-бара кешеләр киле уйлап таба һәм орлоҡто киләлә төйөп, он әҙерләй. Уға һыу ҡушып болғатҡас, ҡамыр һағыҙ һымағыраҡ килеп сығыу сәбәпле, ҡай бер халыҡтар уны ҡояшта киптереп алыр була. Мәҫәлән, Һиндостандың төньяғында әле булһа шыйыҡ ҡамырҙы сепрәккә ҡойоп, асыҡ һауала киптереп ашайҙар.

Ҡамырҙы һыуҙа ла бешергәндәр. Бөгөн дә ит һәм йәшелсәләрҙе һыуҙа бешерелгән ҡамыр менән ашау бик күп халыҡтарҙың милли ризығы. Мәҫәлән, лагман, нарын, галушки, бишбармаҡ, манты һәм башҡалар. Хәйер, һыуҙа бешерелгән ҡамыр аҙыҡтарҙан туҡмас, макарон һәм спагеттиҙың килеп сығыу тарихы бик бороңғо. Туҡмасты Ҡытайҙа һәм Бороңғо Египетта әүәлдән ашағандар. Ул Египеттағы бороңғо ҡәберлектәрҙә әле лә табыла, туҡмасты йәнәһе, үлгән кеше теге донъяға сәйәхәте ваҡытында ашарға тейеш булған.

Ә макарондыӊ итальяндарҙың милли аҙығына әүерелеүендә гәрәптәр ҙур роль уйнай, сөнки урта быуаттарҙа макаронды Сицилияға беренсе булып гәрәптәр алып килгән. Ғәрәптәрҙеӊ ҡамыр "сымдар"ҙы ҡояшта киптереүе арҡаһында макарон, тәмен боҙмай, оҙаҡ ваҡыт һаҡлана.

Тәүтормош замандарҙа ҡыҙыу таш өҫтөндә йә көршәктәрҙә ҡамырҙан ҡабартма бешереп ашағандар. Уныӊ өсөн ҡамырҙы көршәктеӊ ҡыҙған стенаһына йәбештергәндәр һәм бешеү менән ул ҡубып төшөп торған.

ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!

# СӘК-СӘКТЕ УӉДЫРЫУ...

## "сәк кенә" хикмәтле

**Сәк-сәк бешерергә бик оҙаҡ өйрәндем. Иӊ тәүҙә уны үҙем кейәүгә сығыр алдынан бешергәйнем. "Беренсе ҡоймаҡ төйөрлө була" тиһәләр ҙә, минеӊ сәк-сәгем тәүҙән үк уңды. Әлбиттә, эргәмдә өйрәтеп тороусылар, ярҙам итеүселәр бар ине шул. Шул тиклем күп итеп бешерҙек уны: туй табынына ғына түгел, ҡунаҡтарға, кейәү яғынан килгән ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарға күстәнәс итеп өләшергә лә етте. Туйыбыҙҙыӊ бер ғорурлығына әйләнгәйне ул ризыҡ. "Киленебеҙ сәк-сәкте шәп бешерә" тигән дан таралды хатта. Ул хәбәрҙе ысынбарлыҡҡа әйләндереү, маҡтауҙарҙы аҡлау өсөн аҙаҡ байтаҡ тырышырға тура килде. Ярай әле, уңмаған сәк-сәктәремде ҡайны-бейемдәр күрмәне.**

Шулай итеп, сәк-сәкте уңдырып бешереүҙеӊ хикмәттәрен өйрәтәм. Алдан уҡ шуны иҫкәртәм: сәк-сәкте лә, бауырһаҡты ла, йыуасаны ла уңдырып бешереүҙеӊ төп хикмәте - ҡамырҙың йомшаҡ итеп баҫылыуында. Шул йомшаҡ ҡамыр менән эш итергә өйрәнһәӊ, барыһы ла шәп буласаҡ.

Иӊ тәүҙә "Олейна" үҫемлек майын, һары майҙы, кулинар майҙы бергә ҡушып ирет. Ул иреп, ҡайнап сыға башлағас, алып, һыуытырға ҡуй. Майын һыуына торғансы, ҡамырыңды әҙерлә. Быныӊ өсөн юғары сортлы иӊ яҡшы он кәрәк. Йомортҡалар фабрика тауыҡтарыныҡы түгел, ә ауыл тауыҡтарыныҡы булһын.

4-5 йомортҡаны һытып, нығ итеп туҡы, он һалып баҫ. Әйткәнемсә, ҡамырың бик йомшаҡ, ҡулдарға йәбешеп торорлоҡ булһын. Уны "буйһондороу", йомарлау өсөн аҙыраҡ онла. Шунан өлөштәргә бүлеп, бер өлөшөн йәймә итеп йәй (ҡамырҙы нәҙек кенә бауҙай итеп буйға һуҙырға ла мөмкин, йәйһәӊ иһә, уңайлыраҡ та, тиҙерәк тә). Туҡмас йәймәһе һымаҡ уҡ йоҡа булмаһын. 4 мм тирәһе булһа ярай. Шунан уны йоморо, әйләнеп тороусы махсус бысаҡ менән нәҙек кенә буй таҫмаларға, шунан арҡырыға бүлеп сыҡ.

Хәҙер инде баяғы һыуынған майыңды утҡа ултырт та, шунда уҡ уға сәк-сәк итеп киҫелгән ҡамырыңды һал. Ти-

✓ Эре итеп тартылған ондан бешерелгән 500 грамм икмәктә кеше организмы өсөн көнөнә кәрәкле 70 процент тимер, 60 процент фосфор, В төркөмөндәге витаминдар, үсемлек күҙәнәге һәм аҙыҡ туҡымалары була.



Ҡабартма бешереүҙең был алымы Ҡаҙағстанда, Үзбәкстанда, Әзербайжанда һәм Төркиәлә әле лә бар. Көнсығыш илдәрендә икмәкте борондан уйлап табылған тандыр-ҡаҙандарҙа бешереү бөгөн дә онотолмаған.

## Мөғжизә бит

Сөсө ҡамырҙан бойҙай икмәге бешереү иһә бик борондан килә. Ә бөгөнгө ҡабарып торған йомшаҡ булка, батон һәм ҡабартмалар иһә икмәк тарихының сираттағы этабынан, йәғни әсе ҡамырҙы уйлап табыуҙан башлана. Ләкин кемдең беренсе булып әсе ҡамыр әҙерләүе тураһында мәғлүмәт юҡ. Көршәккә ҡамыр һалып ҡуйыуын онотҡан боронғо кеше, оҙаҡ ятыуҙан ҡамырының бейек булып ҡабарып сығып, күбекләнеп, хатта "тын алып" ятыуын күреп, тәүҙә, моғайын, бик аптырағандыр, сөнки ҡамырға игендең әсей башлаған һеркәләре йә бойҙай ҡабығы эләккәнгә уның шулай ҡабарып сығыуын ул замандарҙа, әлбиттә, бер кем дә күҙ алдына килтермәгән. Боронғо ата-бабаларыбыҙ баҫҡан ҡамырының ни өсөн өрөлөп күбекләнеүен, бейек булып ҡабарыуын һәм тере йән эйәһе кеүек тын алыуын һис аңлай алмағандар. Улар "йән ингән" ҡамырҙы илаһилаштырып, хатта уға табына башлаған. Беҙҙең өсөн был ғәжәйеп күренеште аңлау ҡатмарлы түгел. Сүпрә бәшмәктәре ҡамырҙағы шәкәрҙе йотоп бөтһә, артынса спирт һәм углекислый газ барлыҡҡа килә һәм был газ күбексәләр эсенә тулғанлыҡтан, ҡамыр көпшәкләнеп ҡабара. Ҡамыр уңһа, утта баяғы күбектәр кибә һәм аҙ ғына әскелтем тәмле, сәйнәүгә йәтеш, йомшаҡ ҡабартма барлыҡҡа килә. Әлбиттә, сүпрә һәм әсе ҡамыр уйлап табыу ҙа ғәжәйеп асыштарҙың береһе ул. Сүпрә һалып ҡамыр әсетеү Боронғо Египетта башланған, тип иҫәпләнә. Египеттарҙы боронғо замандарҙа "икмәк ашаусылар" тип йөрөткәндәр. Ни өсөн тигәндә, он итеп тартыуы еңел булған юғары уңыш биреүсе бойҙайҙың йомшаҡ сортын беренсе булып Египетта үҫтерәләр. Шулай уҡ тирмәндәрҙе лә унда уйлап тапҡандар һәм әсе ҡамыр өсөн ваҡ он тартыуҙы ла тап Египетта эшләй башлағандар. Икмәк һалыу сәнғәте египеттарҙан яйлап грекатарға күскән, ә уларҙан римляндар отоп алған һәм һуңыраҡ бөтөн Европа ҡитғаһына таралған.

## Һандар, факттар

Кеше үҙ ғүмерендә дөйөм алғанда 15 тонна икмәк ашай. Икмәк һалыу өсөн ҡамырҙы тәүҙә төрлө ысулдар менән әсетер булғандар, хатта һауанан алынған бактерияларҙы сүпрә сифатында ҡулланғандар. Унын өсөн ҡамырҙы бер аҙға асыҡ һауала ултыртҡандар. Шулай ҙа икмәк һалған саҡта ҡамырҙан бер киҫәк алып ҡалып, уны икенсе тапҡыр икмәк һалғанда әсетке итеп файҙаланыу ысулы киң тарала. Бөгөн иһә ҡамырҙы ҡабартып сығарыуҙың башҡа бик күп ысулдары билдәле, мәҫәлән, ҡомалаҡ әсеткеһе, әсе һөт аҙыҡтарынан сүпрә (кефир, эремсек), углекислый газлы минераль һыу һәм ҡамырҙы ҡабартҡыс химик матдәләр һ.б. Ләкин сүпрә менән ҡамыр әсетеп, ҡабарып бешкән икмәк һалыу әлегә тиклем иң мөһим ысулдарҙың береһе булып тора.

Сүпрә - ул микроскопик бер күҙәнәкле бәшмәктәрҙән тора. Улар тәбиғәттә яҡшы һаҡланған, бигерәк тә шәкәрле матдәләр булған еләк-емештәрҙә һәм һөт аҙыҡтарында киң таралған. Сүпрә юғары сифатлы аҡһымдарға, углеводҡа һәм В төркөмөндәге витаминдарға бай.

## Икмәктең әһәмиәте

Икмәк бешереүсенең хеҙмәтенә әүәлдән хөрмәт ҙур булған. Ул иң мөһим эштәрҙең береһе һанала һәм дәүләт был эште контролдә тота. Ни өсөн тигәндә, кеше өсөн икмәк - иң кәрәкле аҙыҡ. Икмәк башҡа аҙыҡтарҙан туҡлыҡлы булыуы менән айырыла, сөнки ул кеше организмы өсөн кәрәкле аҡһым, крахмал, майҙар, витаминдар һәм башҡа минераль матдәләргә бай. Эре итеп тартылған ондан бешерелгән 500 грамм икмәктә кеше организмы өсөн көнөнә кәрәкле 70 процент тимер, 60 процент фосфор, В төркөмөндәге витаминдар, үсемлек күҙәнәге һәм аҙыҡ туҡымалары була.

## Иң ябай аҙыҡ

Аҙыҡ бешереү буйынса бик күп китаптарҙың авторы В.Похлебкин "Кулинария әлифбаһы икмәктән башлана", ти һәм ниндәй ҙә булһа башҡа ризыҡ бешереүгә ҡарағанда, икмәк һалыу иң ябай эш тип раҫлай. Икмәк туҡлыҡлылығы менән иң ҡиммәтле аҙыҡ булыуҙан тыш, уны бешереүе ябай булараҡ та кеше өсөн әһәмиәтле. Бөгөнгө заман кешеләре тиҙ генә бешерелә торған аҙыҡтар менән туҡланырға ярата. Беҙ супермаркеттарҙағы арлы-бирле генә әҙерләнгән ризыҡтарҙы ашай торғас, ысын аҙыҡтың хуш еҫле тәмен тоймайбыҙ ҙа. Күптәр хатта икмәк бешереү оҙайлы, мәшәҡәтле эш тип тә уйлайҙыр әле. Икмәкте борондан уҡ бешергәндәрен бөгөн белеүсе лә юҡтыр. Ә бит уны ҡырға сәйәхәткә сыҡҡан саҡта усаҡта ла бешереп була. Өй шарттарында иһә, йәғни ауылда мейескә, ҡалала духовкаға икмәк һалыу уғата еңел эш.

## Үҙең һалған икмәк

Ғаиләң өсөн өйҙә икмәк бешереү йолаһы, Көнсығыш илдәрендә һәм Азия ҡитғаһы халыҡтарында әле лә һаҡлана. Шуға ла Көнсығышта әлегә тиклем халыҡтың көн һайын тигәндәй яңы ғына бешеп сыҡҡан, күпереп торған хуш еҫле икмәк ашауы осраҡлы түгел. Юҡҡамы ни, Урта Азиянан башлап, Төньяҡ Африкаға тиклемге ерҙе башаҡлыларҙың, йәғни бойҙай, арыш, арпа, тары һәм башҡа үсемлектәрҙең тыуған иле тип атайҙар. Икмәк бешереү өсөн махсус һауытты ла тап ошо тарафтарҙа уйлап тапҡандар. Мосолмандарҙа икмәк һалыу рецебын Бәйғәмбәребеҙ Әҙәм Ябраил фәрештәһенән алған, тигән риүәйәт тә бар. Шуға ла икмәкте Көнсығыш халыҡтары айырыуса ҡәҙерләй һәм уның бик күп төрҙәрен бешерә. Бигерәк тә уны төрлө итеп Төркиәлә бешерәләр. Был илде "донъяның икмәк һауыты" тип тә хаҡлы атайҙар. Ә төрөктәрҙең аш-һыуы хәҙер француз һәм ҡытай кухняһы менән бер ҡатар, донъяла иң яҡшыларҙан һанала. Ғәҙәти аҡ икмәктән тыш, төрөктәр көлсәләр, өҫтөнә кунжут еме һибелгән "балдаҡтар", ҙур ҡабартмалар һәм ҡағыҙ кеүек йоҡа ғына итеп йәйгән ҡамырҙан өшәләрҙе айырыуса тәмле бешерә һәм халыҡ уларҙың барыһын да яратып ашай.

...Икмәк - иң оло ризыҡ. Кеше бер ваҡытта ла унан айырылмаған, икмәк әҙәм балаһын ғүмер буйы оҙата килә. Хатта кешелек тарихы - ул икмәк тарихы тип тә әйтергә мөмкин.



шекле ижауың менән уны бер туҡтауһыҙ болғатып торорға тейешһең. Ҡыҙылыраҡ төҫкә ингәс, ул әҙер була. Әҙер сәк-сәкте һоҫоп алғас, уны һауытҡа түгел, аҡ ҡағыҙ өҫтөнә йәйеп һалып, майын шунда һеңдереү һәйбәтерәк.

Сәк-сәкте бер бүлә бешереп алғас та, май һауытын һыулы тасҡа ултыртып, майҙы һыуыт. Был мотлаҡ шарт. Ҡамырҙы ҡайнап торған майға һалһаң, ул ярылып бешәсәк һәм бар тырышлығың юҡҡа сығасаҡ. Ошо шартты үтәһәң, ҡалғанына, мәҫәлән ҡамырҙы йомшаҡ итеп баҫыу кеүек хикмәттәренә тора-бара өйрәнерһең.

Сәк-сәкте бешереп бөткәс, уны ҙур ғына табаҡҡа һал да, өҫтөнә иретелгән бал, балда иретелгән шәкәр сиробы ҡойоп, бута. Ҡулдарыңды һыулап, сәк-сәкте һауыттарға өйөмләп сыҡ. Шунан һалҡын урынға ҡатырырға ҡуй.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Бәләкәй саҡта ауылыбыҙҙағы бер әбей гел генә беҙгә, бала-сағаларға, күстәнәс итеп сәк-сәк бирә торғайны. "Бәләкәй генә йыуасаны сәк кенә итеп ҡабып ебәрегеҙ әле: уның ауыҙығыҙҙа иреп, ҡорһағығыҙға барып төшкәнен сәк кенә һиҙеп ҡалырһығыҙ", тигән була торғайны үҙе. Үҙе шулай һөйләнгәнгәме икән, ҡайһы бер ҡыйыуыраҡ балалар уның ишек алдына барыр ҙа: "Инәй, сәк кенә сәк-сәк ҡаптыр әле", - тиер ине. Хәҙер уйлап ҡуям: беҙҙең халыҡ күберәк эре итеп бауырһаҡ, йыуаса бешерә бит инде ул. Ошо ризыҡтарҙы әҙерләгәндә бәләкәй балалар өсөн сәк кенә ҡабырлыҡ тәғәм булараҡ уйлап сығарылманымы икән сәк-сәк?**

**Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Бөйөк "оҫталар" нисек күнеккән?

Марк Твен мәғлүмәтте һаҡлауҙың ҡыҙыҡлы ысулын уйлап тапҡан. Тәүҙә ул үҙенең лекцияларын ҡағыҙҙан ҡарап уҡыған. Һуңынан риториканың беренсе ҡануны - аудитория менән бәйләнеш булдырыу икәнлеген аңлаған. Шул саҡта ул текста төп блоктарҙы һәм төп фекерҙәрҙе айыра башлай, ә төп һүҙҙең беренсе хәрефен... тырнаҡтарына төшөрә. Мәҫәлән, һүҙ хәтер тураһында барһа, тырнаҡҡа Х хәрефен яҙырға кәрәк, әгәр мәктәп тураһында икән - М хәрефен. Бындай ҡараш фекерләүҙе ойошторорға, ә бармаҡтарҙы шпаргалка итергә ярҙам итә. Кире яғы - тыңлаусылар ҡулдарығыҙға ҡарап шаулай башлауы мөмкин. Марк Твен тап шуға зарланған да инде.

Ә Пабло Пикассо шартлы рәүештә "үткәндәр билдәһе" тип аталған ысул менән ҡулланған. Уның махсус бүлмәһе булған, унда ватыҡ фужерҙар, иҫке яулыҡтар, һынған тараҡтар һ.б. әйберҙәр һаҡланған. Ул ҡулына ошо предметтарҙың береһен алып, иғтибарын туплаһа, хәтерендә йөҙҙәр, ваҡиғалар, уйҙар, һөйләшеүҙәр тергеҙелгән.

## Маразм һиҙҙермәй генә килә

- Табиптар ҡартлыҡ еңеләйеүенең (аҡылға еңеләйеү) төрлө формаларын билдәләй, - ти доктор Павел Евдокименко. - Фәнни терминдар телендә табиптар һеҙгә ябай сениль деменцияның Альцгеймер ауырыуынан айырмаһын еңел генә аңлатыр.

Әммә улар ни өсөн был сир барлыҡҡа килеүен һәм уның менән нимә эшләргә икәнен генә һөйләп бирә алмаҫ. Ҡартлыҡ еңеләйеүенең сәбәптәре табиптарға билдәле түгел һәм уны дауалау ысулдары ла юҡ һымаҡ. Был бик насар, сөнки еңеләйеү сирләүсе өсөн генә түгел, уның тирә-яғындағылар, бигерәк тә балалары өсөн насар. Улар алйотлана, һуңғы аҡылын һәм оятын юя барған ата-әсәһен оҙаҡ йылдар тәрбиәләргә тейеш. Көнбайышта был проблеманы ябай ғына хәл итәләр: еңеләйгән ата-әсәләрен махсус пансионаттарға, махсус йорттарға йәки шифаханаларға тапшыралар. Әммә беҙҙә улай ҡабул ителмәгән һәм бер һүнеп барған яҙмышҡа тотош ғаилә ғүмерен бағышлай, ғүмер йылдарын, көсөн, сәләмәтлеген әрәм итә. Ә еңеләйгән кешенең хәле яҡшырмай, насарая ғына бара. Ундай оло кеше менән бер фатирҙа йәшәүселәр невротикка әйләнә, балалар бала сағын күрмәй һәм күңел йәрәхәттәре ғүмерлеккә ҡала. Иң насары - еңеләйгән оло кеше вафат булғанда ғаилә ағзаларының сәләмәтлеге бөтөнләй ҡаҡшаған булыуы һәм улар араһынан кемдер эстафета таяғын үҙенә алыуы мөмкин. Артабан балалар инде икенсе ауыр сирлене тәрбиәләргә тейеш була.

Быларҙы нимә өсөн һөйләйем. Беҙ бит намыҫлы. Әммә аҡылы булған кеше проблеманы хәл итергә һәм уның күҙенә тура ҡарарға тейеш, ә унан ҡасырға түгел. Еңеләйгән кешене профессиональ тәрбиә булған махсус пансионаттарға тапшырырға кәрәк. Хәҙер ундай түләүле һәм бушлай (социаль) пансионаттар бик күп.

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**



## 5 НОЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Новости.
6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.50 Х/ф "Дети Дон Кихота".
8.20 Х/ф "Полосатый рейс".
10.00 Новости.
10.10 "ДОстояние РЕспублики: Джо Дассен".
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф "Однажды в Париже. Далида и Дассен". [12+]
13.30 Большой праздничный концерт "25 лет "Авторадио".
15.35 Х/ф "Бриллиантовая рука".
17.30 Премьера. "Русский ниндзя". Новый сезон.
19.30 "Лучше всех!"
21.00 Время.
21.20 Т/с Премьера сезона. "Мажор". [16+]
22.20 Х/ф Премьера. "Контрибуция". [12+]
1.40 Д/ф "The Rolling Stones". Ole, Ole, Ole". [16+]
3.40 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Т/с "Дневник свекрови". [12+]
13.20 Х/ф "Зинка-москвичка". [12+]
17.30 Большой праздничный бенефис Елены Степаненко "Свободная, красивая..." [16+]
20.00 Вести.
21.00 Т/с "Годунов". [16+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". Специальный выпуск. [12+]
2.00 Х/ф "София". [16+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Сарила. Затерянная земля". [0+]**
**9.30 Х/ф "Моя звезда". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 "Это мы!" [6+]**
**12.30 "В единстве - сила". [12+]**
**14.00 "Знакомьтесь, я - башкир!" [6+]**
**15.15 "Страна поющих цветов". [12+]**
**15.30 "Это мы!" [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 I Международный музыкальный фестиваль Ильдара Абдразакова. Гала-концерт. [12+]**
**18.15 Бизнес-проба. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.50 Хоккей. КХЛ. ХК "Нефтехимик" (Нижнекамск) - ХК "Салават Юлаев" (Уфа).**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Күстәнәс. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.45 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Ловушка для одинокого мужчины". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Таланты и поклонники". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 6 НОЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 6 ноября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Мажор". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 "На самом деле". [16+]
1.00 "Время покажет". [16+]
2.00 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Модный приговор.
4.00 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
21.00 Т/с "Годунов". [16+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Ликвидация". [16+]

### БСТ
**7.00, 9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**11.00 Наука 102. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Бизнес-проба. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Конкурс "Красивое село-2018". [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [0+]**
**15.30 Йырлы кәрәҙ. [6+]**
**15.45 Бауырһаҡ. [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Семәр". [0+]**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.15 Бизнес-обзор. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**23.00 Әлләсе... [12+]**
**23.45 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Одинокая женщина желает познакомиться". [18+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Осень". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 7 НОЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 7 ноября. День начинается".
10.00 Д/ф "Парад 1941 года на Красной площади". [12+]
11.05 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Мажор". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 "На самом деле". [16+]
1.00 "Время покажет". [16+]
2.00 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Модный приговор.
4.00 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Годунов". [16+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Ликвидация". [16+]

### БСТ
**7.00, 9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**11.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Конкурс "Красивое село-2018". [12+]**
**15.00 Тәмле. [12+]**
**15.30 "Городок АЮЯ". [0+]**
**15.45 "Ал да гөл". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Физра". [6+]**
**16.45 Имею право. [12+]**
**17.00 Книга. [0+]**
**17.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Хазина о Хазине. [0+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 "Спорт. Борьба - жизнь". XXXIII Всероссийский турнир по греко-римской борьбе. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Ключи от неба". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Сердце не стареет". [12+]**
**4.45 Весело живем. [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 8 НОЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 8 ноября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Мажор". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 "На самом деле". [16+]
1.00 "Время покажет". [16+]
2.00 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Модный приговор.
4.00 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Годунов". [16+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Ликвидация". [16+]

### БСТ
**7.00, 9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**11.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 "Спорт. Борьба - жизнь". XXXIII Всероссийский турнир по греко-римской борьбе. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Конкурс "Красивое село-2018". [12+]**
**15.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**15.30 Байтус. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 Сыйырсыҡ. [0+]**
**16.45 Моя Республика. [12+]**
**17.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 "Песня года". [12+]**
**23.00 Алтын тирма. [6+]**
**23.45 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Не бойся. я с тобой". [12+]**
**3.00 Бәхетнамә. [12+]**
**4.00 Спектакль "Бермудский треугольник". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 9 НОЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 9 ноября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Голос. Перезагрузка". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "Duran Duran": История группы". [16+]
1.40 "В наше время". [12+]
2.35 "Мужское / Женское". [16+]
3.30 Модный приговор.
4.30 "Давай поженимся!" [16+]
5.20 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 "Юморина". [16+]
23.30 "Мастер смеха". [16+]
1.20 Х/ф "За лучшей жизнью". [12+]

### БСТ
**7.00, 9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Морские динозавры: путешествие в доисторический мир". [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Спектакль "Счастье". [12+]**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.45 Конкурс "Красивое село-2018". [12+]**
**15.00 Башҡорттар. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.00 "Гора новостей. [6+]**
**16.15 "Зеркальце. [6+]**
**16.45 Победить себя... [6+]**
**17.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**17.45 Специальный репортаж. [12+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**19.00 Бирешмә. Профи. [12+]**
**19.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Позывной "Барс". [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**22.00 Моя семья. [6+]**
**23.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Ночные забавы". [12+]**
**2.45 Спектакль "Выходили бабки замуж". [12+]**
**4.30 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**5.30 Д/ф "Морские динозавры: путешествие в доисторический мир". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 10 НОЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Новости.
6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.40 Х/ф "В полосе прибоя".
8.10 Играй, гармонь любимая!
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря.
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Любовь Полищук. Последнее танго". [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "На 10 лет моложе". [16+]
13.10 "Идеальный ремонт".
14.15 "Умом Россию не понять". Концерт Михаила Задорнова. [12+]
16.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
17.30 Премьера. Праздничный концерт в Государственном Кремлевском дворце.
19.40 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 "Кому на Руси жить?!" Концерт Михаила Задорнова. [12+]
0.45 Х/ф "Борсалино и компания". [12+]
2.50 "Мужское / Женское". [16+]
3.40 Модный приговор.
4.40 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 Сто к одному.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Х/ф "Нетающий лёд". [12+]
13.40 "Выход в люди". [12+]
15.00 Субботний вечер с Николаем Басковым.
16.35 "Привет, Андрей!" [12+]
18.45 Х/ф "Сердечные раны". [12+]
23.00 Концерт, посвящённый Дню сотрудника органов внутренних дел Российской Федерации. Прямая трансляция из Государственного Кремлёвского дворца.
1.10 Х/ф "Личное дело майора Баранова". [12+]
3.05 Смеяться разрешается.
4.20 Т/с "Личное дело". [16+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45, 12.30, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Солан и Людвиг: Сырная гонка". [6+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**10.00 Посмотрим... [0+]**
**10.30 "Большой чемодан. [6+]**
**11.15 Күстәнәс. [12+]**
**11.45 Замандаш. [6+]**
**12.00 Тәмле. [12+]**
**13.00 Книга. [0+]**
**13.15 "Сулпан". Сибайскому детскому театру - 25 лет. [0+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**17.00 Колесо времени. [12+]**
**18.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**19.00 Концерт заслуженного артиста РБ Вильдана Яруллина. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.15 Победить себя... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Посмотрим... [6+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Если можешь, прости". [12+]**
**1.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.15 Спектакль "Среда, среда". [12+]**
**4.15 Весело живем. [12+]**
**4.30 Башҡорттар. [6+]**
**5.00 Х/ф "Если можешь, прости". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 11 НОЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.25 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Лекарство против страха".
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф "Пелагея. "Счастье любит тишину". [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф "Михаил Пуговкин. "Боже, какой типаж!" [12+]
13.10 Х/ф "Свадьба в Малиновке".
15.00 "Три аккорда". [16+]
17.00 Премьера. "Русский ниндзя". Новый сезон.
19.00 "Лучше всех!"
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Встреча выпускников-2018. [16+]
0.40 Х/ф "Исход: Цари и боги". [16+]

### РОССИЯ 1
5.05 Субботний вечер с Николаем Басковым.
6.40 "Сам себе режиссёр".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 Сто к одному.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 Вести.
11.20 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
13.40 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.55 Х/ф "Опавшие листья". [12+]
18.50 "Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
23.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 Х/ф "Две женщины". [12+]
2.50 Т/с "Пыльная работа". [16+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Фиксики". [0+]**
**8.30 "Йома". [0+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**10.00 "Перекличка". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [0+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 "Гора новостей. [6+]**
**11.45 Современник. [12+]**
**12.00 Моя семья. [0+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [6+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.45 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**17.00 Концерт Сибайского концертно-театрального объединения. [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Имею право. [12+]**
**19.30 Лидеры региона. [12+]**
**20.00 Әлләсе... [12+]**
**20.45 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 Свидание с джазом. [12+]**
**0.15 Х/ф "Мальчишки". [6+]**
**2.30 Спектакль "Чума на ваши оба дома". [12+]**

Хеҙмәттәшебеҙ Миләүшә Ҡаһарманованың һөйөклө атаһы
**Сәйғәфәр Һиҙиәт улының**
вафаты айҡанлы оло ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**"Киске Өфө"ләр.**

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БЕРЕНСЕ ПРЕЗИДЕНТТАР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**43-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Уҡлау. Сарафан. Азькышет. Сабата. Комик. Атев. Кимоно. Әрме. Оле. Фәнил. Сари. Екке. Кеҫә. Атари. Итек. Тухъя. Үпкә. Коба. Етмеш. Ханбок. Әләм.

**Вертикаль буйынса:** Кокошник. Алмиҙеү. Калфак. Смак. Папаха. Ыҙан. Ҡыртыш. Әтәсе. Әле. Түбә. Тувыр. Хром. Узала. Елкә. Сәукеле. Ярыш. Ситек. Арго. Агрофизика.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Ноябрь (Сәфәр-рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 5 (27) дүшәмбе | 6:58 | 8:28 | 13:30 | 16:00 | 17:30 | 19:00 |
| 6 (28) шишәмбе | 7:00 | 8:30 | 13:30 | 15:58 | 17:28 | 18:58 |
| 7 (29) шаршамбы | 7:02 | 8:32 | 13:30 | 15:56 | 17:26 | 18:56 |
| 8 (30) кесе йома | 7:04 | 8:34 | 13:30 | 15:54 | 17:24 | 18:54 |
| 9 (1) йома | 7:06 | 8:36 | 13:30 | 15:52 | 17:22 | 18:52 |
| 10 (2) шәмбе | 7:08 | 8:38 | 13:30 | 15:50 | 17:20 | 18:50 |
| 11 (3) йәкшәмбе | 7:11 | 8:41 | 13:30 | 15:48 | 17:18 | 18:48 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3 ноябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), комедия 12+

**4 ноябрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

**6 ноябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.) 16+

**7 ноябрь "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры 12+

**8 ноябрь "Руди - never off..."** (А. Абушахманов), Рудольф Нуриевтың ғүмер миҙгелдәре 12+

**9 ноябрь "Эҙләнем, бәғерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**3, 4 ноябрь "Красная шапочка"** (Ш. Перро) 0+

**5 ноябрь "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова) 0+ . Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ




## ИРЕКЛЕ ИЖАДСЫ

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров танылған карикатура оҫтаһы Камил Буҙыҡаевтың Өфөләге "Галерея ART" сауҙа-күңел асыу комплексында асылған шәхси күргәҙмәһе менән танышты.**

Республика етәксеһе рәссамдың 50-гә яҡын эше ҡуйылған экспозицияны ҡарап сыҡты. Карикатураларҙың геройҙары - билдәле сәйәсмәндәр, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, спортсылар, йәмәғәтселәр, күренекле шәхестәр. "Рәсәй һәм Башҡортостан хаҡында һөйләгәндә, сәйәси сатира ниндәйҙер инструмент булараҡ юғалғайны. Республикала ул Камилдың ижады аша тергеҙелә, - тине төбәк етәксеһе. - Камил Буҙыҡаевтың карикатуралары граждандыҡ йәмғиәте сағылышы булып тора". Рәсемдәр көнүҙәк темаға ғышланған, шул иҫәптән чиновниктарға үҙҙәренең етешһеҙлектәрен күрергә мөмкинлек бирә. "Барыһы менән дә ризамын тип әйтә алмайым. Ләкин шуныһы асыҡ: был - республика мәнфәғәттәре менән йәшәгән ирекле кешенең ижады", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты Радий Хәбиров.

## ӨЛӘСӘЙЕМ ЕЛӘНЕ...

**Башҡортостанда йәшәүселәрҙе өләсәй-олатайҙарығыҙҙың йәки башҡа туғандарығыҙҙың милли кейемдә төшкән элекке фотолары менән "Быуаттар аша көмөш тәңкәләр сыңы" фотопроектында ҡатнашырға саҡыралар.**

Проекттың идея авторы - Милли китапхана директоры Айгөл Моратова әйтеүенсә, фотоларҙы унда һүрәтләнгән кешеләр тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт менән Башҡортостандың Милли китапханаһындағы күргәҙмәгә ҡуйыу күҙаллана. Күргәҙмә өсөн 20-гә яҡын герой йыйыу күҙаллана. Фотоһүрәттәр һәм ҡыҫҡаса мәғлүмәттәр яҙылған хаттарҙы "Быуаттар аша көмөш тәңкәләр сыңы" фотопроекты" тигән билдә менән **bashnl@bashnl.ru** почтаһына ебәрергә мөмкин.

## СИМФОНИК ОРКЕСТР, "БҮРЕЛӘР"...

**"Башҡортостан" дәүләт концерт залында күренекле "Бүреләр" башҡорт рок музыкаһы төркөмө симфоник оркестр менән сығыш яһаны. Башҡорт музыканттары ошондай проектты тәүгә ғәмәлгә ашырҙы.**

"Егеттәребеҙҙең эксперимент яһарға ҡурҡмауы, рок музыканы симфоник оркестр менән берләштереүе һәм, иң мөһиме, уларҙың яҡшы килеп сығыуы бик һәйбәт. Бөгөн йәштәрҙе йәлеп итеү өсөн яңы формалар эҙләү һәм бер урында тормау мөһим. "Бүреләр" үҫешә, был ҡыуандыра", - тип билдәләне мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова.

Концертта Линар Дәүләтбаев идаралығында Милли симфоник һәм Йәштәр симфоник оркестры музыканттары ҡатнашты. Дирижер тамашасыларҙы концерт трансляцияһын бер үк ваҡытта инстаграмда алып барыуы менән хайран ҡалдырҙы. Тамашала 16 композиция яңғыраны. Һәр композиция алдынан төркөм солисы Илшат Абдуллин уның нисек яҙылыуы тураһында һөйләне. Аҡмулланың күренекле "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк" шиғри мөрәжәғәте нигеҙендә яҙылған йыр залда йыйылғандарға ялҡынлы саҡырыу булып яңғыраны.

ЯҢЫ КИТАП СЫҠТЫ

# РУХИ ҠИММӘТТӘРЕБЕҘГӘ АРНАЛА

**Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың "Ете йөҙ етмеш ете хәҙис" тигән китабы донъя күрҙе. Был яңы баҫмаға һәм шағирҙың һуңғы йылдарҙағы ижадына ҡағылышлы һорауҙарға яуапты әҙиптең үҙенән алдыҡ.**

**Рауил Төхвәт улы, был китап дини әсбапмы, әллә әҙәби әҫәрме?**

- Был - әҙәби әҫәр. Әммә ябай түгел, ә изге хәҙистәр нигеҙендә яҙылған шиғырҙар. Йәғни, хәҙистәрҙе шиғри формаға әйләндереү ысулы. Ни өсөн былай эшләнде? Рухи ҡиммәттәребеҙ булған хәҙистәребеҙҙе кинерәк ҡыуусы даирәһенә еткереү маҡсатында. Дини яҙмаларҙы һәр кем тота килеп ҡулға ла алмаҫҡа мөмкин, ә уның шиғри формаһын шиғыр һөйөүселәр ҙә, дин менән ҡыҙыҡһыныусылар ҙа уҡырға мөмкин.

**Һуңғы йылдарҙа һеҙҙең хәҙистәргә йышыраҡ мөрәжәғәт итеүегеҙ ул дингә йөҙ бороуығыҙмы?**

- Дин минә бала саҡтан ят булманы. Өләсәй-олатайҙарымдың Ҡөрьән уҡығанын, намаҙ ҡылғанын күреп үҫтем. Әммә үҙебеҙ был изге ғәмәлдәргә яҡын булманыҡ.

Хәҙистәр менән танышa башлай алыуым яҙмышымдағы иң ҡыуаныслы ваҡиғаларҙан ул. Әгәр ошо бәхеткә насип итмәһә, был яҡты донъяларҙа ниндәй хазиналарҙан мәхрүм йәшәгән булыр инем. Аллаға шөкөр, ғүмер юлым был аҡыллы ғилем донъяһын урап үтмәне.

Хәҙистәрҙе мин тәү тапҡыр ишетеп белдем. Беренсе тыңлағанда уҡ уларҙағы хикмәтле һүҙҙәр арбап алды. Уларҙы эҙләп табып, уҡып, күңелемә һендереп ерештем. Һәм тора-бара был яҙмаларҙы шиғри юлдарға һала башланым. 2001 йылда "Йөҙ ҙә бер хәҙис", унан "Өс йөҙ ҙә өс хәҙис", әле "Ете йөҙ етмеш ете хәҙис" донъя күрҙе һәм, алға китеп әйтәйем, киләсәктә мең дә бер хәҙискә еткерергә иҫәп бар, Алла бойорһа.

**Рауил ағай, "Атлы азамат" тигән китабығыҙ ҙа яңы сыҡты. Әҫәрлеге ниндәй был китаптың?**

- Башҡорт халыҡ йыр-ҡобайыр-оҙон көй-сеңләүҙәрендәге атҡа бәйле шиғри юлдарҙан тупланған был китап. Ҡөрьән-Кәримдә "Яу табышы" тигән сүрә бар. Тәфсирҙәрҙә аңлатыуҙарынса, улъяны гәҙел итеп бүлгәндә, яу атына ике өлөш, һыбайлыға бер өлөш, йәйәүле яугирға бер өлөш бирелгән. Яу атының өлөшө яугирҙыҡына ҡарағанда ике тапҡырға артығыраҡ һаналған. Ошонан ғына сығып, уйлап ҡарағыҙ. Башҡорттарҙа аттан башҡа бер хайуан йәки йәнлеккә лә ул ҡәҙәр хөрмәт үә һөйөү белдерелмәй, башҡа бер хайуан йәки кейеккә лә ул ҡәҙәр матур һүҙҙәр әйтелмәй. Күпме йырҙарыбыҙҙа аттарға ҡағылған иҫ киткес юлдар бар. Мин уларға ғүмер буйы ғашиҡ булдым. Һәм ошо юлдарҙы туплап ҡуйырға тиғән хыял йөрөттөм. Ниһайәт, был теләктәрем тормошҡа ашып, ошо "Атлы азамат"ты булдырҙы ла инде.



**ӘЙТКӘНДӘЙ...**
**Рауил ағай Бикбаев 2019 йылдың тәүге яртыь йыллығына 50665 индекслы "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 10 кешегә - "Ете йөҙ етмеш ете хәҙис", 10 кешегә - "Атлы азамат", 10 кешегә "Оноторлоҡ булдымы ни?.." китаптарын бүләк итә. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

# ОЖМАХТАҒЫ УРЫН...

## кемгә тәтей?

Бер ирҙең ҡатыны үлһә, алтмыш ҡатын ҡыуана, бер ҡатындың ире үлһә, алтмыш ҡатын ҡайғыра.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ул үҙен аҡыл эйәһе тип иҫәпләй һәм үҙенең ҡасан да булһа был донъяны ташлап китәсәген аңлап, бер теләк менән генә янып йәшәй: теге донъяла ожмахҡа эләгергә, бының өсөн фанилыҡта саҡта мөмкин тиклем күберәк изге эштәр башҡарып, Хоҙай алдында яҡшы күренергә. Шуға ла ул мосолмандарға фарыз бар ҡағиҙәләрҙе еренә еткереп үтәй, намаҙҙарын да ваҡытында уҡый.**

**Берҙән-бер көндө ул үҙенең генә гонаһ ҡылмауы етмәй, ә әйләнә-тирәләгеләрҙе лә насар эштәрҙән ҡурсырға кәрәк, тигән ҡарарға килә. Уның игтибары күршеһенә, бик хәтәр ҡомарлы уйынсыға йүнәлдерелә. Күршеһенең уйынға әүәслеге ауырыуға әйләнгән була. Аҡыл эйәһе күршеһен был насар ғәҙәтенән арындырырға була. Ләкин өгөтләүҙәр генә бер файҙа ла бирмәҫен дә аңлай. Шуға ла аҡыл эйәһе икенсе төрлө юл һайлай: күршеһе ҡомарлы уйын уйнарға киткән һайын уның өй тупһаһына ауыр гонаһ йөгө тураһында иҫкәртеү өсөн бер таш һалып ҡуя. Уйынсы өй тупһаһы алдындағы таш өйөмө үҫкәндән-үҫә барғанын күрә. Ул күршеһендәге аҡыл эйәһенең уны өгөтләмәй, һүҙҙәр менән битәрләмәй генә уны гонаһы тураһында иҫкәртеүен аңлай. Шуға ла йортона ҡайтҡан һайын уйынсы үҙенең ихтыярһыҙлығы өсөн оялып, шулай тип уйлана: "Күршеһе уның насар ғәҙәттәре өсөн көйөнә, Алланан уның гонаһтарын ярлыҡауҙы һорай. Ниндәй түбән йәнле әҙәм мин! Ниндәй гонаһлымын мин! Аҡылым менән күршемдең тырышлыҡтарын таныйым, уға рәхмәтле булыуҙан йөрәгем шартлар сиккә етә." Бер саҡ уйынсы хатта мәсеткә бара һәм уның күршеһенең уға күрһәткән изгелеген тейешенсә баһалаһын өсөн, Хоҙайға ялбара.**

**Күп йылдар үтә. Баяғы гонаһлы уйынсы ла, уны ҡурсалаусы изге кеше лә баҡыйлыҡҡа күсә. Аллаһ илсеһе уларҙы баҡыйлыҡ ҡапҡаһы алдында ҡаршылай ҙа, "Һин минең менән ожмахҡа бараһың", тип, уйынсыға ишаралай. Ә изге кешегә тамуҡ ҡапҡаһын күрһәтә. "Юҡ, юҡ, - тип ҡысҡыра уйынсы. - Һин яңылыштың. Минең урыным ожмахта түгел, мин оло гонаһ эйәһемен. Ожмахтағы урын минең күршемдеке..." "Һинең икеләнеүҙәрең урынлы түгел, - ти Алла илсеһе. - Мин Хоҙай ҡушҡанды ғына эшләйем. Күп һөйләнеп, ожмах ҡапҡаһы алдындағы башҡаларҙы тотҡарламаҫ өсөн, аңлатам: һин гонаһ ҡылдың - һүҙ юҡ. Әммә гонаһтарың тураһында иҫкә алған һайын һин оялыу һәм үкенеү кисерҙең. Ә йөрәгеңдә һин оло изгелек йөрөттөң - һинең турала хәстәрлек күреүсе күршеңә рәхмәт тойғоһо ул. Күршеңә килгәндә иһә, ул бөтөн ошо йылдар буйы үҙенең ңдһсеһен генә ҡандырҙы. Ул һинең гонаһлы йәнеңдән алда иң тәүҙә үҙенә сауап алыу тураһында уйланы. Ундай тәкәбберлек һинекенә ҡарағанда ла гонаһлыраҡ. Уның һинең тупһаңа өйгән һәр ташы уның камил булмауын белгерткән үлсәү ягында булып сыҡты..."**

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

# ӘСКӘН ИР - ИЛ БЕТЕ

- Яман һүҙ - яман шеш, мәлендә һытырға кәрәк.
- Ауыл ауыҙы - ҙур илək, һүҙенде һөйлә үлсәп.
- Аҡыллыла алтын һүҙ, яуыҙда утлы ҡүҙ.
- Кейем матурлығы йәнгә рәхәтлек бирмәй.
- Күпме һөйләһәң дә һандуғас булып булмай.
- Әскән ир ил бете, әскән ҡатын сусҡа ите.
- Сәғәт һайын кейем алыштырыу - аҙғын ҡатын ғәҙәте; көнө-төнө йокола - ялҡау ирҙең ғәҙәте.
- Күк күкрәр - үлән үҫер, йылы һүҙҙән күңел үҫер.
- Яҡшы ат үҙ өйөрөн һәр ҡайҙан эҙләп таба, илен һөйгән ир үҙ төйәгенә үрмәләп тә ҡайта.
- Илатмағыҙ баланы: бала илаһа тау илай, тау илаһа ер һелкенә.
- Үҙ телен белмәгән, үҙенсә һөйләмәгән - үтмәҫ бысаҡ ул.
- Еҫкәнеү, темеҫкәнеү, ҡыҫтырылыу, көсләшеп тағылыу - дан эҙләү ғәҙәте.
- Күп һөйләмә юҡ-барҙы, өнөң быуылыр.
- Алдаҡтан ялған, ялғандан гәйбәт, гәйбәттән талаш тыуа - һәр береһенән алыҫ бул.
- Үҙ телен онотҡан, тәрән соҡорға осҡан.
- Балаһын үҙ теленә өйрәтмәгән - тамуҡтың икенсе баҫҡысына эләккән.
- Тел - нәҫел һаҡлаусы бөйөк сара.
- Үҙенде, баланды гонаһҡа батырма - үҙ телендән айырылма, айырма.
- Телен белгән - данлы, белмәгән - оло бәләле.
- Үҙ телеңде белеү - алтын, онотоу - ялҡын.
- Эт ырылдар, бәйләнсек шарылдар.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ТЕЛЕБЕҘ ЫНЙЫЛАРЫ

**Халҡыбыҙҙа шундай һутлы һәм тере ҡуҙҙай баҙрап тороусы, ынйы кеүек аҫыл һүҙҙәр күп. Улар төрлө һүҙлектәргә инеп, халҡыбыҙҙың алтын фондын тәшкил итә. Үкенескә ҡаршы, һуңғы быуын яҙыусыларының әҫәрҙәренә лә ул һүҙҙәр һирәк инә, улар, асылда, төпкөл ауылдарыбыҙҙа йәшәүсе инәйҙәребеҙҙән, олатайҙарыбыҙҙың тел осонда тере көйө йәшәй. Ул ынйыларҙы беҙ гәзитебеҙҙә "Әсәйем лөғәте" рубрикаһында бирә барабыҙ, әлбиттә. Хәтергә төшөрөүҙе дауам итәйек.**

# АТА-БАБАҢ ҠАЛДЫРҒАН ҺҮҘ

**Арамһа** - һауалы; эскерле; ялағай.
**Арҙаҡ** - тәртип, йыйнаҡлыҡ.
**Арйа** - сит, ят.
**Арҡа** - ҡалҡыулыҡ; һырт.
**Арманһыҙ** - оятһыҙ; һөйкөмһөҙ.
**Арсау** - ҡурсалау.
**Артаған** - артыҡ әсеғән, ҡырҡыу.
**Асабы** - көн биҙәге.
**Асамай** - аймылыш.
**Асарбаҡ** - ҡарун, бирән.
**Асҡаҡ** - ҡаҡса.
**Аслан алағайымға** - алъюҫыҡҡа.
**Асмандан** - көтмәгәндә.
**Асығауыҙ** - ваҡ бәлеш.
**Аҫау** - күпте күргән; ярһыу.
**Аҫҡылыҡ** - урҙа; аҫҡаҡ.
**Аҫырау** - йортта ҡарала торған мал; сит кеше тәрбиәһендә.
**Аташ** - тартына белмәгән кеше.
**Атлам** - аҙым.
**Ауан** - тәүәккәл; еңел аҡыллы; ғәмһеҙ.
**Ауҙауа** - тол ҡатын.
**Аулау** - йыуатыу; әүрәтеү; яңылышыу.
**Ауһар** - исәр.

**(Дауамы. Башы 43-сө һанда).**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 26 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 1980/10